*Ринат ҠАМАЛ*

# «Мединститут» эше*

## Роман**




** Әҫәр, ысынбарлыҡҡа таянып яҙылһа ла, тормошта ниндәйҙер документ, һылтанма була алмай, ул барыбер авторҙың шәхси тойғолары, уй-хыялдары емеше генә. Шуның өсөн дә романда тасуирланған ваҡиғалар ысынбарлыҡҡа тиңәл тап килә, унда һүрәтләнгән персонаждар кемгәлер төбәлгән, тип уйларға ярамай.*

*Автор.*

*** Роман журнал вариантында ҡыҫҡартылып бирелә.*

*Профессор Зәйнулла Әмин улы*
*Ихсановҡа арнала*

## Беренсе бүлек

Иртүк ректор Ислахов кабинетында ине. Эш көнө һәүетемсә генә башланғайны. Секретарша ҡыҙ килде, бер нисә урындан телефондан шылтыраттылар, аҙаҡ ректорҙың үҙен милиция менән тоташтырҙылар. Милиция ғынамы, Эске эштәр министрлығы менән!

Хәтәр. Ректор хатта трубканы ҡолағында тотҡан көйө тороп баҫты: мединститут студенттары һуғышҡан, береһе икенсеһен сәнскән! Яралы егетте дауаханаға оҙатҡандар, операция яһағандар!

— Нисәнсе больницала?.. — Ректор үҙенең гөрһөлдәк тауышын ишетмәне.

— 8-селә...

Профессор дауаханаға шылтыратты.

— Студент ауыр хәлдә, ярай, аңына килде... — Ректор трубканы атып бәрҙе. — Тихоновский... — Башында ҡуйырған уйҙары, әллә нисәмә нур ептәре булып, ян-яҡҡа һибелде: Тихоновский тигәндәре опера һәм балет театры режиссерының улы түгелме? Юҡтыр!

Парткомда йәнә шул яңылыҡты иҫенә төшөрҙөләр.

— Зыя Ислахович, дауалау факультетының икенсе курс студенты Шаһиәхмәтов шул уҡ факультеттан бишенсе курс студенты Тихоновскийға сәнскән, — тине партком секретары Герасимов.

— Шаһиәхмәтов ҡайҙа?

— Ҡиров районы СИЗО-һында! Нишләйбеҙ, Зыя Ислахович?

— Больницаға барығыҙ, Тихоновскийҙың ата-әсәһен күрегеҙ... Туҡта, мин дә барам!

Ректорҙы секретарша туҡтатты:

— Эске эштәр министрлығы!..

— Алло!

— Шаһиәхмәтов эше буйынса! Ректор менән осрашырға ине! Бер сәғәттән буласаҡбыҙ.

...Тихоновскийҙың ата-әсәһе дауаханала икән.

— Берҙән-бер балабыҙҙы!.. Бандит, деревенщина! — Төҫкә-башҡа йәш күренгән ханым күҙ йәшенә төйөлә. Үҙе сибәр бит әле, әммә телендәге тоҙлоборосло һүҙҙәр үҙенә ытырғанып ҡарарға мәжбүр итә; ректор ҙа, партком секретары ла өндәшмәй. Ә атай кеше ситтәрәк баҫҡан. Бите дымһыу, күҙ төптәре шешенгән. Бер төн эсендә кеше ни хәлгә тарый, тип уйланы ректор. Ысынлап та, Тихоновский тигәндәре опера һәм балет театрының баш режиссеры имеш.

...Эске эштәр министрлығы вәкиле менән Шаһиәхмәтовтың эшен тикшереүсе теүәл сәғәт 16-ла ректор кабинетында ине.

— Дауалау факультеты студенты Шаһиәхмәтов Хәлит Балаҡатай районынан, — тип теҙҙе вәкил. — Атаһы күптән вафат, әсәһе Мәҙкүрә Сәбғәр ҡыҙы колхозда һауынсы...

Уның һүҙҙәренсә, институттың 4-се ятағында йома көн танса — йәштәр кисәһе ойошторола. Шунда, Шаһиәхмәтов раҫлауынса, Тихоновский иптәштәре

менән студент ҡыҙға бәйләнә. Шаһиәхмәтов тегеләрҙе тыя. Тихоновский Шаһиәхмәтовҡа һуғып ебәрә. Һуғыш сыға. Егет Тихоновскийҙарға бирешмәй. Ҡүтәрмә алдына сыҡҡас, ҡаланыҡылар (улар өсәү була) кастет килтереп сығара, берәүһе шуның менән Шаһиәхмәтовтың маңлайын яра. (Егеттең башында яраһы бар). Шунда ҡайҙандыр Шаһиәхмәтовтың ҡулында бәке пәйҙә була. «Инде бөттөм, мине үлтерәләр икән, тигәс, бәкегә тотондом», — тип яҙылған аңлатмала. Бәке егеттең үҙенеке. Йәнә: Тихоновский Шаһиәхмәтовты «деревенщина», «бында һиңә нечего делать!» тип кәмһеткән.

Тағы министрлыҡ вәкиле һүҙ алды:

— Нисек кенә булмаһын, Шаһиәхмәтов енәйәт ҡылған, кеше ғүмеренә ҡул һуҙған... Ярай, 8-се дауахана хирургтарына рәхмәт. Был хәл тотош ятаҡ халҡы алдында була. Әле шаһиттарҙан һорау алабыҙ.

* * *

Ректор йөҙәп бөттө. Әле дауаханаға, әле СИЗО-ға саба; партком ултырышында ла, Эске эштәр министрлығында ла шул һүҙ: студенттар сәнсешкән, опера һәм балет театры режиссерының берҙән-бер балаһы...

Тәкәте ҡороно Ислаховтың. Тоталар ҙа бәйләнәләр, йәнәһе, ауыл балаһы ҡала егетен үлтерә яҙған... Йәнәһе, теге ҡырағай... Ә һин, Ислахов, ректор башыңа «ауыл балалары» тип суҡындың. Шулай була ул: һинекеләр, ана, ҡаланыҡыларға көн күрһәтмәй. «Ауылдыҡылар» тип йүгереп йөрөүеңдең һөҙөмтәһе шул булды! Һин уларҙы үҙең осондорҙоң! Имеш, институтҡа күпләп ауыл балаларын йыя, ауыл еренә күберәк кадрҙар әҙерләй. Ә улар?.. Уларҙы институтта уҡытырға түгел, ә урман киҫтерергә, тауҙа таш аҡтартырға кәрәк. Ер һөрҙөрөргә, мал ҡарарға тейеш ауылдыҡылар! Шаһиәхмәтовты хәҙер төрмәгә ябасаҡтар, ит изгелек — көт яуызлыҡ!

* * *

Мең дә туғыҙ йөҙ ҙә етмеш өсөнсө йылдың яҙы, башҡорт интернаты тәрбиәсеһе Ғафуан Алсынбаев эшкә килә ята ине. Юлы парк аша уҙа. Шунда ҡолағына таныш ауаз салынды: «Йома көнгә ҡуйғандар дөйөм йыйылышты... Әйтәм дә, мединституттың асыҡ партия йыйылышы йома көнгә билдәләнгән!»

«Ҡемдәр икән?» — Ҡурайсының тыны ҡурышты, күҙҙәрен бызмырлатты. Әһә, ағас артында — таныштары: институт проректоры Һөйәрғолов менән Баҡаев гәпләшә.

— Баҡаев, — тип бышылдай проректор Һөйәрғолов, тауышы ҡырҡыу, һулышы өҙлөгә: — Һин беҙҙә уҡытҡан Ҡыяметдиновты беләһең бит.

— Беләм, — ти Баҡаев, интернат-мәктәптең директор урынбаҫары.

— Шуға әйт әле: йома көн йыйылышта мине яҡлап һөйләһен!..

— Йә...

— Ҡыяметдинов — минең уҡыусым, тыңлар... Килештекме?

— Килештек. — Завуч Баҡаев баш ҡаға.

Ҡурайсы-тәрбиәсе тегеләргә күренмәй генә үтеп китте. Интернатҡа ашыҡты. Ишеткәндәренән шаңҡығайны, сере эсенә һыймай, күнәгенән ашҡан һыуҙай, ситкә түгелеп бара. Нишләргә?

Һөйәрғолов менән Баҡаев — уның дуҫтары бит, дөрөҫө, әшнәләре. Улар ни уйлап йөрөй, нимәгә әҙерләнә? Мединститутта партия йыйылышы була, тиҙәр. Һөйәрғолов — институт проректоры... Туҡта, улар ни көҫәй, был хәбәр артын-

да нәмә ята? Ғафуан ишеткәйне бит: мединститут ректоры башҡорт кешеһе, ә Һөйәрғолов күптән ректор креслоһы хаҡында хыяллана... Шулар ректорға ҡаршы берәй ау-фәлән ҡормаймы, берәй әкәмәт нәмә уйлап йөрөмәйме?

Ғафуан Алсынбаев тыныслана алманы. Был хәбәр уға ла ҡағыла, эйе, уның ихтыяждарына бик тә яҡын һымаҡ тойолдо. Юҡ, тине ул күңеленән, был — фетнә, был башҡортҡа ҡаршы хөсөт... Һөйәрғолов, моғайын, башҡорт ректорын бәреп төшөрөргә маташалыр, партия йыйылышы шуның өсөн саҡырыла... Юҡ, Ғафуан Алсынбаев башҡортҡа ҡағылған был эшкә битараф була алмай. Хәбәрҙе нисек тейешле урынға еткерергә?

Тағы икеләнде: Һөйәрғолов та, Баҡаев та ҡурайҙа уйнағанын ярата, бергә эшләйҙәр... Шул кешеләрҙе нисек һатырға? Юҡ, юҡ, башҡорт кешеһе һатлыҡ түгел. Ғафуан — офицер, осоусы, был — мәсхәрә.

Йөрөй торғас, тағы икенсе уй тәүге фекерҙе баҫып китә. Ни хәл ҡылырға, ҡайһылай ғына итергә? Уҡыусылар араһында йөрөп ята, башында — шул сер. Дәресен илке-һалҡы үткәрҙе, нишләргә? Ул — ябай бер тәрбиәсе, ә институтта ғәләмәт эштәр ҡылына: унда ректор креслоһы өсөн алышалар. Һөйәрғолов башҡорт ректорын бәреп төшөрөргә яҫҡына, уға интернат завучы Баҡаев ярҙам итә, ә тәрбиәсе Ғафуан бер ни ҡылмай, хәлде ситтән күҙәтә... Һөйәрғолов менән Баҡаев уға әшнә, әммә милләткә ҡағылған мәсьәләлә дуҫ та, әшнә лә юҡ, бары ил, халыҡ яҙмышы ғына ҡала, ул ғына иң оло инаныс... Халҡы ихтыяжы, уның хоҡуҡтары хәл ителәсәк икән йома көндө үтәсәк партия йыйылышында.

Ғафуан мәғариф министрлығындағы таныштарына, мединституттағы яҡташына әйтәсәк: институт проректоры менән интернат завучы башҡорт ректорына ҡаршы... Был — ябай ғына хәбәр түгел, был — бола башы, оло ғауға ойотҡоһо!

Ҡурайсы Алсынбаев көс-хәл эш сәғәте үткәнен көттө, хәҙер икеләнмәне: тиҙерәк барып етергә, хәбәрен тейешле кешеһенә еткерергә!

* * *

Мединститутта асыҡ партия йыйылышы үткәрелеүе хаҡындағы хәбәр яңылыҡ түгел ине. Бынан ике ай элек обкомға «бишәү»ҙең хаты барҙы. Унда профессорҙар мединституттағы етешһеҙлектәр, ректор Ислаховтың артабан вузға етәкселек итә алмауы, үҙ тирәһенә ҡуштандарҙы йыйыуы, коллективтағы мораль мөхиттең боҙолоуы хаҡында яҙа. Төрлө дәлилдәр килтерәләр. Шуларҙың иң хәтәре, әлбиттә, ҡыш көнө бөтә институтты, хатта бөтә ҡаланы тетрәткән ваҡиға — дауалау факультеты студентының үҙ һабаҡташын сәнсеүе. Был аянуслы хәл бар студент халҡын, бөтә институтты аяҡҡа баҫтырҙы, юғарылағы даирәләргә тәрбиә эштәренең бик, бик түбән ҡуйылыуы хаҡында хәбәр ҡуйыртырға мөмкинлек бирҙе. Әкәмәт. Обкомға хат яҙыусылар бөтә ошо хәл-әхүәлдәр тураһында тасуир итә, обкомдың вуз партия ойошмаһы эшенә ҡыҫылыуын, партия ағзаһы Ислаховтың эшмәкәрлегенә лайыҡлы баһа бирелеүен талап итә. Бик тә етди мәсьәлә күтәрәләр, үҙҙәрендә генә хәл итә алмағас, өлкә комитетына мөрәжәғәт иткәндәр. Обком иһә үҙ яғынан эште ҡыҫҡа тотто: тиҙ арала партия комиссияһы төҙөлдө, ул ике ай буйы институттағы хәлде өйрәнде, хатта күрһәтелгән етешһеҙлектәрҙе тикшерҙе.

Дүрт кешенән торған партия комиссияһы обкомға тикшереү һөҙөмтәләрен еткерҙе. Обком һығымталар буйынса институтта асыҡ партия йыйылышы үткәрергә тәҡдим итте. Хәҙер барыһы ла шул мәшәҡәт менән мәшғүл, бөтәһенең телендә шул йыйылыш. Партия комиссияһы ла, институттың парткомы ла уға ныҡлап әҙерләнә.

Институт йәмәғәтселеге, уҡытыусылар ике яҡҡа бүленде: берәүҙәр ректорҙы ғәйепләй, уны урынынан «ҡолатыу» хаҡында һүҙ ҡуйырта, ә икенселәр Ислаховты яҡлай, бөтә көстәре менән уны вазифаһында ҡалдырыу тураһында хыяллана.

Күрәһең, алыш хәтәр булмаҡсы, яҡтар йәнтәслимгә бер-береһе менән көрәшмәксе. Имеш, асыҡ партия йыйылышы буталышҡа нөктә ҡуя, бәхәсте йәһәт кенә хәл итә, яҡтарҙы тынысландыра, ҡупҡан дауылды баҫа була.

Ислаховсыларға ҡаршы торған һөйәрғоловсылар шулай фараз итте: ниһайәт, улар еңә, олоғайған ректорҙы урынынан бәреп төшөрә... Партия комиссияһының да ихтыяры шулайыраҡ, ул комиссияны иһә обком үҙе яҡлай.

* * *

Һөйәрғоловсылар был алышҡа күптән әҙерләнә ине. Ректор Ислахов олоғайҙы, етте, уның заманы үтте, хәҙер кәмәнең ҡойроғон улар тоторға тейеш. Ислахов үҙ дәүерендә күп эш ҡырҙы: институтта ауыл балаларын ҡабул итеү өс проценттан ҡырҡ өс процентҡаса үҫте, әүәле илдәге элиталы был уҡыу йортонда, ғәҙәттә, Өфө түрәләренең генә балалары уҡый ине. Өфөгә үҙенең тоҡомдаштарын килтереп тултырҙы, башта башҡорт интернатын тамамлаусы балаларҙы күпләп йыйғайны, һуңынан ҡабул итеү комиссияһына төпкөл ауыл мәктәбе уҡытыусыларын ылыҡтыра, шулай ҡараңғы төбәк балаларын йыя башланылар. Был хәл барыһына ла тиерлек мәғлүм ине, аҙаҡ хәбәр обкомға уҡ барып етте. Обком медицина институтына урам аша ғына, тәҙрәләре ҡапма-ҡаршы.

Былай вуз Рәсәй Федерацияһы министрлығы иҫәбе буйынса медицина институттары араһында алдынғы булды: уға бер нисә йыл рәттән күсмә Ҡыҙыл байраҡ тапшырылды, ректор Ислахов дәүерендә санитар-гигиена һәм стоматология факультеттары асылды, ике ятаҡхана һалынды, хәҙер институттың яңы корпусын төҙөү хаҡында план ҡоралар. Ректорҙың инициативаһы, туранан-тура юллауы буйынса вуздың ғилми советына докторлыҡ диссертацияһы яҡлау хоҡуғы бирелде.

Һөйәрғоловсылар быларҙың бөтәһе тураһында ла белә, хатта ректор Ислаховты Мәскәү яҡлауы ла хаҡ. Әммә, Һөйәрғолов әйтмешләй, Мәскәү йыраҡ, ә бында — Өфө, уның үҙ ихтыяры бар! Ислаховты Мәскәү яҡлаһа ни, Һөйәрғоловты Өфө ҡурсалай!

Проректор уйынса, Мәскәү кешеһенә ҡаршы обком кешеһе баҫа... Кем кемде? Кем оһоллораҡ? Уны обком, Алламоратов үҙе яҡлай! Башҡортостанда бөтә власть обком ҡулында ла баһа.

* * *

Проспектта «Өфө» ҡунаҡханаһы йәйрәй. Аҡ түшен кирә тирә-йүнгә. Хәтәр. Йәнәһе, күрегеҙ мине, һоҡланығыҙ, тип ирәбеләнә.

Ҡунаҡхананан саҡ ҡына аҫҡа төшһәң, башҡорт интернаты. Унда ауылдан йыйылған балалар уҡый. Элекке хәрби осоусы, хәҙер тәрбиәсе Ғафуан Алсынбаев шул интернатта эшләй. Юлы «Өфө» эргәһенән үтә, ә ҡунаҡхана янында — проректор Һөйәрғолов фатиры. Алсаҡ кеше, асыҡ-яран: түгелеп көлә, эс-бауырыңа инә. Осоусы менән осрашҡан һайын алыҫтан уҡ сәләмләй:

— Һо, минең ҡурайсы ағайым! — Тәүләп үҙе күреп ҡала, башлап күрешә. Ҡосаҡлап ала тәрбиәсене.

Һөйәрғоловтың яҡташы ла интернатта эшләй. Завуч Баҡаев, йәки, былай әйткәндә, Баҡай.

Һөйәрғолов — интернатта йыш ҡунаҡ, Баҡай дуҫы ла һыйынан баш тартмай. Былтыр йәй урманға сығып ултырыуҙары иҫтә. Шунда ҡыҙыҡ һүҙ булды. Аулаҡ ҡына аҡланда табын ҡорғайнылар. Хәтфә үлән өҫтө йомшаҡ, йырсы ҡоштар һайрай, музыка тирә-йүнде моңға, сихри naҙға күмә.

— Яҡты йөҙөгөҙгә, тәмле һыйығыҙға рәхмәт, дуҫтарым. — Ҡәнәғәт һөйләнде проректор Һөйәрғолов. — Һеҙҙең менән һәр саҡ күңелле. Мең йәшәгеҙ.

— Табип кеше әйткәс, йәшәйбеҙ инде! — Завуч Баҡайҙың һүҙен бөтә ҡор элеп алды.

— Рәхмәт телеңә, изге теләгеңә, Һөйәрғолов абый!

Ғафуан Алсынбаев ҡурай уйнай, ул һәр саҡ ҡурайын үҙе менән йөрөтә, Һөйәрғолов та дуҫының ҡурай уйнауын ярата. Йомшаҡ күңелле кеше ул, икенсе рюмканы түңкәргәс тә, сиселеп китте.

— Егеттәр, бер хыялым бар...

— Әйт!

— Һеҙ йән дуҫтар алдында әйтһәң дә ярай...

Табын тыма.

—Ректор булып алһам, һеҙҙе ташламам!

— Һай, афарин, беҙҙең буласаҡ ректор абзыйыбыҙ! — Барыһы ла тәбрикләй буласаҡ медицина институты ректорын.

Ғафуан Алсынбаев тәүләп шунда ишетте проректор Һөйәрғоловтың оло хыялы хаҡында.

* * *

Бына тағы институт ректоры хаҡында һүҙ сыҡты. Йома көн асыҡ партия йыйылышы була икән, шунда, ниһайәт, мәсьәлә хәл ителәсәк...

Интернаттан эш сәғәтен бөтөрөп сыҡҡас, ҡайтаһы юлда ҡурайсы тағы Баҡаевты осратты. Директор урынбаҫары байрамса кейенеп алған, бисәһен ҡултыҡлаған. Ҡыяметдинов йәшәгән йортҡа боролоп инеп киттеләр.

Алсынбаев үҙенекеләр — ислаховсылар янына ашыҡты. Йәнәһе, йәһәтерәк барып етеп, тегеләрҙе алдан иҫкәртеп ҡуймаҡсы. Башта мәғариф министрлығына тип йыйынғайны, юлда, кире уйлап, мединституттағы яҡташына һуғылырға булды.

Институт уҡытыусыларының ислаховсыларға һәм һөйәрғоловсыларға бүленеүе партия комиссияһы эшләй башлауға тап килде. Нәҡ шул комиссия институттың аҫтын өҫкә килтерҙе, шунан һуң һөйәрғоловсылар барлыҡҡа килде, унан ислаховсылар ойошто. Шыш-быш хәбәр таралды, имеш, ректор өҫтөнән обком исеменә профессорҙар хат яҙған... Институтҡа килгән партия комиссияһы шуны тикшерә... Моғайын, ректорҙы алмаштырып та ҡуйырҙар.

Ислаховсылар, башлыса, башҡорт ғалимдарынан тора ине, улар «бишәү»ҙең кем исеменән эш итеүенә икеләнмәне: һөйәрғоловсылар башҡорт ректорын вазифаһынан бәреп төшөрөргә маташа, был мәлдә йоҡлап ятып булмай — нисек тә ағайҙы яҡларға, ҡырҡыу мәлдә уға таяныс булырға кәрәк. Һөйәрғоловты, моғайын, обкомдың өсөнсө секретары Алламоратов яҡлайҙыр. Ислаховсыларҙың инаныуынса, был көрәш обкомдың үҙенә, уның идеология секретарына ҡаршы аяуһыҙ алыш буласаҡ, асыҡ партия йыйылышында, моғайын, шул мәсьәлә күтәрелер.

Алсынбаев яҡташы — доцент Вәлиевты кафедрала тап итте. Улар бер-береһен ярты һүҙҙән аңлап тора.

— Эйе, асыҡ партия йыйылышы йома көнгә билдәләнгән... — тип дөрөҫләне Вәлиев.

— Улар — Һөйәрғолов менән Баҡаев — паркта һөйләште. Баҡаев әле Ҡыяметдиновтарға инеп китте. Һөйәрғолов үтенесе буйынса, Ҡыяметдинов йыйылышта Ислаховҡа ҡаршы һөйләргә тейеш...

— Ҡыяметдинов, доцент Ҡыяметдинов... — тип һөйләнде Вәлиев. — Шул ҡыутомшоҡ Зыя ағайҙы хурлап торор микән? Зыя ағай уға диссертацияһын яҡлашты... Ә-ә... Уның ғилми етәксеһе Һөйәрғолов ине бит әле. Вәт әй!

— Һөйәрғоловсылар шулай мәрәй йыя...

— Шулай шул, — тип килеште яҡташы. — Уларҙың бөтәһен дә обком эшкәрткән булырға тейеш. Һуңғы арала Мөхәмәтов обкомға харап йышланы лаһа. — Мөхәмәтов тигәне теге «бишәү»ҙең береһе.

— Эйе, уларҙы обком яҡлайҙыр... — Алсынбаев та үкенеп ҡуйҙы.

— Был Алламоратовтың ғына эше булырға тейеш. Ул бит баш идеолог! Башҡорт телендә һөйләшеүселәрҙе ене һөймәй.

— Яҡташ, әле башҡорт интернаты, тибеҙ... Унда ла, паспортына «башҡорт» тип яҙҙырып, беҙҙең «дуҫтар» урынлашып бөткән бит. Завуч Баҡай, Мырҙахан дуҫ, тәрбиә буйынса икенсе завуч Мая ла — шулар яҡлы. Ҡеше иһә интернатты башҡорт интернаты тип һанай...

Доцент Вәлиев та аптыраны.

— Башҡа егеттәргә үҙең әйтерһеңме? — тип белеште ҡурайсы.

— Ярай, әйтермен, — тип, был йөктө үҙ өҫтөнә алды Вәлиев. — Ысынлап та, йома көнгә әҙерләнеп торорға кәрәк, ғауға хәтәр буласаҡ. Әгәр ҙә шунда һөйәрғоловсылар еңһә, парткомиссия «бишәү»ҙең хатындағы факттар дөрөҫләнде, Ислаховтың хилафлыҡтары иҫбатланды, уны ректорлыҡтан алып ташларға, тигән ҡарар сығарасаҡ.

Доцент Вәлиев иң тәүҙә башҡорт ғалимдары — институт уҡытыусылары хаҡында уйланы. Латипов, Ҡотлояров, Мәмбәтов, Күзбәков, Мырҙанов...

* * *

Мазһар Ҡотлояров — медицина институтының философия кафедраһы доценты. Заманында Мәскәүҙә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡлағайны. Темаһы «XVII—XVIII быуаттарҙа интеллигенцияның яҙмышы». Унда ул башлыса рус интеллигенттары хаҡында һүҙ йөрөтә, уҙған быуаттарҙы тикшерә.

Уйланып йөрөй торғас, шуға инанды: нишләп ул үҙ халҡының тарихын өйрәнмәй, башҡорт зыялыларының яҙмышы хаҡында яҙмай? Ул темаға бәйле бай материалы бар... Был турала күп тапҡырҙар уйланғаны булды, халҡының оло тарихы ла был турала фекер йөрөтөргә форсат бирә бит.

Мазһар Ҡотлояров Мәскәүҙә уҡығанда яҡташы Сәғитов ағай менән танышҡайны. Сәғитов Мәскәү университетының тарих-филология факультеты студенты, шулай ҙа, үҙе әйтеүенсә, хәрби кеше булырға хыяллана. Улар ныҡ дуҫлашып китте, гел ҡатышып йөрөнө. Фекерҙәре уртаҡ, уйҙары бер. Бигерәк тә башҡорт тарихы буйынса уй-теләктәре тап килә.

Башҡорт зыялылары тураһында монографияға тотонорға булғас, Ҡотлояров уның менән кәңәшләште.

— «Интеллигенция яҙмышы» тигәс, аптырап та ҡалдым, — тип шикшөбһәһен белдерҙе йәш ғалим. — Беҙ рус интеллигенцияһы тип өйрәнгәнбеҙ, ғилми әҙәбиәт тә башлыса урыҫ телендә...

— Икеләнмә! — тине Сәғитов. Ул хәҙер рухи остаз һымағыраҡ.

Мазһар Ҡотлояров яйлап ҡына тотондо был оло эшкә, әкеренләп факттар тупланы, боронғо яҙмаларҙы өйрәнде. Монографияның темаһы ошолайыраҡ яңғыраясаҡ: «Башҡорт зыялылары яҙмышы».

Әлбиттә, был бик тә ҡатмарлы тема, күп ваҡытты талап итә, тик донъя фәнендә бындай миҫалдар етерлек... Бик ҡыйыу башланғыс, атҡарып сығара алырмы, осона етерме?.. Бик тә әкәмәт тема, ҡапшап алыр ере юҡ, фән донъяһында тиҙ генә яҡлау табыры ла шикле. Шулай ҙа Мазһар тотондо. Башҡа уй төшкәс, шул орлоҡтан тос емеш өлгөрәсәк. Һис шикһеҙ!

* * *

Ректор Ислаховҡа Халыҡтар дуҫлығы ордены бирелеү уңайынан банкет бара. Еләҫ һауа, тәҙрәләр шар асыҡ... Әллә май айы? Тантаналы музыка бүлмә эсенә генә һыймай, урамға ағыла. Бихисап йөҙҙәр, шатлыҡлы көлөүҙәр. Әйтерһең дә, институт фойеһында бал гөжләй. Сал сәсле профессорҙар, доценттар ун туғыҙынсы быуаттағыса ҡупшы фрак кейеп алған, ә ҡатындары — тотош ебәктән... Сәскә атҡан алмағастай, шау аҡтан ғына кейенгән кеүек донъя. Парҙар бейергә төшә. Түңәрәк күл битен гүйә аҡҡоштар тубы һырыған... Музыка көсәйә, парҙар ҡойон уйнатып өйөрөлә. Ректорҙың башы әйләнә. Бәй, ул да фрак кейгән... Ҡатыны Маһираны ҡултыҡлап алған.

Бына улар янына Алламоратов яҡынлаша. Ул да фрактан, имеш, ул да ҡатыны менән... Коммунистар башлығы, ә аристократтарса кейенгән.

— Зыя Ислахович, башлайыҡ!

— Мин риза.

Ҡунаҡтар оҙон өҫтәл артында урын алғас, Алламоратов телмәр тота:

— Зыя Ислахович килеү менән институттың яңы корпусы төҙөлә башланы, ике яңы ятаҡхана... Ректор тырышлығы менән стоматология һәм санитар-гигиена факультеттары асылды, институттың ғилми советына докторлыҡ диссертацияһы яҡлау хоҡуғы бирелде. Уның тырышлығы арҡаһында ауылдан күберәк балалар ҡабул ителә башланы, хәҙер башҡорт студенттары һаны өс проценттан ҡырҡ өс процентҡа тиклем етте. Ур-ра!

Бөтәһе лә ректорҙы ҡотлай. Һөйәрғолов менән Мөхәмәтов та — шунда. Хатта профессорҙар Бикбулатов, Ганцев, Лазарева ханымдар килгән, институттың әлеге партком секретары илгәҙәк Герасимов та, уның урынбаҫары Титов та ҡалмаған. Һаулыҡ һаҡлау министры Рәжәпов менән мәҙәниәт министры Харрасов та бар. Был банкет, ректорға Халыҡтар дуҫлығы ордены биреү мәжлесе, барыһын да дуҫлаштырҙы, барыһын да бер ҡорға йыйҙы!

Ислахов тағы залды байҡай. Таныш йөҙҙәр, ректор өсөн йән атып йөрөүсе доценттар Вәлиев, Мәмбәтов, Ҡотлояров, Латипов, Ҡыяметдинов... Көрәштәштәр, эштәре бушҡа китмәне.

Шарап ҡеүәтле, бокалдар сыңлай. Барыһы ла шат. Тулҡын айҡала-сайҡала, йәш ханымдар бөгөлә-һығыла. Кавалерҙар ҙа йылғыр: инде остом, йығылдым тигәндә аҡ һындарҙы тотоп ҡала. Аҡҡоштар тағы ҡанат яҙа... Баш әйләнә, күҙ алды сыбарлана, аяҡ аҫтында ер зырлап өйөрөлә. Шунда ҡаты ғына ҡул beләгенән матҡып ала. «Кит, мин — кавалер!» — тип саҡ ҡысҡырмай, ҡаршыһында — Алламоратов. Ауыҙы йырыҡ.

— Зыя Ислахович, миңә «һеҙ эсәһегеҙ», тинегеҙ, бөгөн иһә мин — айныҡ, ә бөтә институт — лаяҡыл... Һин үҙең ойошторғанһың шул эскене.

— Шаяртмағыҙ, Алламоратов...

— Минеке өҫкә сыҡты!

Ректор тартҡылаша башлай, ҡапыл милиционерҙар пәйҙә.

— Әйҙә, айнытҡысҡа!

— Туҡта, бөгөн — байрам... Хөкүмәт миңә орден биргән...

— Ха-ха, беҙ бирҙек уны һиңә, беҙ — обком! — Алламоратов күкрәк төйә. — Һине һынамаҡ өсөн генә ойошторҙоҡ был спектаклде. Ясно: профессор Ислахов та лайыҡлы, ул да эсә!

Ислахов айнып киткәндәй итә.

— Зыя Ислахович, ғәфү, был шаярыу ғына. Әйҙәгеҙ, вальсҡа! Рөхсәт итегеҙ, һеҙҙең хәләл ефетегеҙҙе...

Алламоратов йылғыр рәүештә Маһираның беләгенән эләктереп уртаға әйҙәй.

— А-а!

— Зыя, Зыя, тим, нишләйһең? — Ҡәфиә үрһәләнә.

Иләүһерәгән ректор дивандан саҡ ҡолап төшмәй.

* * *

Ректор Ислахов обком секретары Алламоратовты аңлай алмай. Әлбиттә, ул буласаҡ асыҡ партия йыйылышы хаҡында ла уйлай, әммә шул хаҡтағы уйы Алламоратовҡа әйләнә лә ҡайта. Бөтә эштең башы нәҡ уларҙың икеһенең мөнәсәбәтенә барып тоташа бит. Эйе, асыҡ партия йыйылышы буласаҡ, эйе, «бишәү» уның өҫтөнән өлкә комитетҡа хат яҙған, парткомиссия төҙөлгән... Уны обком исеменән Алламоратов үҙе төҙөгән. Ул, ул! Ул ғына булыша! Бөтә был ығы-зығы, асыҡ партия йыйылышы тирәһендә ҡупҡан шау-шыу бер Алламоратовтың эше, Ислаховҡа булған мөнәсәбәте һөҙөмтәһе.

Уның башы ҡасан, ҡайҙа, нисек башланды һуң әле? Ә-ә, теге эскелек хаҡында һөйләшеүҙән һуң. Эйе, эйе!

Ғәҙәттә, мединститут ректорының бәғзе көнө обком секретары кабинетынан башлана ине. Йәшел төҫтә ул. Боронғо хан һарайҙарына оҡшатып эшләнгән йорт. Ниндәйҙер яғы менән Мәскәү кремлен дә хәтерләтә: осло башлы башнялары ла бар.

Ректор эшлекле рәүештә йәшел йорттоң ауыр ишектәрен үҙенә тарта. Тупһала — милиционерҙар. Әллә ҡайҙан танып торалар. Нисә йылдар бит инде — күнегелгән. Нисәмә тапҡырҙар килә, ә барыбер тулҡынлана. Ошо баҫҡыстан күтәрелгәндә күңелен шом биләй. Кеше үҙенән-үҙе йыйынаҡлана, иренен ҡымтый. Шунда ығы-зығы онотола, илке-һалҡылыҡтың әҫәре лә ҡалмай.

Ул Алламоратов кабинетында. Алламоратов үткер зиһенле, аҡыллы кеше. Һәр мәсьәләгә үҙ ҡарашы бар. Күҙҙәре зәп-зәңгәр, тишеп ҡарайҙар. Йылмайһа, шул зәңгәр күл сөңгөлөндә ут тоҡана. Шул осҡондар һиңә лә килеп етә, һине лә йылмайырға мәжбүр итә. Шулай инде түрәләр: үҙҙәре ыңғайына йылмайта, үҙҙәре артынан хафаға һала.

Ислахов Алламоратовҡа күләмһерәберәк ҡарай. Үҙен хаким итеп күрһәтергә ынтылыуы ҡыҙыҡ. Ул секретарь алдында тыйнаҡ, йыйнаҡ. Бигүк бәлтерәп тә төшмәй, сиселеп тә китмәй. Ә Алламоратов кинәйәле күләмәстәр ҙә һөйләп ташлай, иң мөһиме: һәр саҡ үҙ һүҙен өҫкә сығарырға тырыша.

— Эскелеккә ҡаршы партия ҡарары сыҡты, ишеттегеҙме?

— Әлбиттә...

— Ә һеҙҙә студенттар эсәме?

— Эсә! — Ректор тура ярып һалды.

— Ә уҡытыусылар?..

— «Уҡытыусылар..!» — Ислаховтың йөҙө ҡарайҙы, ҡалын ҡашы емерелде. Быны секретарь ҙа күрҙе. — Һе... Уҡытыусылар ғына түгел, һеҙ ҙә эсәһегеҙ бит. Мин дә эсәм.

Бер мәлгә бүлмә эсе шып-шым булды. Ректор ҙа, секретарь ҙа шул өнһөҙлөктән шаңҡып ултырҙы.

— Мин эсәм... Ҡем менән эстем мин, ә?

— Обком секретары профессорҙарға ҡунаҡҡа йөрөй, ә уны берәү ҙә күрмәй ҙә, белмәй ҙә тип уйлайһығыҙмы?

— Ха-ха-ха? Ә һеҙ эсәһегеҙме, Зыя Ислахович?

— Эсәм, әлбиттә. Беҙ бөтәбеҙ ҙә эсәбеҙ.

— Ә партия ҡарары?..

—Партия ҡарары сығыуы яҡшы, хәҙер әҙерәк эсербеҙ.

— Хәйләкәр кеше һеҙ, Зыя Ислахович. — Секретарь үҙен тыйырға, ректор һүҙен онoторға тырышты.

Теленә баш була алмаған ректор ҙа үкенде, йәне ҡарайҙы. Үҙенә ҡайтҡас та, берәүҙе күргеһе, бер эшкә йоғонғоһо килмәне.

Секретаршаһын саҡыртты.

— Берәүҙе лә үткәрмә!

Тәҙрә ҡаршыһына баҫты. Бынан «Йәшел йорт» ап-асыҡ булып күренә. Унда — хан һарайында — ил яҙмышын хәл итәләр. Тәкәббер, өнһөҙ йорт. Ректор яҙмышы ла ошо һарай ҡулында.

Оҙаҡ торҙо, һаман өҫтөн һалманы, үҙен кабинетында ҡунаҡ һымаҡ тотто. Үҙенә: «Һиңә кешеләр араһында түгел, ә ҡарурманда йәшәргә кәрәк!» — тип ҡысҡырғыһы килде.

Күңеленән был донъянан, бәндәләр араһынан айырылғандай булды. Гүйә, йәне икегә ярылды. Үҙе — ошонда, тәҙрә төбөндә, ә игеҙәге... Бәлки, ошо мәлдә Алламоратов та тәҙрә яңағына һөйәлгәндер, мединститутҡа төбәлгәндер? Улар — ике еңмеш...

* * *

Ректор яҙғы ҡарҙы ярып атланы. Инде Өфө баҡсаһын Мәскәү урамы тип һандыраны. Мәскәү — уның һөйөклө ҡалаһы, йәшлеге үткән, хыялдары бөрөләнгән ҡала.

Ректорҙар йыйылышына саҡырғайнылар. Ислахов «Мәскәү» ҡунаҡханаһына төшкәйне, шунда Алламоратовты күрҙе. Иҫерек. Иптәше ҡултыҡлап алған. Метронан сыҡтылар. Ислахов та, ҡыҙыҡып, арттарынан эйәрҙе. Былар «Мәскәү» ҡунаҡханаһына ыңғайланы. Ул да шунда туҡтаған! Тирә-йүндә халыҡ, урам ҡайнай. Тегеләр өсөнсө ҡатҡа күтәрелде, вахтерҙар өндәшмәй.

Әрнене, кәмһенде профессор. Бер нисә көндән ошо бәндә Өфөлә йөрөп ятасаҡ, кешеләргә аҡыл туҡыясаҡ, әҙәпкә өйрәтәсәк.

Профессор Ислахов, Өфөгә ҡайтҡас, оҙаҡ ҡына секретарь күҙенә тура ҡарай алманы. Ә эше йыш ҡына секретарь кабинетынан башлана.

* * *

Алламоратов Мәжлестән[*] ҡайтып килә ята ине. Юлдашы менән ресторанға ла инеп ултырҙылар. Мәскәүгә йөрөүен йөрөгәс ни, ҙур эштәр атҡарғас, хәҙер әҙерәк бушанып алырға ла ярайҙыр.

Мәжлескә йыш саҡырмайҙар, мөһим мәсьәлә булғанда ғына... Мәскәүҙәге даирәләрҙең үҙ тәртибе. Бында бик талапсан, бик етди заттар. Улар хатта олуғ донъяға бигүк билгеле лә түгел, күҙгә-башҡа салынып та бармай. Өнһөҙҙәр, мәғрур ҡая ише тәкәбберҙәр. Халыҡ, ғәҙәттә, уларҙы белмәй, улар донъяға фаш ителмәй. Рәсми телдә был йәшерен ойошма мәҙәни клуб тип атала, ә былай милләткә ҡағылған мәсьәләләр, халыҡ-ара хәлдәр тикшерелә. Оҙон өҫтәл, һаран төҫтәр, ҡоро сәләмләүҙәр. Йыр ҙа, сәй-мәй ҙә юҡ, бары — һүҙ, бары ҡоро-һары ҡул ҡыҫышыу... Ҡаранан килешле костюм һәм баш ҡағыу... Ирҙәр генә, бөтәһе лә дәрәжәле заттар. Ғөмүмән, Алламоратов бында ғүмерҙә министрҙан түбән вазифа биләгәнде күргәне юҡ. Күрше республиканан да — бик иҫәпле, бик һыналған кешеләр генә...

Һуңғы Мәжлестең ултырышы Башҡортостандағы хәл-әхүәлдәргә арналды, Алламоратов иҫәп-хисап тота. Бөтә донъя буйлап үтһәләр ҙә, айырым төбәкте тикшергәндә етдиҙәр, урындағы бөтә хәл-әхүәлде белеп торалар. Башҡорт дәүләт медицина институтындағы хәл бөтәһенән дә борсой.

* * *

Дөрөҫөн әйткәндә, мединститут тирәһендә ҡупҡан шау-шыу хаҡында ҡалала төрлө хәбәрҙәр йөрөнө, интернат-мәктәптә лә геүләштеләр, «башҡортом» тип янып-көйөп йөрөгән Сәғитов, Алсынбаевтар ҙа борсолдо.

Ҡурайсы Алсынбаевтың тиктомалдан был бәхәскә килеп ҡыҫылыуы, берҙән, сәйер ҙә һымаҡ, әммә был кеше ғүмере баҡый халҡы яҙмышы, башҡорт тарихы менән ҡыҙыҡһынды. «Башҡорт» тиһәләр, ҡолағы ҡарп итә; армияла ла уны «Урал айыуы» тип йөрөттөләр, уға өлкән лейтенант Алсынбаев тип түгел, ә башҡорт тип ҡаранылар.

Башҡорт интернатына эшләргә килгәс тә, үҙен тормошта халыҡтың яҡлаусыһы, ҡурайсы булараҡ, уның хеҙмәтсеһе итеп тойҙо. Башҡорт дәүләт медицина институтында башҡорт ректоры икән, хәҙер институтта шул кешене урынынан алып ташлау эшен башлағандар, быға обком үҙе тотонған! Әлбиттә, әлбиттә, башҡорт кешеһен яҡларға кәрәк, был бөтә халыҡҡа ҡаршы ниәт. Аҫтыртын уй!

Башҡорт кешеһе башҡортлоҡ идеяһы тирәһендә ойоша инде. Ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы сыға! Унынса, обкомдың, уның комиссияһының эше хилаф, улар бөтәһе лә башҡортҡа башҡорт булған өсөн генә яу аса!

* * *

Ректор яй, сабыр. Уй-хистәре ыңғайына эйәрә. Һаман уйлана, уй сылбырын ары тағата. Тыштан ғәмһеҙ күренһә лә, йәне тыныс түгел: күңелен теге хафаһы борсой. Ҡайҙа яңылышты ул, ни урында хата ебәрҙе? Әллә хафаланыуына теге студенттарҙың һуғышыуы, бер-береһен сәнсешеүе сәбәпме? Алламоратов менән аралары боҙолоуы нәҡ шул эске хаҡындағы әңгәмәгә бәйле түгелме? Хәҙер эш ҡайһылай ҙурға китте: асыҡ партия йыйылышы йыялар, һүҙ башлыса уның

---

[*] *Мәжлес — фекерҙәштәрҙең рәсми булмаған урыны.*

тураһында барасаҡ. Йәнәһе, институттағы мораль мөхит хөрт, ә мәсьәләнең башы ректор бит, һөйәрғоловсыларҙың маҡсаты билдәле — ниһайәт, власты үҙҙәренең ҡулына алыу, обком секретарына ла Ислаховтың «һеҙ ҙә эсәһегеҙ» тип тура ярып әйткәне оҡшаманы. Эйе, эйе, бөтәһе лә нәҡ шул обкомдағы гонаһһыҙ әңгәмәнән башланды, шунда төп идеолог Алламоратовтың асыуы ҡабарҙы...

Ислахов әүәлге замандарҙа обкомдың бүтән секретарҙары менән дә эшләне, ни уйлағанын йөҙгә бәреп әйтә ине, ә арттарынан һөйләп йөрөмәне. Партия активтарында ла, былай әңгәмәләрҙә лә ни уйлағанын йәшермәй еткерә, бер ниҙе лә эсенә йомоп ҡалдырмай...

Әле теге «бишәү»ҙең хаты обкомға барғас уҡ, уны фән һәм юғары уҡыу йорттары бүлеге мөдире саҡырып алғайны. Бүлек мөдире: «Зыя Ислахович, һеҙҙең өҫтән ялыуҙар күбәйҙе, әйҙә, шау-шыу ҡуптармайыҡ: ғариза яҙығыҙ ҙа үҙ теләгегеҙ менән вазифағыҙҙан китегеҙ!» — тип белдерҙе. Ислахов ярһып Алламоратовтың кабинетына барып инде.

— Һеҙ минең эштән китеүемде талап итәһегеҙме?

— Юҡ.

— Ә мөдирегеҙ нимә ти?..

— Ул — мөдир, ул үҙе лә шул уҡ һүҙҙәрҙе әйтә ала...

— Юҡ, мин быға ышанмайым, мөдир түгел, ә һеҙ үҙегеҙ минең китеүҙе талап итәһегеҙ...

Әүәл шундай һөйләшеү булғайны. Бөтәһе лә асыҡ: обком исеменән һүҙ һөйләүсе Алламоратов унын ректор вазифаһынан китеүен көҫәй. Мәсьәлә бында бер Алламоратовҡа ғына бәйле, әгәр Ислахов урынынан бушатылһа, бөтәһе лә үҙ яйына ҡайтасаҡ... Әгәр ректор китһә, ер йөҙө тигеҙләнәсәк, бер Ислахов ҡына төп ҡаршылыҡ, бөгөн бөтә донъяның ҡәһәре уға, Ислаховҡа төбәлгән!

...Шулай ҙа ул бигүк бер ҡатлы ла әҙәм түгел. Алламоратов, һөйәрғоловсылар Ислаховты ғына алып ташлау менән мединститутта эштәр яйланырмы? Уйлы кеше, әлбиттә, мәсьәләнең ошо яғы тураһында ла борсолорға тейеш һымаҡ. Әгәр уйлана-борсола белһә...

Бында мәсьәлә бер ҡатлы ғына түгел, был ығы-зығы артында хәтәр мәсьәләләр, ҡатлы-ҡатлы ҡатламдар ята, буғай.

* * *

Майор Сәғитов Мәскәүҙә уҡыны, тарих менән ҡыҙыҡһынды. Ул холҡо менән шундайыраҡ кеше: халҡым тип яна, «башҡорт» тиһәләр, һиҫкәнеп китә. Бигерәк тә халҡы тарихы — уның йәнендә. Тарихты ябай уҡыусы, ғалим булараҡ ҡына өйрәнмәне, ҡыҙыҡһыныуы ниндәйҙер сиргә әйләнде. Сәғитов тарихты тоя, ул тарих менән йәшәй. Офицер булып китте, армияла хеҙмәт итте, төрлөһөн күрҙе, ниһайәт, төпкөл төбәк — Мәғҙән районына хәрби комиссар итеп ебәрҙеләр. Йыш ҡына Өфөгә килә, шунда элекке хеҙмәттәштәре, Мәскәүҙә бергә уҡыған һабаҡташтары менән осраша, медицина институтынан Мазһар Ҡотлояров менән Мәскәүҙә үк таныш инеләр. Яҡташтар, бигерәк тә Ҡотлояровтың башҡорт зыялылары тураһында монографияһы ҡыҙыҡтырҙы. Ғәжәп, был беҙҙең ғилми фекер эйәләрендә, ғөмүмән, Башҡортостан ғалимдары араһында ишетелмәгән-күрелмәгән тема: башҡорт зыялылары яҙмышы... Ҡәҙимге ғилми хеҙмәт, ләкин Башҡортостан өсөн үтә әһәмиәтле. Әлегәсә республика автономия хоҡуғында ғына йөрөп ята, союздаш республикалар менән сағыштырғанда, мөмкинлектәре сикле: энциклопедия сығара алмай, киностудияһы, ғилми институттары, махсус

тарих, милли сәйәсәт институттары юҡ, милли сәнғәт, милли мәҙәниәт институттары бармаҡ менән һанарлыҡ, нәмәгә төртөлмә, «юҡтың юғы» инде.

Ә былай ҡараһаң, Мазһар Ҡотлояровтың монографияһы — ғәҙәти хеҙмәт. Яҡташы шуны күҙ уңында тотоп эшләһә ине.

* * *

Бармаҡтар тигеҙ түгел, кешенең бер-береһенә мөнәсәбәте лә бер үк түгел, шуға ҡапма-ҡаршы яҡтар барлыҡҡа килә, ҡараштар асыҡлана. Берәүҙәрбер идеяны, икенселәр икенсене яҡлай, шулай яйлап синыфтар, фирҡәләр, төркөмдәр, фронттар барлыҡҡа килә. Шулай интеллигентлыҡтың һыҙаттары асығыраҡ төҫмөрләнә, шулай уның беҙ хәҙергесә аңлаған булмышы һыҙатлана. Бармаҡтар тигеҙ түгел, мөнәсәбәттәр ҡатмарлы, кешеләр төрлө-төрлө. Уларҙың һәр береһе үҙенең идеяһы, идеологияһы менән һуғарылған.

Түрәне ҡабул иткән, уның идеологияһы менән килешмәгән төркөмдәр, айырым шәхестәр ҙә барлыҡҡа килә. Ҡайһы берҙә бөтә йәмғиәт — бер яҡлы, ә берәү — бер яҡлы. Нәҡ шул ваҡыт, бөтә йыйын берҙе даулағанда, икенсе берәү яңғыҙ үҙенекен иҫбатлаған саҡта интеллигентлыҡ асыҡлана ла инде. Бер кеше дөйөм фекергә ҡаршы сыға... Ул үҙенекен раҫлай, үҙенекен даулай! Бөтә ғәм яңылышҡанда ул хаҡ, нәҡ уныҡынса — дөрөҫ! Шәхес үҙенекен яҡлай, уныҡынса ғына булырға тейеш был донъяла, бөттө-китте. Шәхес шулай үҙен дә раҫлай, үҙенекен таныта. Нәҡ ошо мәлдә шәхестең үҙлеге башлана. Был — граждանлыҡ позицияһы!

Интеллигент тантана итә. Әммә быны юғарылағылар — башлыҡтар нисек ҡабул итә, власть дилбегәһен тотоусы хакимдар зыялының был ҡылығын, йәмғиәттә раҫланған, ҡанунлаштырылған тәртиптәргә ҡаршы сығыуына нисек ҡарай? Ул ҡалыптарҙы емерергә, күмәк ҡорған ҡаяны ауҙарырға маташа түгелме? Нишләп быға юл ҡуябыҙ?

Хакимдар иң элек шул шәхестең ауыҙын ҡаплай, уны юлдан алып ташлай. Ул беҙгә кәрәкмәй, ул беҙгә ҡамасау! Коперник, Джордано Бруно, Сахаров... Улар беҙҙең менән түгел, улар беҙҙең ыңғайға баҫмай! Улар — ете ят! Уларҙың ауыҙын томаларға, күҙен соҡорға, һаман да тынмаһа, юҡ итергә! Уларҙы Жанна д'Арктай — усаҡҡа!

— Һин түрәгә арнап йырҙар яҙманың, шағир, һин башлыҡ ыңғайына баҫманың, шәхес, һин олуғты данлап йөрөмәнең, юлаусы! Һин, Буранбайҙар булып, түрә-ҡараларға таш аттың, ҡасҡын йырҙарын йырланың, зимагор көйҙәрен һуҙҙың, ашаған табағыңа төкөрҙөң! Шул төҫ һиңә, хәҙер иленднән һөрөлөп, имгәк булып йәшә, әйҙә!

Ай ҡара ла урман икән араһы,
Байғураларға ҡаршы йыр йырланым,
Танып ҡалыр микән туғандарым,
Хаҡ юлымды аңлармы халҡым?

* * *

Николай Николаевич Герасимов, институттың партком секретары, кабинетына ингәйне, телефон шылтыраны. Өлкә комитетынан, фән һәм юғары уҡыу йорттары буйынса бүлектән икән.

Николай Николаевич аптырап ултырҙы: иртәгә — шаршамбы, ә йома көндө — асыҡ партия йыйылышы. Обком партком ултырышы уҙғарыуҙы талап итә. Николай Николаевич, асыҡ партия йыйылышы булғас, партком ултырышы тағы

нимәгә, тип әйтеп ҡараны... Нишләргә? Ысынлап та, тәүҙә партком ултырышында тикшереп ҡарарғамы әллә парткомиссия һығымталарын? Партия уставында был мәсьәлә нисек ҡаралған икән?

Герасимов, бик икеләнгәс, партком ағзалары менән кәңәшләшергә булды. Ахырҙа, обком да талап иткәс, әйҙә, шаршамбыла партком ултырышы уҙғарып алайыҡ, бәлки, мәсьәләне асыҡ партия йыйылышына сығарыуҙың кәрәге лә ҡалмаҫ, тип килештеләр.

Партком ултырышына хат авторҙары, партия комиссияһы ағзалары саҡырылды. Партия комиссияһы ағзалары өндәшмәй, Николай Николаевич бер-бер артлы хат авторҙарына һүҙ бирә. Тегеләр алдан һөйләшеп ҡуйған кеүек, бер үк хәбәрҙе сурытып тик ултыра. Йәнәһе, Һөйәрғолов ректор булыр, ә Бикбулатов — проректор...

— Туҡтағыҙ әле, егеттәр! — Партком секретары Герасимов сәсрәп китте. — Әллә иҫәрләнеп бараһығыҙмы? Һөйәрғолов — ректор, имеш... Бының буласағы юҡ, әҙерәк мәсьәләгә етдиерәк ҡарайыҡ!

Юҡ, партком секретарының һүҙе һүҙ ҙә түгел — былар һаман үҙҙәренекен ҡайыра.

— Һөйәрғолов — йәш, перспективалы кеше... — тип башлай Мөхәмәтов тағы... — Ул — кардиология буйынса беҙҙең күренекле белгесебеҙ, монографиялары бар, ә Бикбулатов — бик егәрле тикшеренеүсе, лабораториянан сыҡмай. Уның тәжрибәләре, үҙегеҙгә билдәле, медицина өлкәһенә генә түгел, ә ауыл хужалығына ла хеҙмәт итә. Ҡомаҡтар менән теге тәжрибәһен генә иҫләгеҙ. Eſnedeus шыйыҡсаһын һөрткәс, ҡомаҡтың йөнө күкрәп үҫә. Бикбулатов был тәжрибәһен һарыҡтарға ла күсерә, һөҙөмтәлә, һарыҡтар күп итеп йөн бирә...

Тағы Һөйәрғолов баҫа, ҡарашын ректор Ислаховҡа ата.

— Ә ректорҙың тәртибе? Ҡоромтаевҡа: «Һин — кузнечик», — тип әйтеүенә ни тиерһегеҙ?

— Мин Ҡоромтаевтан эш талап иттем бит, — тиергә мәжбүр ректор Ислахов.

— Эйе, Ҡоромтаев хужалыҡ эштәре менән шөғөлләнә... Ләкин улай кешене кәмһетергә, ҡушамат тағырға ярамай бит. Был — Ислаховтың эш стиле!

— Туҡтале, Һөйәрғолов! — Хәҙер ректор Ислахов урынынан ҡалҡына. — Беҙ һинең менән нисә йыл бергә эшләйбеҙ, мин һине берәй кәмһеткәнем бармы? Ә Ҡоромтаев — ялҡау, мин унан эш талап итәм, ятаҡта торбалар туңа, шуларға күҙ-ҡолаҡ бул, тим. Ә ул — минән киткәнсе, әйәһенә еткәнсе эшләй... Ярай, хатаһын аңлай, һинең кеүек, серәшеп, бәхәсләшеп ултырмай.

— Егеттәр! — Тағы партком секретары Герасимов һүҙ ала. — Беҙ быға тиклем бөтә мәсьәләләрҙе лә ошонда, парткомда, асыҡтан-асыҡ һөйләшеп хәл иттек, ә сүпте өйҙән сығарып, обкомға хат яҙып ятманыҡ. Мин үҙем асыҡ кеше, берәүҙән дә бер ниндәй ҙә серем юҡ. Бөтөнөһө күҙ алдында, мәсьәләне намыҫлы, әҙәмсә хәл итеп өйрәнгәнмен. Парткомда ла шундай кешеләр йыйылды. Зыя Ислахович та ипле, ихтирамлы кеше, гел беҙҙең менән кәңәшләшә, бөтә мәсьәләләрҙе лә уртаға һалып һөйләшә. Әйҙә, был юлы ла берҙәм булайыҡ, мәсьәләне ары ҡуйыртмайыҡ. Ислахов — лайыҡлы кеше, ректорлыҡ вазифаһын дөрөҫ биләй, әйҙә, уға тыныс эшләргә мөмкинлек бирәйек.

Партком секретары һөйләп бөтөүгә, Һөйәрғолов урынынан осоноп торҙо ла:

— Юҡ, беҙ риза түгел! — тип белдерҙе. Дуҫтары ла артынан эйәрҙе. Әңгәмә барып сыҡманы.

...Партком партком инде. Уға обком, әлбиттә, юғарынан торобораҡ, кәмһетеүлерәк итеп ҡарай. Әммә мәлендә партком да үҙенең нәғез һүҙен әйтә, үҙ фекерендә ҡаты тора ала. Шундай саҡтар, эйе, юҡ-юҡта осрай: бәғзе парткомдар өҫтән баҫымға бирешмәй, үҙ һүҙҙәрен һүҙ итә.

Медицина институтының парткомы нәҡ шундайҙарҙан ине. Күптән түгел улар бер доцентты партияға алманы. Теге нисек кенә ҡыйышып, ҡайҙарҙан ғына шылтыраттырып ҡараманы!.. Институттың ул доценты республикала бик тә билдәле кешенең балаһы икән. Ә ул билдәле кеше — Алламоратовтың йән дуҫы.

Парткомда был эштә еңдек тип, тынысланып ҡуйҙылар ҙа һуң, ә Алламоратов барыһын да эсенә һала, бер ниҙе лә онотмай.

Дөрөҫөн әйткәндә, Мәжлес тә шуны көҫәй. Уның аҙаҡҡы ултырышында techinstitut ректорын кисекмәҫтән вазифаһынан бушатырға тигән талап ҡуйылды.

## Икенсе бүлек

Ректор Ислахов techinstitut тирәһендә ҡуйырған мәсьәләләрҙе бары обком аша ғына хәл итеп буласағын аңлай ине. Республика юғары уҡыу йорттары ректорҙар советы бар-барлыҡҡа, әммә хәҙер институттағы хәл-әхүәлдәрҙе яйларға уның ғына көсө етмәҫ: мәсьәлә уғата тәрәнгә төштө — уҡытыусы профессорҙар өлкә комитеттың үҙенә хат яҙҙы, институт тирәһендә шау-шыу ситкә сыҡты, хатта Эске эштәр министрлығына тиклем барып етте.

Мәсьәләне нисек тә асыҡларға, ҡара-ҡаршы ултырып һөйләшергә! Һәр хәлдә, элек шулай эшләй торғайнылар: килеп тыуған ҡаршылыҡтарҙы секретарь менән уртаға һалып тикшерәләр.

Баштан уҡ беренсе секретарға инмәй, ә идеология секретарына барҙы.

— Мин һеҙҙең менән асыҡтан-асыҡ һөйләшергә тип килдем, — тине Ислахов обком секретары Алламоратовҡа.

— Яҡшы, — тип ризалашты уныһы.

— Мәғлүм булыуынса, обкомға techinstitut уҡытыусылары хат яҙҙы...

— Эйе, беҙ уны тикшерәбеҙ...

— Һеҙ ул хатты ғына тикшермәйһегеҙ, ә бөтөн институтты икегә бүлдегеҙ: бер яҡта — ректорға ҡаршылар, ә икенсе яҡта — уны яҡларға маташыусылар. Институт хәҙер бары шул мәсьәлә менән генә шөғөлләнә, уҡыу-уҡытыу ҙа, тәрбиә-ойоштороу эштәре лә онотолдо. — Профессор сәсәне. — Бары «кем ректорҙы яҡлай», «кем уға ҡаршы» тигәнде тикшерәләр. Ә мәсьәлә төбөндә ябай ғына хәҡиҡәт ята: был элиталы (ул шул һүҙенә юрый баҫым яһаны) уҡыу йортонда кем уҡырға тейеш? Ауыл балаларымы, әллә ҡаланыҡыларmы? Ялыу яҙыусыларҙы ла шул борсой: ректор Ислахов институтҡа әҙерлекһеҙ ауыл балаларын килтереп тултырҙы, улар наҙан, techinstitutта уҡый алмай! Шулаймы икән? Бына алдыбыҙҙа — институтҡа ҡабул ителгәндәр исемлеге. 56 процент — өфөнөкөләр, бүтәндәре — ҡалалар, район үҙәге балалары, ауылдан килгәндәр — 43,8 процент...

— Ә элек ауыл балалары 4 процент ҡына ине...

— Алламоратов туған, беҙ икебеҙ ҙә ауылда тыуып үҫкәнбеҙ. Икебеҙ ҙә ауылдағы тормоштоң, ауыл мәктәбендәге уҡыу-уҡытыу кимәленең ниндәй икәнен беләбеҙ. Ауылда врачтар етешмәй, район ерендә йәшәгән халыҡ ошо көнгәсә тейешле медицина ярҙамы алмай. Ваҡытында медицина ярҙамы алмай үлеүселәр,

фажиғәгә тарып, ярҙам һуңлау осраҡтары күпме?.. Беҙгә көн дә хәбәр килә, был хаҡта республика статистика идаралығы ла белә, ышанмаһағыҙ, уларҙан мәғлүмәт таптырығыҙ...

— Таптырырбыҙ, — тип һүҙ ҡыҫтырҙы Алламоратов. Уға хәҙер нисек тә ректорҙы туҡтатырға, әңгәмә дилбегәһен үҙ ҡулына күсерергә ине.

— Таптырығыҙ! Тағы бер мәсьәлә... — Ректор ҡарлыҡты. — Ауылдарға ла, ҡалаларға ла бер тигеҙ врач кадрҙары әҙерләйбеҙ. Республика халҡының 75 проценты ауылда йәшәй, ә беҙ 43 процент ҡына студент уҡытабыҙ. Сер түгел — уҡып сыҡҡас, ҡалала төпләнергә тырыша бит.

— Килешәм, — тине обком секретары.

— Килешкәс, ниңә мединститут эшенә аяҡ салаһығыҙ, уҡытыусыларҙы ике лагерға бүләһегеҙ?

— Беҙ юғары органға хеҙмәткәрҙән килгән һәр хатҡа, һәр үтенескә яуап бирергә, хәлде объектив рәүештә тикшерергә бурыслыбыҙ — маҡсатыбыҙ шул ғына, ә һеҙ әллә ниндәй лагерь, икегә бүленеү тураһында һөйләйһегеҙ...

— Ярай, — тине профессор, — мин һеҙгә ни уйлағанымды әйттем.

— Туҡтағыҙ! — Ректор инде, һүҙ бөттө, әйтәһен әйттем, тип ишеккә ҡайырылғайны. — Зыя Ислахович, беҙҙе институттағы тәрбиә эшенең аҡһауы ла борсой бит. Бына — Эске эштәр министрлығынан мәғлүмәт: мединститут студенты Шаһиәхмәтовтың эше прокуратураға тапшырылған. Был — бөтә институт йөҙөнә ҡара тап.

— Дөрөҫ, — тип ризалашты ректор.

— Бында беҙгә, обкомға ла, тынғы юҡ, — тип белдерҙе секретарь. — Дирижер Тихоновскийҙың ҡатыны әллә нисә ҡат ошонда, кабинетымда илап ултырҙы.

— Бер мал бөтә көтөүҙе...

— Ә һеҙ, ректор, ул бысраҡты үҙегеҙҙең иҫәбегеҙгә лә яҙығыҙ.

— Рәхмәт.

* * *

Ғафуандың башында уйҙар ҡайнай, хәтирәләр терелә...

— Ә-ә, Баймаҡ, Сибай!

—Темәс педучилищеһын тамамланым мин, Хисмәт ағай...

— Баймаҡ, Темәс. Шәп! — Интернат директоры һөйөнгәндәй итте. — Тәк, эш тиһең инде.

— Эйе, эшкә төшөргә ине... — Ғафуан ашыҡты.

— Яҡшы, ҡустым, тырышырбыҙ. Минең ҡустыларҙы беләһеңме?

— Беләм, Хисмәтулла ағай, Нурғәли менән Динмөхәммәт ағай һуғышта ятып ҡалды бит.

— Эйе. — Директор тәрән итеп көрһөндө. — Тәк, эш... Темәс, Баймаҡ, ха, булдырабыҙ уны. Беҙ баймаҡтар бит эле. Понимаешь, төп башҡорттар! Өфөлә башҡорттар күпләп йәшәргә тейеш! Кем итеп эшкә алабыҙ?

— Башҡорт теле уҡытыусыһы...

— Улар беҙҙә быуа быуырлыҡ!

— Һеҙҙә сәнғәт дәрестәре бар. Мин — йырсы, ҡурайсы... Тағы ярты ставкаға столяр итегеҙ... Ҡулым оҫта.

«Столяр, столяр», — тип уйланы директор эстән.

— Министрлыҡтан рөхсәт ал!

Запастағы офицер урынынан ҡалҡынғайны, директор ҙа баҫты.

— Туҡта, һинең пропискаң бармы әле?

— Юҡ.

— Ана, пропискаң да юҡ. Тап.

— Нисек?

— Уйла.

Ғафуан министрлыҡҡа осто. Аяҡтары етеҙ, күҙҙәре яна, йөрәге даһырлай, зиһене ап-асыҡ. Иңдәреңдә ҡанаттар яралған төҫлө — оса. Мәлендә барып етергә тейеш.

Мәғариф министрлығында ла ныҡышты авиатор, үҙенең кемлеген оҙаҡ иҫбат итте.

— Мине армиянан демобилизацияланылар. Оборона министры бойороғо менән... Бына документтарым! — Ҡағыҙҙарҙы өҫтәлгә теҙҙе.

— Интернатта тәрбиәселәр етәрлек! — Министр сигенмәне.

— Мин балаларҙы ҡурайҙа уйнарға өйрәтәм!

— Икенсе мәктәпкә барығыҙ!

— Юҡ, мин башҡорт интернатына барам!

Офицер кире интернатҡа китте.

Директор, аптырап:

— Бер ҙә булмаһа, ҡустым, райкомдан рөхсәт килтер, — тине.

Унда ла юлы уңмағас, Ғафуан Алсынбаев демобилизацияланыусыларҙы эшкә урынлаштырыу буйынса республика комиссияһына мөрәжәғәт итте. Мәсьәләне тиҙ арала хәл иттеләр.

* * *

Ислахов яй ғына атлай. Институт ҡаршыһына йүкәләр теҙелгән. Бөрөләре асылған, ара-тирә йәшел ҡыяҡтар күренә. Тәбиғәт терелә, донъя йәшәрә. Тирә-йүндә һулап туймаҫлыҡ һауа: бөрө еҫе, йырын һыуҙары тыны. Тәбиғәт йәнләнә, кешеләр дәртләнә. Яҙғы һауа күкрәктәргә тула, башты әйләндерә. Күңел әллә ҡайҙа ашҡына, йөрәк елкенә. Ошо кистә, шиғри ауаздар, хуш еҫ менән тулған донъяла ваҡ нәмәләр, ығы-зығы, тартыш-талаш тураһында уйлағы ла килмәй. Мәңгелек алдында ул үтә ваҡ, буш нәмә һымаҡ. Әле партком ултырышы хаҡында уйлау ғына йәнде әрнетә... Күңел юғарыға ашҡына, ә аяҡтарың ләмгә батҡан.

Һөйәрғолов түрәлеккә ынтыла. Ректор проректорының был ҡылығына аптыраманы ла. Һөйәрғолов һәр саҡ еңелерәк холоҡло булды: уйламай һөйләй, гел алдан һикереп төшә. Әүәле лә уның ректорлыҡҡа ынтылыуы хаҡында хәбәрҙәр сала-салпы ишетелеп ҡала ине, Ислахов көлөмһөрәп кенә ҡуйҙы. Һөйәрғолов шул вазифаны тартырлыҡмы? Йәш кеше, көсө ташып тора. Әллә уны отҡотоусы, ҡотортоусылар бармы икән?

Икенсе нәмә борсой — нисек проректор үҙ артынан шундай хөрмәтле кешеләрҙе эйәртә алған? Профессор Мөхәмәтов балалар хирургияһы кафедраһы мөдире, Бикбулатов — лаборатория мөдире. Юғары эш хаҡы ала. Ни етмәй? Нишләп улар Ислаховты Һөйәрғоловҡа алмаштырырға теләй? Ҡасан яҙа баҫты һуң ул, ни урында хата ҡылды? Институт үҫөн тип тырыша, бөтә һәләтен шуға бирә... Хуплау урынына — ялыу, партком ултырышы... Береһен дә ситкә типмәй, ҡартына-йәшенә бүлмәй, милләтенә ҡарамай... Бармаҡтар ҙа тигеҙ түгел, һәр уҡытыусыға — айырым мөнәсәбәт. Ислахов үҙе лә уҡытыусы, ғалим кеше — фән белгестәренең хәлен аңлай.

Обком вәкиле лә, теге бүлек мөдире, хаҡ әйтте.

— Фән кешеләренең, педагогика менән бәйле әһелдәрҙең бер-береһен битәрләүе аптырата. Партия хәҙер үҙе шул тәрбиәселәрҙе тәрбиәләп ултырырға тейешме? Әлбиттә, обком ошондай ҙур институтта ғауғаға юл ҡуймаясаҡ... Был обкомға хат яҙыусыларға ла, ректор Ислаховтың үҙенә лә ҡағыла. Әлбиттә, ректор эшмәкәрлегендә бөтәһе лә ал да гөл түгел. Халыҡта ла: «Утһыҙ төтөн сыҡмай», — тиҙәр. Хаҡ. Утты һүндереү сараһын табырға кәрәк. Обком сараһын табыр, партком ултырышында булмаһа, эште асыҡ партия йыйылышында хәл итербеҙ.

Эш асыҡ партия йыйылышына ҡалды. Ә ректор Ислахов уйлана, уйҙарының осо-ҡырыйы, башы-ахыры юҡ.

...Ул башта Өфөлә уҡыны. Рабфакта. Республика хөкүмәте Совет власының тәүге йылдарында төпкөл төбәктәрҙән йыйылған үҫмерҙәрҙе үҙ ҡанаты аҫтына алды. Күбеһе башҡорт интернатынан икән. Барыһы ла белемгә һыуһаған, белем тауына артылырға, көслө кешеләр булырға хыяллана. Ил яҙмышы улар ҡулына ҡаласаҡ бит. Зыя ла шуларҙың береһе, башта әлеге интернатта уҡыны, аҙаҡ институтҡа әҙерләнеү өсөн рабфакка инде.

Хөкүмәт башлығы Зыяның яҡташы — Арғаяш яғы кешеһе икән. Зыя уның менән танышыу хаҡында хыялланды. Уларҙы, бер төркөм йәштәрҙе, Мәскәүгә уҡырға ебәрергә әҙерләнеләр. Китер көн еткәс, барыһы ла Хөкүмәт йортона йыйылды. Шунда баш ҡалаға йыйыныусылар менән теге ағай ҙа күреште. Йөҙө нурлы, үҙе итәғәтле икән. «Был кеше бөтә донъяны үҙенә һыйҙыра ала», — тип уйланы Зыя.

— Һеҙ — яңы заман кешеләре, халҡыбыҙ киләсәге, ҡайҙа йөрөһәгеҙ ҙә, Башҡортостанды, ата-әсәйҙәрегеҙ ышанысын аҡлағыҙ, бер ваҡытта ла батыр башҡорт улдары, ҡыҙҙары икәнегеҙҙе онотмағыҙ.

Мәскәүҙә медицина институтында уҡығанда ла, аспирантураға күскәндә лә ағайҙың был һүҙҙәре ҡолаҡ төбөндә сыңлап торҙо. Зыя, гүйә, ғүмере буйы шул һүҙҙәр ыңғайына йәшәне.

* * *

Ул — рәссам. Ғүмере буйы бер триптих яҙа, шуны ослап бөтөрә алмай ҙа ҡуя. Дөрөҫ, ул һөнәре буйынса фтизиолог, геронтология буйынса ҡыҙыҡлы хеҙмәттәре, үҙенсәлекле күҙәтеүҙәре бар, уларҙы фәнни хеҙмәттәрендә яҡтыртты. Фәндәге оҙон юлы һынлы сәнғәт менән гел йәнәшә барҙы. Ул һәр ваҡыт, саҡ ҡына бушаған мәле булыу менән, картиналарына тотонор ине. Рәсемдәрен тәүге мөхәббәте менән дә сағыштырырға ярата.

Тышта — яҙ. Күңеле тәүге бөрөләргә, йырсы гөрләүектәргә һөйөнә. Өфө урамында яҙ тантанаһы. Ҡоштар һайрай, кешеләр йылмая. Оҙон ҡыштан һуң барыһының да йөҙө асылған. Яҙ хәбәрселәре — сыйырсыҡтар ҡайтҡан, тротуарҙа күгәрсендәр гөрөлдәй. Салт аяҙ көнгә профессорҙың да кәйефе күтәрелде. Улар тәүләп Өфөгә ҡайтҡанда ла яҙ тантана итә ине. Икеһе лә врач...

Профессор яй ғына бара. Аллея араһынан атлай, гүйә, ошо юлын — уйын һуҙырға теләй. Ошонда, донъяның шау-шыуынан айырылған мөйөшөндә, йән тыныслыҡтарын табырға итә.

Ул яҙҙа ла көндәр сыуаҡ ине, ә ул — теләһә ниндәй тауҙы урынынан күсереп ҡуйырҙай ғәйрәтле егет... Йәш белгестәр яңы асылған Башҡорт медицина институтында эш башланы.

Профессор күптән инде хәләл ефетенең образын картинаһында һынландырырға йыйына. Ниндәй форманы һайлаһа, йәтеш булыр, уйлағанын тулыраҡ итеп сағылдырыр? Инде нисәмә йылдар зиһенен ҡатынының образы эҙәрлекләй... Бөтә тормошто, кисерелгәндәрҙе нисек һынландырырға?

Триптихтың тәүге өлөшөн «Хыялый ҡыҙый» тип атарға булды. «Хыялый ҡыҙый»ҙа Маһираның йәшлек, студент йылдары яҡтыртыласаҡ. Мәскәү осо-ро... Аҙаҡ «Ҡыҙ менән егет» картинаһы китә, иң һуңында — «Әсә менән бала» полотноһы!

Хыялый ҡыҙыйҙы, бәлки, йыһанға күсерергә кәрәктер? Был осраҡта образ нығыраҡ асыласаҡ, йәғни үҙ асылына ҡайтасаҡ. Хыялый ҡыҙ — йыһанда, үҙ донъяһында. Йондоҙҙан йондоҙға күсә, яңынан-яңы булмыштарға етергә итә. Сәс толомо артҡа һыпырылған, күлдәк итәктәре тубығына йәбешкән; йыһан еле битенә, түшенә бәрә... Юҡ, инде кире боролорға уйламай.

Эйе, хыялый ҡыҙ әүәлге бер ҡатлылығын, хатта нәфислеген дә юғалтты. Сая, ҡырыҫ. Үҙ асылынан айырылыуы ла хөрт. Хыял ҡыҙы — ижадсының туғаны. Уның хыялы.

Профессор, ял алғас, бер нимәгә ҡарамай, картинаһын ослап ҡуйырға тейеш.

* * *

Эй йәшлек! Ҡыҫҡа хәтерле һин: һөйөнөсөн дә, һағышын да тиҙ онотаһың. Хафаларҙы йәһәт таратаһың, даръяларға ашаһың, күк иңендә балҡыйһың. Әйтерһең дә, был донъяла һин барыһын да булдыраһың. Нимәгә тотонһаң да, килешә, ҡулыңдан килә.

Зыя — иҫәр. Хыялы йүгәнһеҙ булғас, дәрте ҡайнағас... Чехов кеүек пьесалар яҙыр, Бородин һымаҡ музыка ижад итер. Барса донъяны яулар.

Мәскәү йылғаһының бейек ярында икәү. Ел өҫтәренә һырыша, сәстәрен туҙҙырып ебәрә. Ҡарағайҙай оҙон буй-һынлы, сөм ҡара сәсле егет, ялтыр туфлиҙар... Ә ебәк ал күлдәк, зәңгәр кофта...

Ял көнө тип, йылға буйына сыҡтылар. Оҙаҡламай — имтихандар... Теплоход, туптай, тулҡын өҫтөнән һикерә. Көмөш тулҡындар, әйтерһең дә, елән тәңкәләре. Йылмаялар, күҙ ҡыҫалар. Ҡояш йәлләмәй ҡоя нурҙарын.

— Маһира, уҡып бөткәс, ҡайҙа?..

— Башҡортостанға инде. — Ә һин, Зыя?

— Мәскәүгә нык өйрәнелде бит.

* * *

— Зыя!..

— Маһира!

Йәштәр бер-береһенә ташлана. Борсаҡҡа оҡшаған төрткөләр һибелгән күлдәк кейгән ҡыҙ, тирәлә — халыҡ. Перрон умарта күселәй гөжләй. Шул даръя уртаһында, гүйә, икәү генә.

— Маһирам, мин ректор менән һөйләштем, һине госпиталь хирургияһы кафедраһына алырға риза...

— Минең врач булғым килә...

Ғашиҡтар Ағиҙел ярын ҡыҙырҙы. Бәхетлеләр.

Ысынлап та, был күктәр аҫтында бәхет бар бит ул. Һөйөнөс бар. Ҡеше нимәгәлер ынтылып, шуға ирешһә, бәхетле. Йәштәр бөгөн, ниһайәт, осрашты.

Был күктәр аҫтында барыбер өмөт бар. Кеше ниндәйҙер бер мәлдә үҙен бәхетле тоя. Ул үҙенән, көнөнән ҡәнәғәт, көндән бер көндө уға шатлыҡ йылмая. Донъяһы теүәл, күңеле бөтөн.

* * *

Яңы асылған медицина институтына кадрҙар етешмәү үҙен нык һиҙҙерә ине, әлбиттә. Юҡҡа ғына Зыя Мәһираһын янына эшкә саҡырманы. Кафедрала әҙерлекле белгестәр бармаҡ менән һанарлыҡ, уҡыу әсбаптары ла наҡыҫ. Республика хөкүмәте кадрҙар әҙерләй, институттың матди базаһын нығытыу тураһында ҡайғырта, әммә бар мәсьәләләрҙе бер юлы хәл итеп булмай. Аҡса ла етешмәй. Кадрҙар, тағы ла кадрҙар кәрәк. Үҙеңә сәсеп үҫтерергә, емештең өлгөргәнен көтөргә тура килә.

Мәскәүҙә уҡып ҡайтҡан Ислахов та шундай үҫентеләрҙең береһе ине. Институт уға ҙур өмөт бағланы. Егетте ҡабат Мәскәүгә ебәрергә йыйындылар, был юлы — аспирантураға! Әйҙә, илгә ғилем эйәһе булып ҡайтһын!

Егет ҡарыша алманы. Күңелендә дауыл ҡупһа ла, өнөн сығарманы. Мәһираһы бәләкәс бәпесе менән ни эшләр? Оло ҡалала япа-яңғыҙы. Нисек донъя көтөр? Ҡыйын мәлдә ҡайҙа барыр, кемгә һыйыныр?

Егеттең үҙенең дә уҡығыһы килә. Уҡыу — күптәнге хыялы. Мәһира ла ҡаршы түгел.

— Бар, Зыя, мин бында нисек тә бирешмәм! — Мөләйем йөҙлө, йоҡа тәнле Мәһира икеләнмәй. Бары ҡараштары ғына моңһоу. Ҡауышып, күпме бергә торҙолар, тағы айырылышырға...

Зыя өҙлөкһөҙ улын һөйә. Унһы бәпес кенә бит: бер ни һиҙмәй. Үҙенә һонолған һайын ҡурҡып күҙен йома, әсәһенә һыйына.

Зыя кәләшен дә үбә. Әллә шул наҙҙан, әллә күңеле йомшарыуҙан, йәш әсәнең күҙҙәренә йәш тула.

— Көймә, бер-ике йыл... Мин ай һайын ҡайтып торормон.

— Ҡуй, ай һайын йөрөмә, уҡы.

— Рәхмәт, Мәһира.

Улар икеһе лә үҙҙәрендә ныҡлыҡ тойҙо.

* * *

Зыя ҡабат Мәскәүгә йыйынғас, әсәһе килен янына килергә ризалашты. Өмөтбикә апай Мәһира эштә саҡта сабыйҙы ҡараясаҡ. Ҡәйнә менән килен килешер — бынһына көймәй. Утын әҙерләп китте китеүен, мейесен дә таҙартты, һыланы-һыйпаны. Барыбер ҡыйын: ул, әзмәүерҙәй ир, бында — йылыла. Уҡыуы арыу бара. Фән тауҙарын кимерә егет. Иле алдында һүҙ биргән: ул еңеп ҡайтырға тейеш Башҡортостанына.

Үткән аҙнала ғына хат килгәйне.

«Беҙ бында тырышып донъя көтәбеҙ, һин дә ныҡыш бул. Беҙ нисек тә бирешмәбеҙ. Ишбулды, күҙ теймәһен, үҫә. Һөнәрҙәрен арттыра хәҙер. Көлә. Гел сәс менән шаяра. Эләктерһә, ысҡындырмай. Орошһам, көлә. Икәү ҡыҙыҡ итәбеҙ инде тегене. Тубырсыҡ һымаҡ тулап ята, ике ҡулы — ауыҙында. Ишбулдыны күҙәтеп, һындар ҡатып бөтә. Көн буйы арығанлыҡ ус менән һыпырып алғандай юҡ була. Йәш кеше тип, миңә лә эш өйәләр: больницала политинформатор иттеләр. Местком ағзаһымын. Миңә, йәнәһе, бата. Шулай, Зыя, һинең ҡатының хәҙер местком да, политинформатор ҙа, ҡайтҡас, танымай ҙа торорһоң.

Ә мин, яҡыным, һине көтәм. Үлеп һағындым, ләкин, ләкин... Тағы ауыҙымды ябам, һиңә уҡырға кәрәк, һине Мәскәүгә хөкүмәтебеҙ ебәргән. Түҙ, түҙ, Зыяҡайым. Барыбер бер ҡыйындың бер рәхәте булыр. Бирешмәйек!

Был хатымды эштә яҙам. Өйҙә — Ишбулды. Имсәк ташлатмағанмын әле. Ҙурайһа ла, йәлләйем. Әҙерәк нығына төшһөн, тим. Ҡәйнәм дә ҡеүәтләй. Ҡәйнәм — яҡыным. Мең рәхмәт үҙенә. Сөкөрҙәшеп йәшәп ятабыҙ. Тик һин унда һынатма. Асыҡма, өшөмә, яҡыным.

Ҡәләшең Маһира, Ишбулды улың, әсәйең Өмөтбикә».

Маһира, әлбиттә, теге татар егете Алламоратов тураһында яҙып торманы. Бик тә бәйләнсек булды ул йылтыр көҙ. Теле телгә йоҡмай, алдына-артына сыға. Өфөлә тағы осраштылар. Маһира өйөнә ашыға ине. Алламоратов еңенә сат йәбеште... Мәскәүҙә күрешкәндәрҙе һөйләй, әллә нимәләрҙе соҡоп сығара.

Маһира бер ваҡытта ла уға иғтибар итмәне, теге әрһеҙ гел үҙе бәйләнде, бәйләнергә сәбәп эҙләне. Был хаҡта ни яҙаһың, Зыя уны яҡшылап белмәй ҙә.

Зыя хискә бирелмәҫкә тырыша. Ул — врач. Бер башына — мең хәстәр. Ҡайһыһына өлгөрөргә лә белеп булмай. Оҙаҡламай — Башҡортостанға, каникулға!

...Нисә ҡат ашҡынып ҡайта иленә! Оса, талпына. Башҡортостан — ер йөҙөндәге йөҙөк ҡашы, йөрәге елкенә.

* * *

Һөйәрғоловсылар «Өфө» ҡунаҡханаһындағы бишенсе ҡатта осрашырға тейеш ине. Медицина институтынан — Һөйәрғолов менән Мөхәмәтов, нефть институтының ике профессоры һәм университеттан — татар теле һәм әҙәбиәте кафедраһы мөдире.

Улар таныш-тонош осрамаһын тип алан-йолан ҡарана. Бәй, әмәлһеҙҙә йәнә шул ҡурайсы... ҡаршыларына килә ята.

— Һа, Ғафуан дуҫ! — тип ғәҙәтенсә алдан шарылданы Һөйәрғолов. — Ҡурайсы ағай!.. — Ул, Алсынбаевты ҡосаҡлап, юлдаштары менән таныштырырға ашыҡты...

— Минең ҡурайсы дуҫым... — тип һөйләнде Һөйәрғолов, алсаҡланып. — Әйҙә беҙҙең менән!

Ғафуан йүгереп ҡурайын килтерә һалды, һый әҙер, табын гөрләй, ҡунаҡтар ултыра йәйелешеп. Ғафуан тәүҙән үк ҡурайына тотондо, төрлө көйҙәрҙе һыҙҙырҙы. Ҡунаҡтар ҡәнәғәт: коньяк һемерәләр, тултырылған тауыҡ бөгәләр. Бер заман профессорҙар күрше бүлмәгә тәнәфескә сыҡты, ә музыкант урынынан ҡуҙғалманы. Әллә ҡайҙан дуҫы ҡорона килеп ҡушылған Баҡай ҙа шунда өйөрөлә.

Ғафуан ҡурайын һыҙҙыра ғына, ара-тирә ҡолағына күрше бүлмәләгеләрҙең хәбәре һуғыла. Иҫеректәр, иҫһеҙҙәр, ни һөйләгәндәрен белмәйҙәр. Баҡай ҡурайсыға хәбәрен һата, йәнәһе, уны шулай әүрәтә була. Ҡолағын ҡабартҡан, үҙе иҫерек тә, айныҡ та түгел. Күрәһең, уға алдын-артын ҡарап йөрөргә бойоролған; Баҡай шуға бында барыһына күҙ-ҡолаҡ. Былай үҙенең дә тегеләрҙе тыңлағыһы киләләр, әммә Ғафуан бар... Ҡурайсының тегеләрҙе ишетмәүе хуп. Ә Ғафуан ишетә, һүҙҙәр бит хәтәр, ҡолаҡты ярып бара:

— Институтта, Һөйәрғолов дуҫ, власть — беҙҙең ҡулда... Беҙ уларҙы бер нимәгә лә яҡын йоғондормаҫҡа тырышабыҙ.

— Оҙаҡламай, егеттәр, власты үҙебеҙгә алмаҡсыбыҙ... — Быныһы — Һөйәрғолов тауышы. — Йома көн институтта — асыҡ партия йыйылышы!

«Әһә, асыҡ партия йыйылышы тураһындағы хәбәрҙе Һөйәрғолов ауыҙынан икенсе ҡабат ишетәм...» — Ҡурайсының зиһене үткерләнә, ҡолағы сосая. Артабан һәр һүҙ, һәр ым-ишара уға таныш, асыҡ. Тегеләрҙең иҫерек баштан ниндәй хәбәр һатыуын да, әңгәмә айышын да һиҙҙе.

— Хәҙер беҙҙә йәһүд мәсьәләһе генә ҡалды... — тип һала хәбәрҙе икенсеһе. Нефть институты вәкиле һүҙенә оҡшаған.

— Беҙҙә лә бар ул мәсьәлә... — тип йөпләй Һөйәрғолов. — Тик башта Ислаховты осорорға кәрәк.

«Әһә, былар хәтәр пландар ҡора...» — Ҡурайсы башын эшләтә. Ә Баҡай теләһә ниндәй хәбәрен һөйләй, нисек тә музыкантты әүрәтергә тырыша. Ҡурайсы бөтәһен дә аңланы, хәҙер уға былдағы табындың ҡыҙығы ла ҡалманы.

Ғафуан дуҫтары янына ҡабаланды — йәһәтерәк барып етергә лә ишеткәнен еткерергә...

Шулай халҡың хаҡына шайтандың да дуҫы, кем өсөндөр ошаҡсы ла булырһың. Эйе, улар күмәкләп башҡортҡа ҡаршы ойоша...

Ислаховсылар бөгөн институт йәнәшендәге паркта осрашырға тейеш. Ҡесаҙна көн, иртәгә йома тыуасаҡ.

Ҡурайсы киткәс тә, дуҫтарҙың һүҙе бөтмәне әле. Һөйәрғолов һуҡ бармағын профессор Мөхәмәтовтың түшенә төрттө.

— Дуҫ, йыйылышта һиңә лә сығыш яһарға тура киләсәк.

— Эйе... — тип ризалашты тегеһе.

— Баҡай дуҫ Ҡыяметдинов менән һөйләште.

— Эйе, — тип килеште Баҡай.

— Миңә, үҙең беләһең, ярамай, мин, моғайын, ситтәрәк, битараф һымағыраҡ ултырырмын. Һин институттың бөгөнгө бөлгән хәле тураһында тылҡырһың...

— Нимә?

— Һөйләрһең, тим. — Һөйәрғолов үҙен-үҙе төҙәтте. — Һуңғы ваҡытта студенттарҙың белем кимәле түбәнәйеүгә баҫым яһа. Бигерәк тә ауылдан ҡабул ителгән балалар йомшаҡ. Сөнки ректор, бер ни менән дә иҫәпләшмәй, абитуренттарҙы төпкөл ауылдарҙан йыя. Хәҙер бит ауыл мәктәптәренән килеүселәр ҡырҡ, илле процентҡа етте.

— Ректор ҡабул итеү комиссияһы эшен үҙе контролдә тота, аҙна һайын комиссия менән үҙе кәңәшмә үткәрә...

— Әнә шуларҙы вис әйтерһең... Белеме бармы, юҡмы, башҡорт ауылы балаһы икән, студент була...

Мединститут уҡытыусылары шәбәйҙе, уларҙың зарын нефть институты, университет педагогтары аңлап, улар менән килешеп, улар менән бергә ҡайғырышып торҙо.

— Беҙ ҙә үҙ яғыбыҙҙан һеҙгә теләктәшбеҙ, — тине университеттың татар теле кафедраһы мөдире. — Беҙ ҙә һеҙҙең яҡта, хәлгә тәьҫир итеү юлдарын эҙләрбеҙ.

— Был хаҡта һеҙ обкомға хат яҙығыҙ! — тип әрһеҙләнде Һөйәрғолов. — Мединституттағы хәлдәр беҙгә лә килеп ишетелде, был хәлгә беҙ ҙә борсолабыҙ, тигеҙ.

— Университет ректоры беҙҙең яҡлы, бәлки, уның аша обкомға хәбәр еткерербеҙ, — тип вәғәҙәләне университет вәкиле. Ә нефть институты профессорҙары ҡайтырға йыйынды. Уларҙы, күрәһең, үҙҙәрендәге хәл-әхүәлдәр нығыраҡ борсой ине. Нефть институтында әлегә хәлдәр арыу, ләкин тора-бара нишләр...

* * *

Алсынбаев тағы яҡташы Вәлиевҡа барҙы, халыҡ йыйыла башлағайны. Улар паркка табан ыңғайланы. Биш-алты кеше булып киттеләр. Ғафуан һөйөндө: «Беҙҙең дә егеттәр бар икән!» Эсенә йылы ингәндәй итте. «Беҙҙең егеттәр дәррәүерәк булырға ла оҡшай. Бында, һөйәрғоловсыларҙан айырмалы рәүештә, бер ниндәй ҙә эске, кәйеф-сафа ҡороу юҡ. Егеттәр намыҫлы, улар бер нимәгә лә иҫәп тотмай, табышҡа ымһынмай. Уларҙы ил ғәме йөрөтә. Улар бары милләтте кәмһетелеүгә ҡаршы сыға, ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы баҫа. Намыҫ өсөн көрәшкә!»

Был хаҡта Вәлиев та һөйләне.

— Һөйәрғоловсыларҙың маҡсаты бер: йыйылышта улар ректор Ислаховты бәреп төшөрөргә маташасаҡ... Егеттәр, бында эш бер Ислаховта ғына ла түгел, улар медицина институтында «Ислахов рухын» юҡ итергә теләй. Ректор Ислаховтың төп ҡаҙанышы нимәлә? Төпкөл ауыл балаларын күпләп институтҡа ҡабул итеүҙә! Элек беҙҙә күберәген Өфө түрәләре балалары уҡый ине, диплом алғас, улар ҡаланан китмәй, ә төпкөл ауылдарҙа врачтар юҡ иҫәбендә. Асыҡ партия йыйылышында беҙгә ректор Ислаховты яҡлап, ул үткәргән сәйәсәтте хуплап һөйләргә кәрәк, әгәр ҙә йыйылышта һөйәрғоловсылар өҫтөнлөк алһа, обком һөйөнәсәк, Мәскәүҙән икенсе кешене ебәрә һаласаҡтар...

— Эйе, ректорҙы яҡларға кәрәк, — тип ризалашты күптәр.

— Ислаховты урынынан бушатһалар, институт тағы элекке хәленә ҡайтасаҡ, Өфө түрәләре балалары уҡыу йортона әйләнәсәк, беҙҙең күбебеҙ — ауыл балалары, беҙгә үҙ тамырҙарыбыҙҙы онотоу килешмәҫ. Ректорға ҡаршы көрәшеүселәр беҙгә, беҙҙең халҡыбыҙға ҡаршы сыға... — Вәлиев ярһыны.

Аныҡлараҡ мәсьәләләргә күстеләр: йыйылышта кемдәр сығыш яһаясаҡ?

— Ҡотлояров, һин ауылда врач кадрҙары етмәү мәсьәләһен күтәр, — тип туҡыны Вәлиев. — Статидаралыҡҡа барып, һуңғы мәғлүмәттәрҙе ҡарарға ла тура килер, йыбанма.

Мазһар Ҡотлояров килеште. Башҡаларға ла аныҡ бурыстар йөкмәтелде.

— Беҙгә берҙәм булырға кәрәк, — тип ҡабатланы Вәлиев. — Әгәр ҙә бер төптән торһаҡ, еңәбеҙ, тырым-тырағай булһаҡ, Ислаховтың һуңғы йылдарҙағы бөтә тырышлыҡтары юҡҡа сығасаҡ.

— Дә, һуңғы осорҙа саҡ ҡына иркенерәк тын алып ҡалғайныҡ, әҙ генә инициатива күрһәткәйнек, оҡшамай. Шуға бөтәһе өймәкләшеп башҡортҡа ябырыла... — тине Ҡотлояров. Уға икенсе берәүһе ҡушылды:

— Нишләйһең инде, беҙҙең халҡыбыҙ тормошо шулай һәр даим көрәшкә ҡоролған. Беҙ көрәшеп, ауыҙыбыҙға тимер ауыҙлыҡ кейҙерелгән арғымаҡтай сапсып, һәр саҡ алышҡа, бәйгегә әҙер торорға тейешбеҙ.

— Институтҡа төпкөл ауылдарҙан килгән балаларҙы индереү — тәү сиратта беҙҙең үҙебеҙҙе ҡайғыртыу, халҡыбыҙҙың киләсәген хәстәрләү. Был — беҙҙең өсөн бик тә мөһим, ректор Ислахов шуның өсөн бар көсөн һала, — тиештеләр.

— Эйе, был уның хеҙмәтенең емештәре, беҙ шуны әрәм-шәрәм итмәҫкә, балсыҡҡа бутап ҡуймаҫҡа тейешбеҙ.

* * *

Мазһар Ҡотлояров парктан ҡайтты ла, тағы ла монографияһына тотондо.

Уйлай китһәң, XIX быуатта йәшәгән Ғәли Соҡорой, уның улы Ғарифулла Кейеков аҡыл хеҙмәте менән генә шөғөлләнгәнме? Улар — шағир, ғилем

эйәләре, ислам дине белгестәре, үҙҙәренең бай китапханаһы булған, хатта шул заманда сыҡҡан күп гәзиттәрҙе лә алдырған. Соҡоройҙар нәҫеленең үҙ ере, үҙ биләмәләре йәйрәгән, шунда улар ерен һөргән, баҡса ултыртҡан. Улар — ғилем эйәләре, һүҙ маһирҙары, ғилемгә бирелгән заттар.

Мәғрифәтселәр Мөхәммәтсәлим Өмөтбай, Ризаитдин Фәхретдин... Улар башы-тояғы менән ғилемгә сумған, олуғ-олуғ китаптар яҙған, шиғыр сығарған заттар, үҙҙәренең эшмәкәрлеге халыҡ тормошо менән туранан-тура ҡатышҡан, ижадында улар халыҡтың уй-тойғоларын яҡтыртҡан, аһ-зарҙарын сағылдырған. Мөхәммәтсәлим Өмөтбай атлы инсан хакимиәт, заманының олуғ эшмәкәрҙәре менән бик тығыҙ ҡатышып йәшәй. Ул — шул осор хакимиәтенең бер әһеле лә. Атаһы Ишмөхәмәт — Йомран-Табын кантоны башлығы... Ә Ризаитдин Фәхретдин рәсми рәүештә Диниә назаратында эшләй. Ул да замандың зил-зиләләрен, ығы-зығыларын башынан кисерә. Батша ислам дине вәкилдәренә шикләнеп ҡарай, уларҙың эшен батшалыҡ ихтыяжына буйһондорорға тырыша.

Аҡмулла — дала иле йырсыһы, бер ниндәй вазифа биләмәй. Ошо далалай күңеле киң, ошо дала елеләй, ул — ирекле солтан. Далаһында йәйрәй, атына ултырып ала ла, ҡырҡтартмасы кеүек ауылдан ауылға, илдән илгә елә. Китаптарын тарата, шиғырҙарын сәсә.

Шағир-илгиҙәр бик тә ҡыйыу кеше, бик тә хөр фекер йөрөтә, йәне әрнегәнде йырлай... Тура әйткән туғанына ярамаған, икенсе яҡтан, халыҡтың улы, уның моңло йырсыһы уйлағанын әйтергә, халыҡтың күҙен асырға ла тейеш...

* * *

Ғафуан Алсынбаев үлеп ҡыҙын һағынды. Торһа-ятһа ла, шул күҙ алдында. Бәпес устарын һоноп талпына. Ысын ҡошсоҡ: ҡоршап ҡуйған урынынан юғары үрелә. Иңдәрендә ҡанаттар яралған, тәпәйҙәре иҙәндән айырылған. Инде күктә. Оса.

Ҡалай ныҡ итеп ҡыҫа ул муйынды. Сатырман итеп урата, һис ысҡындырмай. Быуар йылан ише һыға муйынды, тын алырға ирек бирмәй. Атайҙың хужаһы. Атаһы менән ни теләй, шулай ҡылана был бала.

Ғафуан сытырҙатып күҙҙәрен йома. Иҫләмәҫкә, күрмәҫкә! Өҙөргә, йөрәктән йолҡоп ташларға! Юҡ, киреһенсә, асығыраҡ, сағыуыраҡ булып балҡый ҡаршыһында. Нурлана. Әллә күҙҙәре яна, әллә маңлайы? Донъяһы яҡтыра, барса ғаләм ялтлап тора ошо яҡтылыҡтан.

Ғафуандың йөрәге өҙөлә. Ул төндәрен йоҡлай алмай. Эштә ярай әле, ә фатирына ҡайтһа, яңғыҙы бикләнә. Гүйә төрмәлә ҡаңғырып ултыра. Бер нимәгә ҡулы бармай. Сәй ҡайната. Кемгә ҡайната? Кем менән ҡара-ҡаршы ултырып сәй эсә? Төпкө яҡта мөйөштә — Айбикәнең карауаты... Йөрәгенә ҡан һауа. Тәүбә иткәйне, анттар биргәйне үҙ-үҙенә. Ул — ғорур ир, бер ваҡытта ла ғәфү итмәйәсәк!

Армиянан демобилизацияланғас, Өфөгә ҡайтты. Тағы ҡаңғырып йөрөнө-йөрөнө лә, Йәмиләһенең ауылына китте. Тағы ҡауыштылар. Икеһе лә башҡорт. Башҡортом, илем тип йән аттылар. Шул берләштерә уларҙы. Әммә бынан һуң да донъялары йүнәлмәне: йылдар уҙҙы, балалар үҫте, тик күңелдәр, бер теленгән икмәк төҫлө, ялғанманы. Мөхәббәтһеҙ, килделе-киттеле йәшәнеләр. Балалар хаҡы тип. Ғафуан ғүмерҙә лә бала ташлай алмай, бала хаҡына шайтандың үҙе менән дә йәшәргә риза.

Ситтән тороп институт тамамлар алдынан интернатта уға мөнәсәбәт ҡырҡа үҙгәрҙе. Юлсурин ағайға теге хәбәрҙе тишкәнемде Баҡайҙар һиҙгән, ахырыһы, тип уйланы Ғафуан. Тегеләр өндәшмәй, бер ни булмағандай йөрөп яталар бит әле.

Ҡурайсы диплом алғас, берәү ҙә шатланманы. Уға һөнәре буйынса туған телдән дәрес тә бирмәнеләр. Яҡташ ағай Юлсурин да иңбашын һикертеп ултыра. Йәнәһе, ул ни эшләй ала! Бахыр, шул баҡайҙарҙан уҙа алмай. Завуч Баҡай сәғәт юҡҡа һылтау итә... Ғафуан үҙе лә ҡул һелтәне. Ысынлап та, интернатта оҙаҡ йылдар эшләгән башҡорт теле уҡытыусылары муйындан, ул шунда тығыла алмай ҙа инде.

* * *

Профессор Ислахов үҙе лә был турала оҙаҡ баш ватты, ошо көндәр эсендә үҙенең бөтә тормошон, бар ҡылғандарын күҙ алдынан үткәргәндәй итте.

Ул утыҙ йыл буйы Мәскәүҙә эшләне, төрлө ғилми-тикшеренеү институттарында, абруйлы лабораторияларҙа тир түкте. Эше абруйлы, вазифалары эре-эре, дәрәжәле ине, машинаһы ла, дачаһы ла булды. Уны унда етди белгес, әҙерлекле ғалим тип һананылар, физиология өлкәһендәге, геронтология фәне буйынса монографияларын юғары баһаланылар.

Эйе, профессор Мәскәүҙә яҡташтары, Башҡортостан етәкселәре менән дә осрашты. Әүәле обкомдың беренсе секретары ла ҡайтырға өгөтләне: «Башҡорт медицина институтында эшләп тә киткәнһегеҙ, әле уны көслө кадрҙар менән нығытаһы, матди базаһын яҡшыртаһы бар», — тине.

Бөтәһе лә дөрөҫ. Тыуған яҡтар, элек эшләп киткән вуз. Дөрөҫөн әйткәндә, үҙ яғыңда эшләү күпкә ҡыйыныраҡ бит. Һәр аҙымыңды күҙәтеп торалар, һәр ҡылығың ниндәйҙер яңғыраш ала. Үҙең дә айбанаһың, таныштарыңдан ҡыйынһырайһың, үҙ ауылыңда олоһо — оло, кесеһе — кесе, һин барыбер уларға төкөрөп ҡарай алмайһың, улар алдында рәсми ҡыланып булмай.

Профессор Ислахов бындай тәҡдимдәрҙән гел баш тартып килде. Башҡортостанда — үҙеңдекеләр, теңкәгә тейеп бөтәсәктәр, дуҫ-иштәр, туғантыумаса йөҙәтер, улар һәр береһе үҙ яғына тартыр... Мәскәүҙә һин бөтә кеше өсөн дә — профессор Ислахов, ә үҙ яғыңда мундир артына ышыҡланып булмай, барыбер асылырға, үҙеңдең бөтә булмышыңды сағылдырырға тура киләсәк.

Мәскәүҙә Башҡортостандағы иҫәп менән йәшәп булмай, Башҡортостанда Мәскәүҙәге үлсәмдәр бармай, Мәскәү самалары унда самаға тап килеп бөтмәй. «Унда мине нәжескә болғатасаҡтар», — тип шикләнә ине профессор Ислахов, ысынында шулай булды ла, үҙ илендә уны бысраҡҡа буянылар, батҡаҡҡа батырҙылар — әлеге обкомдың ғәмәлдәре уны шундай уйҙарға тарыта. Ирекһеҙҙән ҡабат-ҡабат Мәскәүҙәге уйҙарына ҡайта, теге ваҡытта баш тартыуын хаҡ һанай. Ул хаҡлы булған, дөрөҫ самалаған, әле килеп шул шик-шөбһәләре ысынбарлыҡҡа әүерелә.

Үҙ хәсрәттәренә бирелеп, бик ныҡ бирешеп тә китергә ярамай. Ул — көслө кеше бит, Башҡортостан кешеһе генә түгел, Мәскәү вәкиле — донъя кешеһе. Ҡиңерәк фекер йөрөт, юғарынан тороборaҡ ҡара Өфөләге был ығы-зығыларға, профессор Ислахов, һинең тормошоңда шундай ғәмәлдәр генә булдымы ни? Һинең кисергәндәрең шул ғынамы? Быныһы бары сираттағы яҙмыш һынауы түгелме?

* * *

Иң яҡшыһы — картиналар яҙыу. Үҙеңә таман шөғөл. Хәсрәтенә батып ултырмай, иң көйһөҙ мәлендә яраҡлан шөғөлөнә тотона...

Ҡайһылай итеп яҙырға һуң был триптихты? Ҡайҙан табырға сиселеш асҡысын? Күптән йөрөй хыялында. Ғәмһеҙ ҡыҙ бала менән ҡыйыу егет

етәкләшеп алған да болон буйлай. Тирә-йүндә — сәхрә. Аяҙ күктә — күбәләктәр, сиңерткәләр... Һауа сыңлай, гүйә, был яҡтылыҡтан, матурлыҡтан күҙҙәр ҡамаша. Гүйә, бар тирә-йүндә бәхет, һөйөү, йәшлек тантанаһы ғына. Еләкле болон, икәү етәкләшеп алған. Ҡыҙҙың өҫтөндә — йәшел борсаҡ төрткөләре һибелгән күлдәк, елгә елберҙәй итәктәре. Күҙҙәре алға уҡталған. Ҡыҙ ашыға, сәсәй, егеттән ҡалышмаҫҡа тырыша.

Юҡ, рәссам геройҙарын ерҙән айырырға, хыялый заттар итеп төшөрөргә тейеш. Иңдәрендә ҡанаттары ғына юҡ. Ислахов уларҙы фәрештәгә тиң йәндәр итеп күрә. Улар ер тормошо өсөн яраҡлы түгел, улар — хыялы емеше.

Әгәр ҙә ҡыҙ урынына Маһираны, егет төҫөндә үҙен һынландырһа, бер ни ҙә килеп сыҡмаҫ ине. Ул бит фотограф түгел, картинала үҙенең хыялдарын, ынтылышын, әйтеп бөтмәгән теләген белдерә! Һөйөп туймаған йәр, осона сығылмаған юл, йәшәлмәгән йылдар һымаҡ. Ошо яманһыу кисерештәрҙе сағылдыра картина. Һөйөклөһө хаҡында әйтеп бөтмәгән һүҙе. Шуға ла геройҙарын ерҙән айырырға тейеш. Йыһанғаса күтәрергә! Йәш йөрәктәр иркен дә йөҙһөн, йондоҙҙан йондоҙҙарға етһен!

Юҡ, профессорҙың был картинаһы йыһан бушлығын, һалҡын һауаны ғына һүрәтләмәй. Бында йондоҙҙарҙың һалҡын тыны, айҙың ялтырағы ғына тойолмай... Был мөхит еләкле аҡлан да, йыһан бушлығы ла түгел, ә булмыштың әкиәти мөйөшө. Ислахов геройҙары — шунда... Улар бәхеткә һыуһаған йәрҙәр. Ысын бәхет өсөн һәр ваҡыт ниҙер етмәй. Был ике зат киләсәктә айырылышыр... Юҡ! Ерҙә ошондай тиңһеҙ бәхеттең тантана итеүе мөмкин түгел. Былар донъяларын онотҡан, бәхеттәренән иҫергән заттар. Юҡ, ҡыраү һуғыр улар шатлығын.

Профессор Ислахов һыуға төбәлә лә шыма. Тулҡындар сайпыла ла сайпыла. Күпме дәүер тынмай был ағыш. Шул һыуҙар менән, профессор, һин дә ағып бараһың.

* * *

...Ғафуан директор ҡаршыһында тора, башында — уй өйөрмәһе. Теге иһә һүгә генә:

— Бер үҙең өҫтөнән нисәнсе ялыу! Һине эшкә алып, башыма бәлә алдым. Артыңдан нисә ҡат райкомға, роноға йөрөнөм. Бәлә алдым башыма ҡарт көнөмдә.

Үртәлә генә ағай, Ғафуанды уттан алып, һыуға һала. Ҡаршы әйтеп, ишекте шартлата ябып ҡына сығып китер ине яҡташ.

— Тыңла. «Мастерскойҙы бер ваҡытта ла йыйыштырмай. Эшләгән урыны — саң-туҙан. Шунда балаларға дәрес бирә. Ниндәй дәрес ти ул? Ниндәй эстетика? Уҡытыусы, тәрбиәсе үҙе тәрбиәһеҙ». Ҡаты сәпәгәндәрме? Ғәләмәт. Башҡа бәлә генә булдың.

— Хисмәт ағай!

— Нимә? Әллә оҡшамаймы? Тураһын әйткән туғанына ярамаған. Һин әллә мине ауыҙ йомоп ҡалыр, тинеңме, яҡташым, баймағым, тигәс тә. Үҙ башҡортом тигәс тә, поблажка бирер, тиһеңме? Юҡ, миңә бөтәһе лә бер тигеҙ — баймағы ла, башҡаһы ла. Бар, юлыңда бул.

Ғафуан башын һәлендереп коридор буйлап атланы. Кәмһенеү, йәберһенеү өттө үҙәген.

Үткән тормошо ярҙарын байҡай. Эсе яна. Ғүмерҙә башына инмәгән уйҙар язалай. Шул баҡайҙарҙан эт күрмәгәнде күрә, Юлсурин яҡташынан эт еймәҫ әр ишетә. Күнә.

Ни хаҡына? Армиянан һуң, балаларҙы ҡурайҙа уйнарға өйрәтәм, тип башҡорт интернатына барҙы. Смотрҙарға йөрөнө. Улар үҫтеләр ҙә, ояларынан айырылдылар. Хәҙер ҡайһы ҡайҙа? Әҙәм булғандары ла бар. Фәнис тигәне — «Баштрансгаз» башлығы, Йәғәфәре — артист, Ғибат — ғалим... Ни хаҡына ыҙа, йәбер күрә? Йыйын баҡайҙар араһында түҙеп эшләй... Нимәгә? Уны күреүсе лә, белеүсе лә юҡ.

* * *

Маһира Зыяны сабыйын түшенә ҡыҫып оҙатты. Инде күптән күҙ йәштәре кибеп бөткәйне. Ире хәрби кейемдә. Юл ыңғайы ғына һуғылды өйөнә. Маһира уны ишек төбөнән үк оҙатты. Һуңынан да ул хәрби врач Ислахов хәтерендә ошолай ҡаласаҡ.

Оҙон фронт юлдары. Осо ла, ҡырыйы ла күренмәй. Үҙеңдең дә тәнең ҡатып барғанын тойғансы операция өҫтәле артында тороу...

Юҡ, хәҙер профессорҙың ул йылдарҙы тамсы ла иҫләгеһе килмәй. Шулай ҙа унда ғүмеренең бер киҫәге тороп ҡалған бит, унда ярһыу йәшлеге, ыҙалары... Өфөнән ҡайһылай хаттар көтә ине. Батыр малайы — Ишбулдыһы хаҡында берике ауыҙ һүҙгә лә зар-интизар. Өфөнән килгән хаттар, бәлки, уны фәрештәләй афәттәрҙән һаҡлағандыр. Уға йәшәү көсө, түҙемлек биргәндер, кем белә?

Һыуыҡ подвалда операция яһағанда аяғын туңдыра яҙыуы ла, ауыр шарттар ҙа, бомба аҫтында ҡалыу ҙа онотолған. Бына Маһираның ишек төбөндә оҙатыуы... Сабыйы — түшендә, күҙҙәре Зыянан аша төбәлгән, уйҙары ла әллә ҡайҙа. Ул, гүйә, ысын Маһира булыуҙан туҡтап, статуяға әүерелгән.

Рәссам уны терелтә алмай. Уға йән өрә алмай, диуана. Асҡыс таба алмай героиняһына. Нисек уға йәшәү һулышы өрөргә? Әллә профессор Ислахов шул заттарҙан үҙе лә айырылдымы?

Юҡ, был образ уға ят. Ул ҡайҙалыр күңел төбөндә йәшәй, әммә ҡағыҙҙа һынландыра алмай. Йылдар уны урланы, яҙмышы урлап ҡасты.

...Профессор дачаһындағы ер еләктәренә лә ҡағылмай. Еләкте яңы урынға күсереп ултыртырға ине. Барыһына ҡул һелтәп, Ағиҙел йылғаһы буйына ыңғайлай. Йәшел бәрхәт үлән, ҡояш нурҙары талсыҡҡан тәнен йылыта. Барыбер ҡыйын.

Исмаһам, бынау триптихын да яҙып бөтөрә алманы. Башлай ҙа ташлай. Иң кәрәкле, иң тәғәйен һыҙаттарҙы табырға ашҡына... Образ тигәнең күңел төбөндә бар ҙа, әммә киндергә төшә һалып бармай.

Ҡасан табыр нәгеҙ үҙенекен, теге хыялдағыһын? Ҡасан балҡыр шул яғымлы, яҡын сырай? Ҡәҙерлеләренең йәне ҡайҙарҙа аҙашып осоп йөрөй икән?

* * *

Маһираның көнө больницала үтә тиерлек. Өфөгә эвакгоспиталдәрҙе килтереп тултырҙылар — эштән бушамайҙар. Утын әҙ ҡалды, өләсәһе Ишбулдыны әйбергә төрөп ултырта. Ҡайтһа, тәүге һүҙе: «Инәй, асыҡтым».

Үҙе менән госпиталдән алған икмәк, шәкәр киҫәген малайға һона һала.

— Инәй, һин дә аша.

Тамаҡ ялы булып ҡала был госпиталь күстәнәстәре.

— Ишбулды бөгөн ҡатығын да ашаманы, маңлайы ут кеүек. — Ҡәйнәһе көйөнә. Маһира малайҙың маңлайына усын баҫа. Температураһы күтәрелгән.

Был врач әсәнең йөрәген телгеләй. «Үҙең табип исемен күтәреп йөрөгән булаһың...» — тип йәне көйә. Сабый ауыр һулап ята. Температураһы төшмәй.

— Эсем дә ауырта, инәй.

— Бөгөн ниңә ҡатыҡ ашаманың?

— Ашағым килмәй.

— Күңелең болғанамы?

— Эйе. — Тәне ут һымаҡ.

Ишбулды больницала ун биш көнләп ятты. Үпкәһе шешкән.

Яҡшы ашау кәрәк тигәс, Маһира баҙарҙа алтын сылбырлы сәғәтте һатты. Әллә күпме ашамлыҡ тейәп ҡайтты, ҡәйнәһенең түбәһе күккә тейгән.

«Исмаһам, янымда яҡындарым булһа...» — тип үрһәләнә Маһира. Өфө һыуыҡ, утын яғы самалы... Тамаҡ ялы тип, шул больницаһынан ҡайтып инмәй.

Ул көндө лә һуң ғына ҡайтты, ә Ишбулды һаташа ине. Ҡулын ян-яҡҡа ташлай, башын борғолай, өләсәһе хәлдән тайған.

— Ишбулды улым, ни ерең ауырта?

Бала өндәшмәй, тулай. Тәне ут кеүек.

— Ишбулды, Ишбулды, тим.

«Бер ҡат дауаханала ятты бит инде». Градусникка тотондо. Утыҙ туғыҙ! Оҙаҡламай биҙгәк тота башлаясаҡ. Больницаға!

Ҡулына ни тура килә, шуны эләктерә һалып, малайҙы ураны-сураны. Тышта буран ҡотора. Ҡабалана-ҡарһалана, ер менән күк араһынан бара. Аяҡтары тыңламай. Йәһәтерәк! Үҙе врач башына балаһын ни көнгә төшөрҙө, ире ни тиер?

— Түҙ, түҙ, балам! — Үҙе илай.

Буран ҡотора. Ел ҡуйынға, күҙгә тула. Бисара һиҫкәнеп китә: ҡосағындағы ҡошсоғо туламай. «Әллә?» — «Юҡ, юҡ, ул тере!..» — «Ул — врач, ул балаһын ҡотҡарырға бурыслы!»

Күҙ йәше тыйылмай. Ул алға уҡтала, моратына етергә тейеш! Иң яҡын больница ишеген шаҡый. Врачтар, сестралар йыйылышып китә. Сабыйҙы һуҙып һалалар, бәлки, массаж эшләп булыр... Ул һыуынған да инде... Әсә ҡымшанмай, ышанмай быға. Улы тере, тере! Ул ойоп ҡына киткән.

Ишбулдыны ерләгән көндө лә буран ҡоторҙо. Күҙ асҡыһыҙ ине Өфө урамында. Мосолман зыяратына Маһира хеҙмәттәштәре менән барҙы. Зыяның әсәһе лә арттан эйәргән. Бисара әсәне ҡултыҡлап алғандар. Юҡ, юҡ уны тыйыр көс! Уны йыуатыр ҡөҙрәте юҡ был кешеләрҙең. Баштары аҫҡа һәленгән...

Зыярат ҡарауылсыһы — йүнсел ҡарт, рәхмәт яуғыры, алдан ҡәбер ҡаҙҙырған. Буран яһил. Ҡемгә нәфрәте шулай ташалыр. Бер сабыйҙы ҡосағына алды, һаман баҫылмай, тағы ҡорбан көҫәй. Бахыр баланы ер ҡуйынына төшөрҙөләр ҙә күмә башланылар.

— Улым Ишбулды! Улыҡайым, ғәфү ит! — Әсә сеңләй генә. Зыярат ҡарауылсылары ашыға. Ел өрә, үҙәккә үтә. Эш кешеләренә тиҙерәк эш осларға ла әжерен алырға.

Буран өйөрмәһе уртаһында бәләкәй генә ҡалҡыулыҡ хасил. Кешеләр ситкә тартылды, ҡар күмеп, ҡәберҙе биҙәне, өҫтөнә аҡ сәскәләр һипте.

Яҙ көнө Маһира бәләкәсе ҡәберен тапманы. Ҡәйнәһе менән улы Ишбулдының баш осона ерәй таш ҡуйып китергә тип барғайнылар.

Оҙаҡ эҙләнеләр ҡәберҙе, бөтөн тирәне ҡыҙырып сыҡтылар. Алйып бөттөләр, арманһыҙ булдылар.

— Бына ошо тәңгәлдәрәк ине бит, ҡәйнәм.

— Бер ҙә хәтерләмәйем, килен.

— Ошонда ғына кеүек ине... — Өнө һауала эленә. Бөрөләр тиртә, ерҙә — йәшел һабаҡтар, донъя яңынан тереләә, ә Ишбулдының ҡәбере юҡ.

Ҡатындар зыяратты арҡырыға, буйға үтте. Һәр таш, һәр убалыҡ тикшерелде. Ҡалҡыу тәңгәлгә етһәләр, оҙаҡ баш эйеп торалар. Ул таныш ҡәбер — юҡ. Юҡ ул был ер йөҙөндә!

— Ишбулды, балаҡайым! — Маһира һығылып төшә, уға ҡәйнәһе ҡушыла. Бисара йәндәр.

Ҡарауылсы ҡайҙа? Теге ҡарт... Ҡәбер тиклем ҡәбер юғала тиме инде? Уның да ерҙә үҙ хаҡы, урыны бар. Ҡышын улар ҡапҡанан тура күтәрелгәндәй булдылар, шунан һулға ҡайырылдылар.

Ҡыуаҡлыҡтар араһын ҡыҙырҙылар. Шунда ғына ерләгән кеүектәр ине бит. Бисара ҡатын хыялыйҙар ғына булды. Ҡалҡыулыҡтарҙы һәрмәне, ят ҡәбер таштарын һыйпаштырҙы — юҡ, юҡ...

Бер тәңгәлдә сабый бото табып алдылар, шунда, үлән араһында — борһаланып бөткән сәс өлтөгө!..

— Шулмы икән, ҡәйнәм? — тип ҡысҡырҙы бисара ҡатын.

— Ҡайҙа? — Ҡәйнәһе табылдыҡты әйләндереп-тулғандырып ҡараны. — Оҡшамаған.

— Шул, шул, ҡәйнәм! — Бисара аһтар орҙо.

— Әйҙә, килен, ҡайтайыҡ, — тине ҡәйнәһе, ул сабырыраҡ.

— Ишбулды юҡ бит!

— Ярай, килен, Зыя үҙе ҡайтҡас, бергәләп эҙләрбеҙ.

Шул һүҙ баҫылдырҙы булһа кәрәк.

* * *

Теге ҡәбер, ахырыһы, Ер йөҙөндә юҡтыр. Әгәр булһа, табылыр ине. Ул, бәлки, ер менән тигеҙләнгәндер. Ер бик күптәрҙе үҙ ҡуйынына алған бит... Бәлки, был сабыйҙы ла ҡосағына һыйындырғандыр. Ул ҡыйырһытылған, өшөгән, зарыҡҡан йәндәрҙе ҡуйынына алып тынысландыра. Мәңге шулай иткән, мәңге шулай буласаҡ. Игелекле ул ер, изгелекле — бөтәһе лә һуңғы сиктә уға бауырын баҫа.

Эйе, хатта көсөм бөттө, бәндәләр араһында ҡәҙерем, иштәрем ҡалманы, тигәндә лә, кешем, ышан: өмөтөң һүнмәгән. Өмөт осҡоно — Ер-бабала. Ул, ниндәй көнгә тарыһаң да, һине ҡосағына ала — тыныслан, баҫыл! Ышан олуғ Ергә: барыбер уға ҡайтырһың, барыбер ул һинән баш тартмаясаҡ. Ул ғына беребеҙҙе лә ситкә типмәй.

...Ниңә йән эйәһенең яҙмышы аяуһыҙ, бер мәрхәмәте, йылыһы юҡ? Ниңә толҡаһыҙ ер йөҙө, бәндәләрҙе иңрәтә, һуңғы өмөттәрен йолҡоп ала? Тормоштарын мәхшәргә әйләндерә, бәғерҙәрен телгеләй? Ниңә, ниңә иң ҡәҙерлеләрен йола? Әллә тормош-рәссам шулай картинаһын буяймы? Буяп, сырмап, болғатып бөтөрә.

Хәҙер уға ла аяуһыҙлыҡ күрһәтергә кәрәк. Ул да тормошто тулы ҡанлы сағылдырам тиһә, ҡараңғы ҡуйы буяуҙарҙы йышыраҡ ҡулланырға тейеш. Иманһыҙ һөнәр эйәһе һин, рәссам! Бәғерһеҙ әҙип һымаҡ, иң яҡын заттарҙы ҡорбан итергә мәжбүрһең, геройҙарыңды шәһит килтерергә тейешһең.

Юҡ, ул үҙ-үҙен еңә алмай, тойомлауҙарынан аша атлай алмай. Ул героиняһы иркендә... Ул героиняһын һыпырып та, юйып та ташлай алмай. Маһира инде бер ни ҙә һорамай, уға инде бер нәмә лә кәрәкмәй. Сырайы битараф, сабыйын түшенә ҡыҫҡан. Иң ҙур ҡиммәте.

Хәҙер профессор картиналағыларға ят бауыр. Ә бит заманында уларға атай, ир ине. Аңланы: уның профессорлығы ла, ректорлығы ла ошо бөйөклөк алдында сүп кенә. Ул хәҙер ошо ир менән атайҙан күпкә бәхетһеҙерәк тә, хоҡуҡһыҙыраҡ та. Дөрөҫөрәге, ул ир ҙә, атай ҙа түгел. Ул бары профессор Ислахов, художник Ислахов ҡына.

Ә теге Мадонна, теге илаһи әсә сабыйын түшенә ҡыҫҡан. Һаман юғарыраҡ ҡалҡына, һаман сағыуыраҡ була бара. Ул инде иламай, был ығы-зығынан айырылған. Ул ректор мәшәҡәттәрен дә аңламай, унан юғарыраҡ. Ул азатлыҡҡа, еңеүгә өндәй. Рәссам уны хаҡ, ҡанатлы итеп һынландыра алырмы?

Маңлайыңа яҙылған тәҡдирең ниндәй, профессор Ислахов? Ошо хаҡта уйланып ҡарағаның бармы?

## Өсөнсө бүлек

Алламоратов тәҙрә ҡаршыһына баҫты. Ҡабинеты иркен, тәҙрәләре ҙур. Бейек түшәмле бүлмә һәр саҡ яҡты. Хужа ғына өнһөҙ, сырайы ҡараңғы. Яңғыҙы. Аулаҡта донъяның барса мәшәҡәттәренән айырылғандай хис итә. Ошондай мәлдәрҙә онотолоп уйланырға, хыялланырға мөмкин.

Обком секретары, партияның Башҡортостанда баш идеологы. Ауыр йөк ята иңендә, бар республикала рухиәт дилбегәһен усында тота. Бирешмәҫкә, ҡолап ҡуймаҫҡа! Ныҡлыҡ, көс кәрәк уға! Ҡыйыулыҡ кәрәк!

Йәшләй генә армияға алынып, фронтҡа оҙатылды. Педучилищела уҡығас, политрук иттеләр. Һалдаттар араһында ағартыу эше алып барҙы: фронт хәлдәре менән таныштырҙы, сәйәси хәлде һөйләне. Телгә оҫта, күҙе үткер, ғәжәп зирәк ине. Йәшерәк саҡта һөйгән ҡыҙы Маһираға арнап шиғырҙар яҙғылады. Йөрәкте өҙә ине улар. Һөйөклөһө уға тәтемәне: яһилдар уның һылыуын танау осонан урлап ҡасты. Шунан һуң уҡытыусы егет был ҡырағай йолаларҙы, боронғоно күрә алмаҫ булды. Ярай, оҙаҡламай армияға саҡырҙылар. Күңел төбөндә яра ғына ҡалды. Мәле-мәле ул һулҡылдай, үткәнде иҫенә төшөрә ине.

Партияның тоғро һалдаты Алламоратов һалдаттарҙы яуға өндәне, хатта хәтәр атакаларға күтәрҙе. Фронттан ҡайтҡанда мыҡты кәүҙәле, утты-һыуҙы кискән ир ине. Дәрте ташып тора, ҡулынан ниндәй эш тә килер төҫлө.

Уны, зәп-зәңгәр күҙле, аҡһыл сәсле, аҡһыл йөҙлө, текә маңлайлы ирҙе, күрҙеләр, күтәрҙеләр. Партия өсөн быдай әҙерлекле кадр — табыш ҡына. Улар илде емереклектән ҡотайтыр, халыҡты яҡты киләсәккә әйҙәр. Һынмаҫ, һынатмаҫ.

Алламоратов тәүҙән үк партия эшендә булды. Ҡайтып, туған-тыумасаһы менән йүнләп күрешеп тә өлгөрмәне, райкомға ҡоҙаланылар. Унан, күп тә үтмәй, өлкә партия комитетына тәҡдим иттеләр. Аҙаҡ курстар, партия юғары мәктәбе...

Алламоратов партия эшенән ғүмергә айырылманы. Гүйә, тулҡындар кәмәне үҙ иңенә алдылар ҙа ары алып киттеләр. Шул яйға алға тәгәрәне яҙмыш йомғағы. Әллә ни көсәнеүһеҙ вазифанан вазифаға, юғарынан юғарыға үрләне.

Алламоратов үрләүен үҙенең һәләтенә генә бәйләне. Аллаға ышанмаһа ла, үҙендә ниндәйҙер тылсым барлығын тоя ине. Шул тылсым уны күтәрә! Әллә ниндәй ташҡындарҙа батырмай, имен-аман көйө һаҡлай.

Ҡабинетының тәҙрәләре мединститутҡа ҡарай. Ректор Ислахов (көнсөл ир көндәше) тәҙрәләре лә был яҡта бит. Ошо сәғәттә профессор ни менән

мәшғүл икән? Һуңғы аҙнала ректорҙы ҡабул итеүҙән баш тартты, бындай баш-баштаҡтарға ҡайһы берҙә шул да килешә.

Һаулыҡ һаҡлау министры Рәжәповты саҡырҙы. Белә: Рәжәпов ректорҙы күрә алмай. Икәүҙең үҙ-ара борсағы бешмәй.

— Кәңәш бар.

— Тыңлайым, Хәйҙәрович...

— Мединститут ректоры Ислахов тураһында ни уйлайһығыҙ?

— Ни тип... — Рәжәпов ыҡ-мыҡ итте, нисек яуап бирһәм, килешер икән тип баш ватты.

Алламоратов, ректор менән министрҙың мөнәсәбәтен белә, шуға асыҡтан-асыҡ һөйләшә ала.

— Дөрөҫөн әйткәндә, Рәжәпов иптәш, мединститутта ҡот осҡос хәл тыуҙы: ректор Ислахов ауыл балалары нисбәтен өс проценттан ҡырҡ өс процентҡаса күтәрҙе. Хәҙер институтҡа гел ауыл балалары — әҙерлекһеҙ абитуриенттар ҡабул ителә, был беҙҙе, обкомды, хәүефләндерә...

— Беҙҙе лә, Хәйҙәрович, борсолоуығыҙҙы аңлайбыҙ...

— Институт белемһеҙ балалар менән тула... Элиталы уҡыу йортона шыр наҙан башҡорт балалары ҡабул ителә!..

— Шулай, Хәйҙәрович, беҙ ҙә быға көйәбеҙ... Ҡасандан бит инде, ректор Ислахов шуға юл ҡуя...

— Үҙе башлап йөрөй, үҙе ҡабул итеү комиссияһы ағзалары менән һөйләшә, уларҙан төпкөл ауыл балаларын алыуҙы талап итә! — Алламоратов ярһыны.

— Дөрөҫ, дөрөҫ, — тип йөпләне обком секретарын һаулыҡ һаҡлау министры. — Мин дә күптән уйлап йөрөйөм, ректор Ислахов мәсьәләһе күптән өлгөргән.

— Ислахов урынына кемде тәҡдим итәһең, Рәжәпов иптәш?

Рәжәпов иптәш, ҡолаҡтарым ысынды ишетәме, әллә буштымы тигәндәй, ян-яғына ҡарана: шаһиттар юҡмы тип шөбһәләнә.

— Мин — Таһировты!.. — тине ул һис икеләнмәй.

Алламоратов министрҙың профессор Таһиров менән дуҫлығын ишеткәне лә, күргәне лә бар.

— Ә ниңә Бикбулатов түгел?

— Бикбулатов оло инде... Тарта алмаҫ.

— Ярай, һинеңсә, «академик» Бикбулатов бармай, ә Һөйәрғолов?

— Һөйәрғоловты мин бик белеп бөтмәйем.

— Нисек? Ете йыллап проректор булған Һөйәрғоловты белмәйһегеҙме? — Алламоратов ҡыҙҙы, ә Рәжәпов ҡурҡыуға төштө.

— Беләм дә, тик яҡындан... Ҡеше булараҡ белмәйем.

— Ә Таһировты?..

— Уны ян-яҡлап... — Министр тағы тотлоҡто. — Һәм ышанам: ул ышанысты, то есть, өмөттө аҡлар. Уны халыҡ та белә. Популяр.

— «Популяр» тиһең инде.

— Популяр.

Һаулыҡ һаҡлау министры артынан мәҙәниәт министры Харрасовты саҡыртты Алламоратов.

Харрасов, Рәжәпов шикелле ыңғай бәндә булһа ла, ауырыраҡ әҙәм. Баш баҫып уйлай, осоноп төшөп, ороп-бәреп бармай. Уның менән яйлап ултырырға мөмкин.

— Сабир Хәйҙәрович, мин дә ишеткәйнем: проректор Һөйәрғолов күптән ректор булырға хыяллана, тип.

— Ҡуптән шул, — тип йөпләне секретарь мәҙәниәт министрын.
— Икенсенән, Һөйәрғолов шунда эшләй...
— Эште белә...
— Проректор, профессор. Ул саҡта беҙ институтта ла әллә ни ығы-зығы, шау-шыу ҡуптармайбыҙ.
— Мин дә шулайыраҡ уйлай инем. — Тиҙ килешә Алламоратов дуҫы менән.

Алламоратов буталсыҡ мәсьәлә тыуһа, дуҫтарын саҡыра. Тәүҙә уларҙы тыңлай, сағыштыра. Ҡарарҙы барыбер ул ҡылыр, ләкин кәңәш-төңөш итеү ҙә фарыз. Бер баштан икәү арыуыраҡ... Ғәҙәттә, Харрасовты саҡыра, Нөркәевте, Баҡаев дуҫын. Йүгереп килеп етәләр. Дуҫтар, кәңәшселәр. Нөркәев — республика китапханаһы мөдире, Баҡаев — республика интернатында директор урынбаҫары. Нөркәев йәнәштә генә, ә Баҡаев арала иң төплөһө, хәйләкәре. Үҙе серҙәш, үҙе башлы.

Оло кеше инде. Ҡасандыр Юғары Судта ағза булған. Бөтөн закондарҙы белә, шул ҡарурманда һис аҙашмай. Ҙур таяныс ул Алламоратовҡа. Баҡаев — уның рухи остазы тиергә лә ярай. Алламоратов уның менән йыш кәңәшләшә.

Баҡаев обкомда ла үҙ кеше, уны вахтерына тиклем таныпы тора. Милиционерҙар тотмай. Алламоратов остазын ҡоласын йәйеп ҡаршылай.

— Ағай, түрҙән уҙығыҙ!
— Рәхмәт, туған.

Баҡай ныҡ әле, алтмышты аша атлаһа ла, бирешмәгән: тауышы көр, күҙҙәре үткер.

— Эйе, Ислахов саманы онотто. Башлыҡ булдым тигәс тә... — Баҡай — оҙаҡ йәшәгән балыҡ, мединституттағы яңылыҡтарҙы белеп тора. — Күп йылдар дауам итә был хәл институтта. Ике ҡыҙым да шунда уҡыны. Ислахов бөтөн институттың аҫтын өҫкә килтерҙе. Ислахов, эйе, Мәскәү кешеһе. Тотҡан ерҙән һындыра, үҙебеҙҙекеләр ише түгел. Знамы, институт туранан-тура Мәскәүгә, РСФСР министрлығына буйһона. Бел шуны, туған.

Алламоратовтың секретаршаһы хуш еҫле бал, сәй индерә. Алламоратов үҙе сәй бешерә. Оло ҡунаҡ хөрмәтенә — һый-хөрмәт. Был сәйҙең дә шифаһы тейер, моғайын, дуҫтарға.

* * *

Зитына тейҙе был Тихоновский! Хатта хәҙер шул Шаһиәхмәтовы уйында ла юҡ, ә Тихоновский... Төшөнә керә, теленә тилсә сыҡҡыры, хәтерен тишкеләп бөтөрә, хатта шуның өсөн Эске эштәр министрлығы ултырышында Алламоратовтың үҙе менән эләгешеп китә яҙҙы.

Кәңәшмәгә мединститут ректорын да саҡырғайнылар. Президиумда ғәҙәттәгесә Алламоратов үҙе ултыра. Эске эштәр министры Тихоновскийға сәнскән медик Шаһиәхмәтов эше хаҡында ла иҫкә төшөрҙө, шунда Алламоратов телгә килеп:

— Ана, мединститут ректоры Ислахов үҙе бында ултыра. Ул студентының тәртибе хаҡында һөйләп китһен! — тине. — Институтҡа һуңғы йылдарҙа күпләп ауыл балалары ҡабул ителә, Шаһиәхмәтов — ана шуларҙың береһе, ауылға врач булып ҡайтасаҡ кадр, — тип тә өҫтәне.

Ректор бындайҙы көтмәгәйне, олоғара зал да шымды. Сығыш яһаусы туҡтаны, күрәһең, обком секретары үтенесе бер бойороҡ ине: хәҙер медицина

институты ректоры урынынан ҡалҡыр ҙа киҫә һорауға етди яуап ҡайтара башлар, тип уйлағандыр, әммә Ислахов ҡымшанманы. Пауза уғата оҙонға һуҙылғас ҡына, яйлап баҫты, шунан президиумға табан атланы.

Ректор трибунаға, министр ҡырына барып баҫты. Һиҙә: бөтәһе лә көтә.

— Хөрмәтле кәңәшмә, әлбиттә, был енәйәт республика күләмендә әллә ни иғтибарҙы ла йәлеп итмәйҙер. Әммә уға обком секретары үҙе туҡталғас, әйтәйем: беҙгә оят. Ауыл балаһы Шаһиәхмәтов енәйәт ҡылды, быны бер ни менән дә аҡлап булмай, тик юриспруденцияла «енәйәт мотивы» тигән төшөнсә лә бар. Уның буйынса, Шаһиәхмәтов башта таныш ҡыҙына бәйләнгән Тихоновскийға киҫәтеү яһай, ә тегеһе уны тыңлау урынына битенә һуғып ебәрә. Ауыл балаһы Тихоновскийҙы сәнскән, ә иҫерек Тихоновский иптәштәре менән Шаһиәхмәтовты урамға һөйрәп сығара, туҡмай. Иң һуңғы сиктә ятаҡ тупһаһында типкеләнеп ятҡан Шаһиәхмәтов бысаҡҡа йәбешә. Был — мединституттың 4-се ятағында булған хәл. Операция яһағанда Тихоновский һаман айнып етмәгән була әле. Бына һеҙгә, Сабир Хәйҙәрович, бөтә дөрөҫлөк. Иғтибарығыҙ өсөн рәхмәт.

Ректор шул һүҙҙәрҙән һуң тыныс ҡына урынына йүнәлде.

* * *

Күҙҙәренән йәштәре атылып сыҡҡансы көлөштөләр.

— Ниндәй яңылыҡтар бар, абзый? — Тәүләп Һөйәрғолов етдиләнде.

— «Аҡ абзый» бурыстар ҡуйҙы, — тип һалды профессор Мөхәмәтов. («Аҡ абзый» тигәне Алламоратов була.) — Беҙгә ректорҙың абруйын төшөрөү бурысы йөкмәтелә.

— «Академик»ты ла саҡыртабыҙмы?

— Эйе, — тип килеште Мөхәмәтов. «Академик» тигәне Бикбулатов инде. — Аҡ абзый бер фекерҙә: Ислахов урынына һеҙҙе әҙерләргә!

— Ха! — Проректор Һөйәрғолов шатлығынан усын тубығына шапылдатты. — Рәхмәт, дуҫ. — Тағы берҙе күтәрҙеләр.

— Икмәк өҫтө, ай менән ҡояш шаһит, — тине профессор Мөхәмәтов.

Һөйәрғолов был кистә ике дуҫы менән йәйелеп ултырҙы. Уға бәхет йылмаймаҡсы, шатлығы сигенән аша: Аҡ абзый уның кандидатураһын яҡлай; былай булғас, ниһайәт, күптәнге хыялы бойомға аша...

Күҙ алдары томаланды... Күк асманы урталайға ярылды ла ҡаршыһында яңы донъя асылды... Рәт-рәт аҡ колонналар теҙелгән, уртала — тәхет. Тәхеттә — ректор Ислахов. Тирәһендә — ярандары, һылыу бисәләр. Ике рәт баҫҡандар. Һомғол һындары күҙҙең яуын ала, үтәнән-үтә күренмәле күлдәктәре... Һөйәрғолов шулар араһынан һалмаҡ ҡына атлай. Ректор тантаналы рәүештә уға тәхетен тапшыра. Фонтандар атыла, һылыуҡайҙар ҡотлай, Һөйәрғолов береһе менән вальсҡа төшә. Бәй, бисәһе, имеш. Яңы түрә, уның менән мөрхәтһенмәй, ситтә торған студентканы саҡыра.

Шунда кинәт кенә бөтәһе лә юғала. Ҡабинетында ойоп киткән, баҡһаң...

* * *

— Урал бөркөтө. Ҡурайсы.

— Рәхим итегеҙ!

Һөйәрғолов аҡса ырғытты. Бер йәшелде. Ҡурайсы ла, аҡса тип, кеҫәһенә тығылғайны, тыйҙы.

— Бында мин һыйлайым.

Донъя тағы үҙ ыңғайына ҡайтты: гөрләшеп ултырҙылар. Ҡарусель-ҡуласа әйләнә: уртала — профессор, тирәһендә — уйынсыҡтар. Һөйәрғолов үҙе был оло донъяның кендеге.

— Бер үтенес бар ине...

— Әйт, — тине Һөйәрғолов.

— Интернатта минең ансамблем бар бит инде... Ҡурайсылар ансамбле. — Йәтеш кенә аңлата алмай аҙаплана ҡурайсы. — Шул егеттәрҙең үҙҙәренә лә ярҙам итке килә. Мединститутҡа барабыҙ, тиҙәр.

— Килһендәр. Үҙемдең дуҫыма, башҡорт ағайыма игелек эшләмәй, кемгә эшләйем. — Проректор түш кеҫәһенән һорғолт тышлы блокнотын сығара. — Исемдәрен ата!

Ҡурайсы биш-алты исемде атай.

* * *

Профессор Таһиров менән һаулыҡ һаҡлау министры Рәжәпов — дуҫтар. Рәжәповтың оло улы Таһиров етәкселегендә кандидатлыҡ диссертацияһы яҡланы. Профессор — эш кешеһе, бер фанатик бәндә, больницанан, кафедраһынан ҡайтып кермәй. Ә министр Рәжәпов күптән фәндән айырылған әҙәм, хәҙер кадрҙар менән шөғөлләнә. Ысын врач та, ғалим да түгел. Нисәмә дәүер лабораторияға, китапханаға ингәне юҡ.

Профессор Таһиров та ректор булырға хыялланды. Талант эйәһенә түрәлек ниңә кәрәктер инде? Ул былай ҙа ихтирамға лайыҡ, үҙ эшенән йәм-тәм таба бит. Иң ҡатмарлы операцияларға тотона, ауырыуҙар өсөн фәрештәгә тиң тиерлек... Студенттар һоҡланып туя алмай, коллегалары көнләшә. Юҡ, профессорҙың барыбер ректор булғыһы килә. Ректор булһа, баһаһы үҫәсәк, институтты ул яңыса итеп ҡорасаҡ. Аҡылын, бар һәләтен һабаҡташтарына бирер ине.

Ректор булһаң, һине күрәләр. Медицинаға бер ҡатышы ла булмағандар ҙа таный, обком, совмин һинең фекереңде тыңлай. Һине бөтөн халыҡ белә.

Таһиров биш йыл тирәһе эшләп алғас, аҙаҡ яңынан фәнгә әйләнеп ҡайтыр ине... Киләсәктә биографияһына ла «Таһиров медицина институты ректоры булды» тип яҙасаҡтар. Бәлки, бөтөн эштәре, оҫта хирург булыуы, профессорлығы хәтерҙән сығыр, ә был дәрәжә... Күпме хирургтар онотолған, бихисап ғилем эйәләре ваҡыт туҙанына күмелгән!

— Профессор Таһиров! — тине Алламоратов, ишектә ҡунаҡтар күренеү менән. — Әйҙүк!

— Һаумыһығыҙ.

— Ишетеп торабыҙ: тылсымлы хирург, һәйбәт художник...

— Әҙерәк шыттыралар...

— Ултырышығыҙ! — Бойороулы тәҡдим яһай кабинет хужаһы. Ҡунаҡтарға төртмә һүҙ әйтеүен ҡуймай, шул һүҙ маһирлығы менән теләһә ниндәй ҡорҙа ла үҙ абуруйын күтәрә белә. Партия мәктәбендә лә ораторлыҡ түңәрәгендә гел еңеп сыға торғайны.

— Яҙ, авитаминоз, тиҙәрме әле...

— Көс бар, эшләргә була әле, — тип ҡуйҙы профессор. Бында үҙенең ниңә саҡырылыуын белә, Рәжәпов та обкомда үҙен нисек тоторға киҫәтеп ҡуйғайны.

— Алламоратов иптәш, мединститут ректоры алдығыҙҙа ултыра. — ти Рәжәпов...

— О! Шулаймы? Ә Таһиров иптәш үҙе нисек уйлай? — Был Алламоратовтың ятраҡан һорауы. Ул уны Лениндың хеҙмәттәренән отоп алған.

— Мин, — тип башланы профессор. — Мин... — Ҡыҙарынды, бүртенде профессор. Ә Алламоратов уйсан, фекерле зат, кеше психикаһын яҡшы белеүенә һөйөндө.

— Һеҙҙе фән кешеһе, оҫта хирург итеп беләбеҙ, ә ректорлыҡ иң элек кешеләр менән эшләүгә бәйле... Хужалыҡ мәшәҡәттәре, һеҙ...

— Фән кешеһе ректор була алмай тимәксеһегеҙме?

— Юҡ, мин фекер алышам. Ғалим менән ҡоро администратор һыйыша аламы, бер-береһенә ҡамасауламаҫмы, тим.

— Ислаховты ғына алмаштыра алырмын кеүек...

— Профессор Ислахов инде ун йыллап ректор...

— Улайһа, ниңә уны урынынан төшөрәһегеҙ? — Таһиров — ҡырыҫ әҙәм, бер ҡасан да, бер кемгә лә баш биреп өйрәнмәгән. Һаулыҡ һаҡлау министрының ҡобараһы осто: обкомда улай ҡырҡыу һөйләшмәйҙәр. Ә Алламоратов үҙе лә ҡаушап ҡала торғандарҙан түгел, һүҙ уйнатыуҙа ла һис мах бирмәҫ. Партия мәктәбендә уларҙы гел еңергә, өҫкә сығырға өйрәттеләр. Бәхәстә нисек тә үҙ һүҙеңде бирмә! Партия идеологы — бәхәс батшаһы.

— Ислахов өҫтөнән ялыуҙы күп алабыҙ. Ул институтҡа ҡабул итеү ҡағыҙҙәләрен үҙенсә үҙгәртте: хәҙер күберәк ауыл балаларын уҡырға ала, төпкөл башҡорт ауылдарынан, мәҫәлән... Был институтҡа сей наҙан башҡорттар килә тигән һүҙ, һеҙ шуға нисек ҡарайһығыҙ, профессор?

— Нисек тип... — Профессор Таһиров уйсанланды. — Ауыл балалары, башҡорттар... Әлбиттә, уларға тәүҙә уҡып китеүе ҡыйыныраҡ инде. Ничево, тырышалар бит. Беҙҙә, секретарь иптәш, Өфө балалары ла зубрить итә. Латин теле, анатомия... Беренсе, икенсе, хатта өсөнсө курс — тотош зубрежка инде. Шунһыҙ мөмкин түгел.

— Беҙҙең йәнә бер кандидатурабыҙ бар ул... — тип дауам итте Алламоратов. — Беҙ профессор Һөйәрғоловты ла күҙ уңында тотабыҙ.

— Һөйәрғолов... — тип һүҙҙы Таһиров. — Һөйәрғоловты — ректорлыҡҡа... Ҡуйығыҙ, кеше көлдөрмәгеҙ, секретарь иптәш.

— Һөйәрғолов — тәжрибәле етәксе, ректораттың эш айышын белә.

— Ҡуйығыҙ, ҡуйығыҙ, уның кем икәнен миңә һөйләмәгеҙ. — Таһиров урынынан ҡалҡты.

— Ултырығыҙ, һүҙ бөтмәне бит әле.

— Әгәр ҙә бында Һөйәрғолов кандидатураһы тикшерелә икән, минең өсөн һөйләшеү тамам.

Профессор Таһиров кире ултырып торманы.

* * *

...Улар — Мөхәмәтов, Бикбулатов, Һөйәрғолов — алдан килешкәйне. Мөхәмәтов менән Бикбулатов тәүҙә институттың партком секретары Герасимовтың ҡылын тартып ҡарай.

Николай Герасимов — теле телгә йоҡмаҫ сыуаш егете. Госпиталь хирургия кафедраһында эшләй, кандидатлыҡ диссертацияһы ла әҙер, тиҙәр. Әҙер икән, партком секретарына уны яҡлауы сүп кенә. Шефы ла кем бит әле — һаулыҡ һаҡлау министры. Эше майлы-көйлө егеттең, үҙе һәләтле. Студент сағынан аралашыусан булды ул. Башта профкомда, аҙаҡ институт комскомитетында эшләне. Врач дипломы алғас та,

туранан-тура аспирантурала ҡалдырҙылар. Әҙер кадр. Ҡешенең эс-бауырына инеп бара: ректорың менән дә көрәшә, профессорҙарың менән һин дә мин.

— Ҡитегеҙ, ағай-эне, шаяртырға булһа, парткомдан башҡа ла урын бөтмәгән.

Һөйәрғоловсылар аптырап ҡалды, «академик» бирешмәне әле.

— Николай Николаевич, Ислахов ҡартайҙы, өҫтөнән ялыуҙар күп... Дуҫиштәренә сиратһыҙ фатир бирә.

— Егеттәр, юҡ, юҡ, буш менән булмағыҙ. Ошонда ҡалһын был һүҙ. Һеҙ әйтмәнегеҙ, мин ишетмәнем.

Парткомдан сыҡҡас, профессор Мөхәмәтов кафедраһына йүнәлде.

Ул — метис, паспортына «башҡорт» тип яҙылған. Балалар хирургияһы кафедраһы мөдире. Ул да Һөйәрғоловҡа бигүк ышанмай, шулай ҙа уны яҡлай. Ярай, әлегә Һөйәрғолов тип йөрөйҙәр. Иртә ҡысҡырған әтәстең башы ауырта. Иртәгә — бәлки...

...Партком секретары иһә башын тотоп ултырҙы. Уны обкомға саҡырталар.

Уға былай ҙа обкомға йыш йөрөргә тура килә. Герасимов Алламоратовтың үҙе менән дә сатнатып һөйләшә. Бүтәндәр шикелле ҡалтырап төшмәй. Әллә үҙен шулай ҡыйыу тотҡанға идеология секретары уның менән ипле мөғәмәләлә... Был юлы ла ихлас әңгәмә ҡороп ултырҙылар.

— Николай Николаевич, парткомда ректор Ислаховты вазифаһынан төшөрөү мәсьәләһен күтәрергә ваҡыт.

— Ни өсөн?

— Обкомға уның өҫтөнән ялыуҙар яуа. Ул ҡартайҙы, ректор йөгөн тарта алмай.

Герасимовтың башы әйләнде. Ҡапылдан тел биҫтәһе һөйләшә алмаҫ булды.

— Мәсьәлә хәл ителгән тиерлек...

— Беләһегеҙме... — Герасимов кәүҙәһен саҡ турайырға мәжбүр итте. — Ҡем ялыу яҙмаҫ. Мейес башында ятҡан кеше өҫтөнән генә яҙмайҙар, ә ул — ректор. Беҙҙең мединститутта уны алмаштырыр кеше юҡ. Ундай кешеләр аяҡ аҫтында аунап ятмай.

— Юғары стилдә һөйләшмәйек, Николай...

— Был — ысынбарлыҡ! Мин ректорҙы ун йыл беләм...

— Бөттөмө, Николай?..

— Юҡ, бөтмәне әле. Мин шул уҡ һүҙҙәрҙе Бикбулатовтар ауыҙынан да ишеткәйнем. Бикбулатов, Мөхәмәтов...

— Ә ялыуҙа уларҙың исеме бар ине, уларҙы обкомға ла саҡыртҡайныҡ, — тип таныны Алламоратов.

— Ә Ислаховтың үҙен саҡырттығыҙмы?

— Юҡ әле, уны ла саҡыртырбыҙ. — Алламоратовтың йәне көйҙө. Хәҙер ул һорау алыусынан яуап биреүсегә әйләнде. — Беҙ парткомды уҙмайбыҙ. Һеҙ мәсьәләне партия йыйылышында ҡарарға ризаһығыҙмы?

— Ә кем тәҡдим итә? — тип белеште партком секретары.

— Мәҫәлән... — Алламоратов саҡ ҡына һөйәрғоловсыларҙы атаманы. — ... обком, обком комиссияһы.

— Риза, — тине Герасимов. — Әммә мин ректорҙы бушатыуға ҡәтғи ҡаршымын. Шуны белегеҙ!

— Белдек, — тине Алламоратов, шулай ҙа эсендәге асыуын Герасимовҡа һиҙҙермәҫкә тырышты.

— Ислаховты алыу — институт өлгәшкәндәрҙе һанламау, уны юҡҡа сығарыу буласаҡ. Беҙҙең мединститут бөтөн Рәсәй Федерацияһында алдынғыларҙан иҫәпләнә. Ислахов килгәс, ике факультет астыҡ, яңы уҡыу корпусы, ике дөйөм ятаҡ төҙөнөк, институтҡа докторлыҡ диссертацияһы яҡлау хоҡуғы бирелде.

— Ҡыҙмағыҙ, ҡыҙмағыҙ. Барыһын да беләбеҙ, һуҡыр түгелбеҙ — күрәбеҙ, һаңғырау түгелбеҙ — ишетәбеҙ. Бөтә мәғлүмәт — өҫтәлдә. Һиңә миҙалдың ялтыр яғы ғына күренә, ә беҙгә ҡараңғы яғы ла билдәле. Так что буш фәлсәфә кәрәкмәй.

Герасимов киткәс, «Был иманһыҙ бәндә менән артабан эшләү мөмкин түгел!» — тип йомғаҡ яһаны идеология секретары.

Теге ваҡыт дуҫының доцент улын партияға алмаған булдылар. Эйе, эйе, уныһы ла шул мединститут парткомының, шул сыуаштың эше! Бөтә мәсьәләләр медицина институты ректорының баш-баштаҡлығына барып тоташа. Ректоры ниндәй, парткомы ла шундай...

* * *

Профессор Ислахов башын күтәрҙе. Күк шундай зәңгәр, шундай бейек. Бары апрелдә генә көндәр шундай аяҙ, яҡты була. Әллә оҙон ҡыштан һуң инде, көн бите асылып киткән, ҡояш нурҙарынан күҙҙәр ҡамаша. Яҡты, киң донъя. Күңелдә лә йыр, яҡтылыҡ... Ошолай башты күтәрмәйенсә, ергә генә текәлеп күпме йәшәмәк кәрәк? Башыңды күтәр, кеше, яҡтылыҡҡа сорнал, күңелең дә, күҙҙәрең дә яҙ менән тулһын, нурға ҡойонһон! Айырыл ерҙән бер аҙға, күктәрҙә йән ял итә, талған йөрәккә дәрт инә. Күҙгә күктең зәңгәрлеге һеңә, еңеләйә талған быуындар. Күктәр кешене хыялландыра...

Профессор Ислахов та бөгөн үҙен тәбиғәт менән оҙон йоҡонан уянған, күҙҙәре асылған итеп тойҙо. Дәртлерәк баҫты. Тәне еңеләйҙе, уйҙары йәһәтерәк йүгерҙе. Бөгөн иң тос йөктәрҙе күтәрер, хәл ителмәгән бар мәсьәләләрҙе хәл итер һымаҡ. Беләгендә — көс, йөрәгендә — ярһыу. Үҙ алдына йәнен ыҙалаған хәстәрҙәрен барлап сыҡты. Бер епкә теҙҙе уларҙы. Хәҙер «ҡырып бөтөрәсәк»...

Иңтәүләп шуға тотонор... Обкомға бараһы йомоштары ишәйгән. Алламоратовтың үҙенә инә! Ул, яһил, һуңғы арала ҡабул итмәй йөҙәтте — эштәре өйөлөп киткән. Бөгөн яйын табыр. Шартлата баҫып инер, сатнатып әйтер һүҙен.

Әммә секретарша ректорҙың юлын киҫеп өлгөрә.

— Алламоратов берәүҙе лә ҡабул итмәҫкә ҡушты.

— Һм-м... Һеҙ минең хаҡта әйттегеҙме?

— Әйттем, әлбиттә, Зыя Ислахович.

— Һм-м... — Ахыр ректор ҡул һелтәне лә киҫә кирегә боролдо. Әйтерһең, һырғый ҡарағай. Ошо бейек түшәмле һарай эсенә һыймай. Гүйә, хәҙер ауып китер ҙә ялтыр көҙгөләрҙе, дәү быяла ишектәрҙе селпәрәмә килтерер, Хоҙайым!

Ректор юғалып ҡалды. Әләйһә, эш көнөн ҡайһылай дәртләнеп башлағайны. Әйтерһең, ҡулына һуғалар.

Ислахов кире обкомға йүнәлде. Вахтерҙы үтте, тура Алламоратов кабинетына атланы. Секретарша ҡыҙ тағын да: «Көтөгөҙ, унда — кеше...» — тиһә лә, ҡарап-һорап торманы, бер ниндәй иҫкәртеүһеҙ-ниһеҙ обком секретары бүлмәһенә бәреп керҙе.

— Һеҙ мине ҡабул итмәйһегеҙ, әллә был ректор ел ҡыуып йөрөй, ваҡыты күп тип уйлайһығыҙмы? — Ислахов, йыш-йыш һулап, усы менән секретарь өҫтәлен төйҙө.

— Мин дә ел ҡыумайым, ректор иптәш... — Ниһайәт, обком секретары ла үҙен ҡулға алырға өлгөрҙө, хаҡ дәрәжәләрен, хоҡуҡтарын хәтерләне.

— Ректор урамда йөрөгән малай-шалаймы һеҙгә? — Ислахов һаман баҫылманы, һулышын тыя алманы.

— Зыя Ислахович...

— Мин — Мәскәү кешеһе, Мәскәү тарафынан институтҡа ҡуйылғанмын; эйе, республикалағы хәлдәрҙе, бәлки, төшөнөп тә бөтмәйемдер. Шуны ла әйтәйем: мединститутта эштең башы бер миңә — ректор Ислаховҡа ғына ҡайтып ҡалмаған, гәрсә бәғзе берәүҙәр мине урынымдан осорорға бик яҫҡынһа ла... Мине Мәскәүҙә эшләп йөрөгән еремдән: «Тыуған нигеҙгә, Башҡортостаныбыҙға ҡайтығыҙ, мединститутты етәкләгеҙ, кадрҙарыбыҙ етешмәй», — тип өгөтләүсе — Башҡортостан өлкә комитетының элекке беренсе секретары... Ул ҡоҙаланы ректор вазифаһына, мин ризалаштым. Әйткәндәй, обком секретары вазифаһына һеҙҙе лә ул тәҡдим иткән. Ул институт алдына мөһим бурыстар ҡуйҙы; беҙ был хәлде төҙәтеү планын төҙөнөк. Бәғзе берәүҙәр ләстит һатҡанса, мединституттағы үҙгәрештәрҙе бер ректор Ислахов башлаған икән, ул ғына үҙлегенән был оло эшкә йөрьәт иткән, тип уйламаһындар!

* * *

...Ошондай тойғоно ҡасан кисергәйне әле ул? Ә-ә, теге ваҡытта, ҡатыны Маһираға операция яһағандан һуң...

Профессор тәҙрәләрҙә ут алғансы кабинетында ултырҙы. Урамға сыҡҡас, һиҙҙермәй генә ямғыр яуа башлауына аптыраны.

Өйөнә ҡайтҡас, ҡатыны Ҡәфиә бешергән ашҡа йоғанманы, бар ризығы — тәмәке. Былай ҙа туҡ. Тотҡан әйбере төшөп бара, буталсыҡ донъяһын бер епкә теҙә алмай. Аҡылдан яҙып ҡуймағайы. Хәлен Ҡәфиә лә аңланы, ирен өнһөҙ генә ҡосаҡланы, тулы тәненә ҡыҫып, артистарса иркәләгән булды. Шуныһына ла рәхмәт.

Профессорҙың теләге — башлаған картинаһын ослап ҡуйыу. Ошо моратына ирешһә, йәне тыныр, оло мәшәҡәтенән ҡотолор ине. Әҙ генә бушыраҡ ваҡыты булһа, шуға тотона.

Профессор усы менән картинаһын һыпырып ҡуя. Ижад — ял, йән тыныслығы. Кеше өсөн иң мөһиме — тормошта йән тыныслығы табыу, күңелдең именлеге. Әгәр һин эстән үҙ-үҙеңде иректе, тыныс тотһаң, бер ни ҙә ҡурҡыныс түгел, тышҡы мөхит һинең үҙлегеңде, булмышыңды емерә алмай.

Тирә-йүндә уттар һүнде, машиналар һирәгәйҙе. Ямғыр тынмай. Инде тамсылар энә күҙеләй ваҡ ҡына. Әллә ниндәй шыҡһыҙ, кешегә бер өмөт тә ҡалдырмаған көн. Йәнәһе, был тормош ялҡытҡыс бер ыҙа ғына. Ниңә яҙаланаһың, кеше, барыһына төкөрөп кенә ҡуймайһың. Оҙаҡҡа һуҙылған ямғыр яҡшыға түгел шул.

* * *

Маһира теге саҡта, сабыйын юғалтҡас, әллә ниндәй үҙгәрештәр кисерҙе. Тыштан тыныс, ә эстән... Гүйә, ул әллә ниндәй таяныс бағанаһынан яҙҙы. Бер ҡулбашы һәлпәшеп төшкән. Ул өмөтөнән айырылды. Ишбулдыһы — тормош маҡсаты ине, хәҙер ул юҡ.

— Ҡилен, улай танауыңды төшөрмә, башыңды күтәр, — тип өйрәтә ҡәйнәһе. Ҡаты әйтә: — Ирең бар, мына һуғыштан ҡайтһа, донъяғыҙ тағы тигеҙләнер.

— Юҡ, мин... — Мaһирa aңҡы-тиңке бaҫa. Йәне был тормоштaн бер йәм тaпмaй.

Яҙын ҡәйнәһе менән сaбыйының ҡәберен тaбa aлмaй ҡaйтҡaс, тaмaм биреште. Сaбыйы күҙ aлдынa килә лә бaҫa.

— Ҡaйҙa иттегеҙ мине, инәй, ниңә йылы түшәгемде юғaлттығыҙ, хәҙер ҡaҡтa ятaм, — тип ялбaрғaн булa тегеһе. Бaшын ҡырын һaлa лa торa. Мaһирa ҡурҡa, ни тиергә белмәй.

— Инәй, нишләп урынымды ныҡлaп билдәләмәнегеҙ? — Эй, ныҡышa мaлaй. — Хәҙер мин ер менән күк aрaһындa, тәғәйен урыным юҡ. Һеҙ мине тaшлaп киттегеҙ ҙә оноттоғоҙ. Миндә эшегеҙ ҙә юҡ. — Битәрләй мaлaй әсәһен, йәнен aлa.

— Улым... — Бaрыһын дa aңлaтырғa уҡтaлa. Тыны киҫелә, тaмaғы быуылa.

— Миңә byндa һыуыҡ. — Йоҡa тәне ел үрендә дерелдәй, сaбый бөрөшә. — Әгәр үҙ ҡәберем булһa, һеҙҙе борсомaҫ тa инем... Мин — ояһыҙ. Byндa һәр кемдең үҙ ояһы бaр, берәү ҙә үҙ янынa индермәй. Һеҙ ҡaйтып киткәс, ысын мәхшәр ҡупты. Мин дә дaулaштым, оя өсөн эй тaлaштылaр бисaрaлaр. Аҡылымa килһәм, бер мин генә өйһөҙ икәнмен. Мине ҡыуып сығaрғaндaр — шуғa хәҙер кешенән кешегә йөрөйөм.

— Бaлaм...

— Инәй! — Сaбый усын һонa.

Улaр бер-береһенә һыйынышa.

Бисaрa әсә тынып ойоп китә. Иртән тaғы эшкә, ҡaрсыҡ һуҡрaнa.

Мaһирa эшкә бaрa, эштән ҡaйтa. Өйө буш, өйөнән дә биҙҙе.

Бөтөн өмөтө Зыяһындa ине. Зыя, бәхетенә, имен-aмaн ҡaйтты һуғыштaн. Күптәр сит-ят ерҙә бaшын һaлды, ә уның ҡaрaғaйы теп-тере. Бaры сырaйы олоғaя төшкән. Ул көслө, бирешмәҫ, ут-һыуҙы кискән бaтыр.

* * *

Институт зaлы шығрым тулы. Сәйер тaнтaнaлыҡ, көсөргәнешлек тә һиҙелә. Кешеләрҙең йөҙө ялҡынлaнғaн. Президиумдa — комиссия ағзaлaры, институт ректоры. Пaртком секретaры Герaсимов менән Аллaморaтовтың урыны йәнәш турa килде.

Комиссия рәйесе һүҙен: «Хaт ни өсөн яҙылғaн? — тигән һорaу ҡуйыуҙaн бaшлaны. — Утһыҙ төтөн сыҡмaй...»

Тaғы шул һүҙ. Ректор тертләне, тыштaн һиҙҙермәһә лә, эстән бөтә нервыһы ҡуҙғaлды. Хәҙер ул һәр һүҙҙе, һәр өндө йотa.

— Коллектив ректор эшенән ҡәнәғәт түгел. Ислaхов иптәш институттa тейешле ижaди мөхит тыуҙырa aлмaғaн...

Шул, шул иң төп дәғүә ректорғa!

— Беҙ хaтты ентекләп тикшерҙек, хaт aвторҙaры менән aйырым-aйырым һөйләштек...

Ректор торор ҙa сығыр ҙa китер. Күҙҙәре — зaлдa, уйҙaры — әллә ҡaйҙa. Турa ҡaрaй, ҡымшaнмaҫҡa тырышa. Ни тиһәң дә, был йыйылыш — хәтәр aлыш. Әйҙә, aҙaғын көтәйек!

Ректор дәғүәселәрен күҙәтә. Аллaморaтов тa тыштaн тыныс, ҡaрaшын билдәһеҙлеккә төбәгән.

Бөтәһе лә икеһе aрaһындaғы мөнәсәбәттән бaшлaнды бит! Ректор aңлaй, йыйылыштaғылaрҙың byндa бер ниндәй ҙә ҡыҫылышы юҡ. Аллaморaтов вaҡиғaлaрҙы үҙе ҡуйыртып ебәрҙе. Ә хaт aҙaҡ яҙылды. Ректор белә:

һөйәрғоловсыларҙың хаты ла Алламоратов менән бәхәстең һөҙөмтәһе генә. Ислахов үҙе ғәйепле: үҙе һаҡһыҙ ҡыланды. Ә коммунистар, имеш, шул хатты тикшерәбеҙ тип ултыра...

Ректор ошоларҙы уйлай ҙа көрһөнә, муйынын борғослап ҡуя, Алламоратов яғына күҙ һирпә. Алламоратов тыныс. Ул ныҡ кеше. Әле вазифаһы ҡушыуы буйынса ғына сығыш яһаусыларҙы тыңлай. Улар ни һөйләһә лә, уға барыбер, көстәр нисбәте ҡайһы яҡҡа ауышһа ла, риза.

Институтта коммунистар һаны ла өс йөҙгә барып баҫа икән. Партком секретары үҙ янына ректорҙан башҡа обком вәкилдәрен, комиссия ағзаларын ултыртты. Башта комиссия ағзалары һөйләне. Һүҙ айышы башлыса ректорҙың эшмәкәрлеге тирәһендә уралды.

Обкомдың фән һәм юғары уҡыу йорттары бүлеге мөдире медик студент тарафынан 4-се ятаҡ алдында ҡылынған енәйәт хаҡында һөйләй.

— Хөрмәтле иптәштәр, ни тиһәгеҙ ҙә, был институт тарихында хурлыҡлы ваҡиға. Ул ректораттың, парткомдың, бөтәбеҙҙең йөҙөнә ҡара тап булып яғылды. Был мединституттағы тәрбиә эшенең бик түбән кимәлдә тороуы хаҡында иҫкәртә. Студенттар уҡыу менән мәшғүл булаһы ерҙә һуғыша, һуғышып ҡына ҡалмай, сәнсешә. Был нимә? Бер-береңде шул саҡлы күрә алмаумы? Әлбиттә, ҡаза күреүсе Тихоновскийҙы береһе лә маҡтамай: бишенсе курс студенты насар уҡыған, иптәштәре араһында үҙен һауалы тотҡан, Шаһиәхмәтовты «деревня» тип кәмһеткән... Шулай ҙа бер кемгә лә шуның өсөн кешенең йәнен ҡыйырға тигән хоҡуҡ бирелмәгән. Хоҙай Тәғәлә биргән ғүмерҙе тик ул ғына кире ала ала, быныһы медик иптәштәргә яҡшы таныштыр. Шаһиәхмәтов енәйәт ҡылды, әлбиттә, ул язаһын алыр. Ләкин эш быныӊ менән генә бөтмәй. Был институтта, студенттар араһында етди ҡаршылыҡтар барлығы тураһында белдерә, ректорат та, партком да был хәлгә әҙер булмай сыҡты, ғөмүмән, институтта тәрбиә эше аҡһай, бер-береңә түҙемле мөнәсәбәт, иптәшеңде үҙ итеү, уның кешелек бәҫен һаҡлау юҡ, ректорат та, партком да студенттарҙы тәрбиәләү менән шөғөлләнмәй. Билдәле, бөтә был эштәрҙең башында хөрмәтле ректор үҙе торорға тейеш! Өлкә комитеты профессор Ислаховтың ректор вазифаһындағы эшмәкәрлеген ҡәнәғәтләнерлек түгел тип таба.

Хәл ислаховсылар өсөн, ысынлап та, ҡурҡыныс төҫ алды: обком комиссияһы, өлкә комитетҡа хат яҙыусыларҙың талабына ҡушылып, мәсьәләне ҡәтғи хәл итеүҙе көҫәй. Тын алыштары ауырайып, һауа етмәгәндәй тойолоп китте. Бөтәһе лә һәләкәт, ҡаза буласағы хаҡында иҫкәртә.

Шулай ҙа, фекер алышыуҙар башланғас, хәл үҙгәрҙе, һулыштары иркенәйеп китте: бар сығыш яһаусылар ҙа тиерлек штаттағы ректорҙың эшмәкәрлеген ыңғай баһаланы. Егерме бишләп кеше сығыш яһаны, шуның егерме бере ректорҙы яҡланы, ялыу яҙыусыларҙы нахаҡ бәлә яғыуҙа ғәйепләне. Бигерәк тә партия тарихы һәм философия кафедраһы мөдире Вәлиев туҙҙы.

— Эш етмәй һеҙгә, профессор иптәштәр, ҡабаҡ бәреп сәүкә осороп ятаһығыҙ. Күҙгә ҡом һибеп, аңды томаларға итәһегеҙ. Был — нимә? — Ул президиумдағы хатҡа төрттө. — Опус. Шуның өсөн олоғара йыйылыш йыйыла, кешеләр эшенән айырыла. Күпме нервы түгелә, ҡан боҙола. Минең тәҡдим: партия ағзалары Һөйәрғолов, Мөхәмәтов, Бикбулатов — бөтәһе биш кешегә ректорға нахаҡ яҡҡан өсөн шелтә иғлан итергә!

Алып барыусы Герасимов сығыш яһаусыларҙы тыйманы. Йәш фән кандидаты Ҡыяметдинов та һүҙ алды.

— Мин хатта яҙылғандар менән килешәм, — тине ул сәсәп. — Ислахов иптәш эшкә һалҡынырaҡ ҡарай башланы һымаҡ. Оло кеше, арый ҙа торғандыр инде. Институт ҙур, бәлки, ул бөтә ергә лә өлгөрмәйҙер...

Залда шаулаштылар, Ҡыяметдинов ашыҡты, трибунанан төшә һалды.

Әлегәсә тыныс ҡына барған йыйылыш ҡыҙҙы. Инде аҫау арғымаҡты тотоп та тыйыу мөмкин түгел: урындан әллә нисә ҡул күтәрелде. Һүҙ һорайҙар. Ҡыяметдинов, гүйә, ҡыҙған табаға май бөрктө.

Сираттағы оратор төкөрөк сәсте:

— Был йыйылыш алдан уйланған сара. Тәүҙә обкомға хат яҙыла, аҙаҡ уны Һөйәрғоловтар күтәреп ала. Хат артында нимә ята тип уйлайһығыҙ? Нисек тә ректор Ислаховты урынынан алып ташлау! Әле Ҡыяметдинов һөйләне. Һәләтле кеше. Әүәл тауыш күтәреп йөрөмәгән әҙәм. Уны ла һөйәрғоловсылар ҡоторҡкан! Беҙгә кисә шул мәғлүм булды: Һөйәрғолов башҡорт интернатындағы дуҫы Баҡаевҡа барған, уныһы Ҡыяметдинов менән һөйләшкән.

— Ялған!

— Был бер ҙә ялған түгел, был хаҡта беҙгә интернат тәрбиәсеһе Ғафуан Алсынбаев еткерҙе.

Йыйылыш дилбегәһен ҡулына алырға теләп, Герасимов ҡалҡынды.

— Барлығы егерме ете кеше сығыш яһаны, — тип белдерҙе ул. — Шуларҙың егерме бере ректор Ислаховты яҡланы. Әгәр бүтән теләүселәр булмаһа, мин өс-дүрт минут һорар инем.

Шунда арттан пинжәк осонан тарттылар. Ҡем? Бәй, Алламоратов! Тик Герасимов ҡыҙған...

— Ағай-эне, нимәгә ике-өс сәғәт тир ағыҙабыҙ? Ниңә беҙҙе төп башына ултырталар? Бөтәһе лә ап-асыҡ: бер төркөм уҡытыусыларға эш етмәй. Проблема юҡ, үҙегеҙ күреп тораһығыҙ, коллектив ректор Ислахов яғында! Коллектив татыу, эш бара, был карьерист төркөмдөң һарыуын ҡайната. Улар мединститутта тыныс булмауын, ректорҙың эше уңмауын теләй, тәгәрмәскә таяҡ тыға. Был төркөм хөсөт менән шөғөлләнә, ғәйбәт ташый, тырнаҡ аҫтынан кер эҙләй.

Был — арала иң сағыу сығыш булды. Ысын ғәйепләү акты! Дүрт-биш кеше генә ректорға ҡаршы һөйләне, ә Ҡыяметдиновты хатта «хыянатсы» тип атанылар.

Даръя айҡала. Әйтерһең, ултырғыстар, люстралар хәрәкәткә килә, бөтә зал урынынан ҡуба. Ректор ҙа, обком секретары ла, комиссия ағзалары ла — президиумда. Уларҙың карабы ғына сайҡалмай даръяла.

Йыйылыштан һуң проректор Һөйәрғолов обком секретарын оҙатырға йыйынғайны, уныһы тыйҙы:

— Беҙ әле быны бюроға ҡуябыҙ...

Проректор ситкә тайпылды. Ҡеше-ҡара күҙенә салынмаҫҡа тырышып, үҙ юлы менән китте.

## Дүртенсе бүлек

Мазһар Ҡотлояров хәҙер үҙенең ғилми эҙләнеүҙәрендә яңы осорға, XX быуатҡа килеп сыҡты. Яңы дәүерҙә, яңы ерлектә зыялыларҙың яҙмышы еңеләймәнеме, уларға йәмғиәт, халыҡ тарафынан замансараҡ, яңыса әйтмешләй, цивилизациялыраҡ мөнәсәбәт урынлашманымы? Ҡешеләр прогресс үҫешкән һайын аңлыраҡ була бара бит, шуға бер-береһенә ҡарата ла игелеклерәк

мөғәмәле булырға тейеш. Әллә яңы заманда, техника үҫешкән, етештереү алға киткән дәүерҙә кешеләр тағы ла аяуһыҙлана, тағы ла йыртҡыслана ғынамы?

XX быуат башында Рәсәй сисеп бөтмәҫ ҡаршылыҡтар даръяһына батты. Европала оло һуғыш ҡупты, уға башҡа ҡитға илдәре ҡушылды. Рәсәй һәр ерҙә беренсе, алыш майҙанына ул иң башлап бил быуа. Империалистар ерҙәр, колониялар бүлешә алманы, һәр кем үҙенең шәплеген раҫларға маташа. Рәсәйҙәге халыҡ та үҙ көнитмешенән риза түгел. Һәр кем үҙенә арыуыраҡ яҙмыш, һуңғы сиктә йәшәргә ниндәйҙер мөмкинлек юллай, шул арҡала, колониялар өсөн империалистик һуғыш тынғас, илдә граждандар һуғышы тоҡанды. Рәсәй үҙе оло империя, ҡатлам-ҡатлам идеологиялар, халыҡтар, диндәр төйөнө бит: һәр кем юрғанды үҙ яғына тартҡыслай. Был мәлдә интеллигенция нишләһен? Ул да шул уҡ халыҡтың бер өлөшө, уның ихтыярҙарын сағылдырыусы. Башҡорттар үҙҙәренең Ватанында йәшәй, бынан бер ҡайҙа ла китергә йыйынмай, шуға оло, ҡатлам-ҡатлам илдең бәләләре уның да башына төшә, уның да башын ауырттыра.

Рәсәй иле буйлап «ҡыҙыл тәгәрмәс» тәгәрләп китте, халыҡ ҡыҙылдарға, аҡтарға бүленде; ошо тартҡылаш, низағ эсендә башҡорттар нишләһен? Яулы, даулы заманда төҙөлгән башҡорт хөкүмәте, Вәлидиҙәр «беҙ аҡ та, ҡыҙыл да түгел, ә башҡорттар ғына» тине лә ул, әммә «ҡыҙыл тәгәрмәс» барыһының башын тапап, тирә-әйләнәгә ғәрәсәт сәсте, башҡорт илен имгәтеп, теткеләп бөттө. Башҡорттар шул мәлдә ҡайһы яҡҡа ла ауышырға белмәне. Ырымбурҙа тәүҙә большевиктар яғына һыйындылар. Улар милли хөкүмәтте мәсхәрә иткәс, бүтән ҡәүемдәргә ил эсендә ил төҙөргә, шашып китергә юл ҡуйылмаҫ, тип лаф орғас, аҡтарға һуғылдылар. Башҡорт ғәскәре 1918 йылдың июненән алып 1919 йылдың 15 февраленәсә аҡтар яғында һуғышты. Шулай әле аҡтар, әле ҡыҙылдар яғында ҡайнашҡас, нишләһендәр; үҙҙәре лә ҡаңғырып бөттө, урыҫтар ҙа ҡаңғырҙы, татар ҡәрҙәштәр ике арала буталды.

Интеллигенция ҡайҙа, халыҡ шунда, Вәлидиҙәрҙең, Манатовтарҙың үҙ маҡсаты бар ине. Башҡорт хөкүмәте иң тәүҙә башҡорт халҡы ихтыяждарын ҡайғыртты, был тарих мәхшәрендә нисек тә үҙенең өлөшөн алып ҡалырға тырышты. Икенсе яҡлап, бөтә өлгәшелгәндәрҙән яҙырға, халыҡты ҡанға батырырға, уны һәләкәткә дусар итергә мөмкин ине. Башҡорттар ҡан ҡойҙо, үҙ иректәре, азатлыҡтары өсөн йәндәрен аяманы. Был аяуһыҙ көрәштә, ата — улды, инә — ҡыҙҙы айырмаҫ мәхшәрҙә уларҙың берҙән-бер теләге илдәренең азатлығы, ер-һыуҙарының тейелгеһеҙлеге, башҡа Рәсәй халыҡтары менән тиңлек, тулы хоҡуҡлыҡ ине. Ҡаҙаҡ ҡәрҙәштәр менән сиктәш булып, үҙаллы дәүләт төҙөү хыялы ла булды. Ләкин ваҡиғалар үтә ҡатмарлашты, Урта Азияла ла — мәхшәр. Халыҡтың теләк, ынтылышын урыҫ генералдары, башҡортҡа кәмһетеп ҡараған бай балалары, әлбиттә, ҡабул итмәне. Ошо ҡатмарлы мәлдә башҡорт ҡайҙа барырға тейеш? Ҡем яғына баҫырға? Ҡыҙыл Армия — еңеүсе, Рәсәйҙә яңы тәртиптәр урынлаштырыусы. Үҙ азатлығы өсөн баш күтәргән башҡорттар, әлбиттә, көслө яғына ауыша, үҙе өсөн бәләкәй ҡазаны — яңынан ҡыҙылдар яғын һайлай. Ҡыҙылдар тау-тау вәғәҙәләр бирә: яңы тарихта, йәнәһе, тәү ҡат башҡорттоң үҙаллығын, Рәсәй эсендә үҙ автономиялы дәүләтен таный. Йәшәһен автономиялы Башҡортостан Республикаһы!

Шағирҙар дан йырлай, башҡорт ғәскәре, рухланып, Петроградҡа — аҡ Юденичҡа ҡаршы ташлана. Ил ирҙәре Кубанда ла, Польша фронтында ла баш һала...

Йырсылар бар, шағирҙар шиғыр әйтә, Вәлиди, Нуриәғзәмдәр, Манатов, Хоҙайбирҙиндар телмәр тота, бөтәһе лә бер теләк менән яна. Һәр ҡайһыһының үҙ

юлы, үҙ маҡсаты... Ялҡынлы Бабич — ил намыҫы... Ул күтәрелеп сыҡты, ғәскәр сардары Әмир Ҡарамышевҡа мәрҫиә әйтте, арҡаҙашы Зәки Вәлидиҙең халҡының тоғро улы булыуын раҫланы, башҡорт ғәскәрҙәре маршын ижад итте. Халҡы ҡайҙа — ул да шунда, халҡы атҡа атланған даулы заманда ул да ат өҫтөндә... Шағир Иркәбәй дуҫы менән башҡорт хөкүмәте матбуғатын ҡыҙыл ғәскәрҙәр яғына илткәндә һәләк була... Урыҫтар уны ат ҡойроғона таға. Ит игелек — көт яуызлыҡ. Башҡортҡа ышанмау — ҡыҙылдарҙың да ҡанында, уларҙы дошман күреү, был халыҡты ят, кәм итеп ҡарау...

Тағы ла бер ҡорбан, башҡорт халҡының һөйөклө улы, моңло йырсыһы һәләк...

* * *

Хәтәр әкәмәттәр килеп сыҡты мединституттағы дөйөм партия йыйылышы менән. Йыйылышта уның исеме лә аталған икән. «Һөйәрғолов, һеҙ йыйылышҡа саҡлы кешеләрҙе өгөтләп, үҙегеҙҙең яғығыҙға ауҙарып-йыйып йөрөгәнһегеҙ. Баҡаев тигән дуҫығыҙ, доцент Ҡыяметдиновҡа барып, һин Һөйәрғоловты яҡлап сығыш яһа, тип әйткән. Был хаҡта беҙгә Ғафуан Алсынбаев хәбәр итте...» Ни тиәһең инде? Был тура һүҙлелекме, әллә үҙ-үҙеңде аҡлаумы? Баҡайҙар алдында был — Ғафуан Алсынбаевтың хыянаты. Ә, Ғафуан күҙлегенән ҡарағанда, ислаховсыларҙың ҡурайсыны һатыуымы?

Ғафуан интернатта балаларҙы ҡурай уйнарға өйрәтте. Тәрбиәсе булды, шунан, ҡулының оҫталығын күреп, хеҙмәт дәрестәре бирҙеләр. Әммә яңы уҡыу йылында хеҙмәт дәрестәре ике тапҡырға ҡыҫҡартылды. Тешен ҡыҫты ҡурайсы. Баҡайҙар алдында үҙен ғәйепле лә һымаҡ тоя. Шуға ҡул һелтәне. Йәне көйә ине, ләкин нишләһен. Баҡайҙар ауҙарын үрә. Юлсуринды ла тотошлай сорнап алдылар.

Ғафуандың башы һәленгән. Ҡайҙа бара? Бына — уларҙың Баҡай, Хәсәнов, профессор менән кәйеф-сафа ҡороп ултырған урыны. Ағас араһы, ҡарағай ылыҫы еҫе аңҡый. Ҡурайсы, гүйә, бөгөн үткән тормошона сәфәр ҡыла.

Бына Нефтселәр мәҙәниәт һарайы. Ошонда нисә тапҡыр смотр үтте. Ғафуандың ҡурайсылары сәхнәне тултыра, залға ғәйрәтле «Иҫке Урал» көйө ауаздары тарала. Ул көмбәҙҙәргәсә менә, барса ғаләмде яулай.

Алтынсы ялыу. Ғафуан уның Баҡайҙар тарафынан ойошторолғанын тойомлай... Мединститутта партия йыйылышында егеттәр уның исемен атаған.

Ғафуан ялыуҙарына төкөрмәй ҙә. Улар яуып уҙған боҙлауыҡ һымаҡ, әммә Хисмәт ағаһының туҙыныуы йәнен өтә. Ә уны ҡотортоп ҡуйғандармы? Тешен ҡыҫа. Нисек түҙҙе, нисек асҡыстарын яҡташ ағай битенә бәрмәне?

Өйөнә лә һуң ғына ҡайтты. Тағы бисәһе менән талашты. Аҙаҡ шул интернатҡа бөтөнләй аяҡ баҫмаҫ булды. Үҙ ҡулы менән алып барып һалды Юлсуринға ғаризаны. Юлсурин ағаһы ҡыуанғандыр, ә бисәһе Йәмилә өйҙә ятыуын оҡшатманы. «Өйҙән ҡыуып сығарам һине, эрәмтамаҡ», — тине. Ғафуан иғтибар итмәне. Түҙә, бисәһенең әсегән ҡатыҡтай һүҙҙәрен йота. Балалар хаҡына тип, бер ишектән инделәр, бер ишектән сыҡтылар, әммә артабан юлдары гел аймылыш булды. Йөрәктәге ялҡын күптән һүнгән. Ҡистәрен ҡабат бер усаҡҡа йыйылдылар, бергә сәй эстеләр, тик һүҙҙәр ялғанманы, һүҙҙәр бер ҡолаҡтан инде, икенсеһенән сыҡты. Ирҙең йөрәге иремәне, бисә гел арты менән торҙо.

Ирҙәр ғәҙәттә алдан, ә бисәләр арттан тороп эш итә шул. Улар, әлбиттә, ҡаршы сыҡмай, юл баҫмай. Арттан, ҡорбаны аңғармаҫ мәлдә улар оҫта. Зәһәр

ут, ҡарғыш телдәрендә. Оҙаҡ көтәләр, үс үртен оҙаҡ һаҡлайҙар. Мәкер уғын улар көтмәгәндә ҡаҙай.

Ғафуан Алсынбаев менән дә шулай булды. Тыуған көнө яҡынлаша ине. Йәмиләнең бер туған апаһы килгән. Иҫке Өфөлә бер дауаханала эшләй. Ипле, нәзәкәтле ханым. Юғары белемле, нескә зауыҡлы. Шул кейәүкәйен ҡотларға тип килгән. Ғафуан уның Баҡайҙарға ире яғынанмы алыҫ туғанлығы бар икәнен белә ине, әммә был юлы быға әллә ни әһәмиәт бирмәне, хәйер, кәйефе лә юҡ; ҡәйенбикәһе үҙе ҡосаҡ-ҡосаҡ һыйын, тәм-томон йөкмәгән. Бөгөн теле телгә йоҡмай. Йор, ихлас. Әүәле бер ҙә улай ҡыланмаҫ бәндә, бөгөн нишләгән?..

Аптыраны, йөҙәне Ғафуан. Алға ҡуйғас, кире ҡаҡманы һүҙен, ҡотлауын кире йыҡманы: ашаны, эсте. Шулай нығ һыйланғас, иҫереп киткән, ахырыһы, түңкәрелгән. Зиһене асыла биргәндә ул салҡатан ята, ҡәйенбикәһе градусник һона... Тағы онотолған. Күҙен асһа, «ашығыс ярҙам» саҡыралар.

Машинаға көс-хәл индерҙеләр. Ҡырағай урман балаһы уйынсыҡтай уймаҡ машинаға һыя тиһеңме — уны тубылғылай урап-сурап тыҡмаһаң. Алғы кабинаға ҡәйенбикәһе үҙе ултырып алды, буғай. Киттеләр. Ғафуан ауыр хәлдә, йөрәге ҡыҫа, алып барып өлгөрөргә кәрәк.

Йылғыр йылтыр машина. Сестралар өнһөҙ. Дауахана янында туҡтағас, ҡапыл ир затына әүерелде лә ҡуйҙыларсы. Күҙгә күренәме? Ҡаты-ғото тоталар, аяҡты, ҡулды шығырлатып боралар. Фатирындағы ише иркәләп, сүпәкәйләп тормайҙар. Ир улар иркенә буйһона. Әйткәнде ҡарышмай үтәй. Ҡарышһа, яңаҡ төбөңә алаһың. Таяҡ менән дә бирәләр.

Айныҡҡыҫҡа ҡаптымы әллә? Аҙаҡ шикләнә башланы: айныҡҡысҡа оҡшамаған. «Иҫерек» тигәндәре лә иҫерек түгел, алйот, имеш. Ниһайәт, аңғарып ҡалды: уны иҫәрҙәр йортона япҡандар. Нисек бында килеп эләккән, әллә ҡәйенбикәһе берәй яман дарыу эсергәнме? Бәй, ысынлап та!..

...Әллә нисә ҡат бүлек мөдире менән һөйләште. Урыҫ кешеһе уны аңлаған кеүек. Тәүҙә һаулыҡ һаҡлау министрлығына, унан обкомға үтенес яҙҙы. Хаттарына яуап көтөп тик ултыра.

Психоневрологик диспансер тип атала был дауахана. Аптырағандың көнөндә тилеләрҙе шунда ябалар. Уларға ярай инде, бүтән барыр ерҙәре юҡ, ә Ғафуан кеүектәр унда нишләргә тейеш?!

Бүлек мөдире уны диҡҡәт менән тыңлай.

— Ярай, мин ҡатынығыҙҙы саҡыртып һөйләшермен.

Ғафуан тыныслanmай. Йәмиләгә әйттең ни, бынау стенаға төрттөң ни. Йәмилә үҙе килтереп тыҡты бында.

Ғафуан диспансерҙың баш врачы менән дә осрашырға ишеккә барғайны, әзмәүер юлын бүлде.

— Ярамай!

— Миңә баш врачты күрергә ине.

— Ярамай!

Кире түшәгенә ауҙы. Иртәнге аш мәлендә шыпырт ҡына коридорға сыҡты. Санитарҙы күҙ яҙлыҡтырғанына һөйөнөп, икенсе ҡатҡа күтәрелде.

Бесәй һымаҡ баҫты, алан-йолан ҡаранды. Ишеген төрткәйне, асылды. Эскә үтте. Кире сығайым, тиһә, ишек үҙе үк асылып китә лә дежур санитар пәйҙә була. Ғафуандың баш осонда — ҡаҡ таяҡ. Саҡ янтайып ҡала. Күҙ асып йомған арала дежур йығып һала, Ғафуан тулап ята. Дежур бау таба алмай, ахырыһы.

Ҡисен санитарҙар ҡүмәкләп һыу эскеһеҙ итеп туҡманы. Өс көн түшәгенән ҡалҡынманы. Тағы «дуҫ»ына, бүлек мөдиренә ошаҡлашты.

— Сығарығыҙ мине бынан, Яков Силантич, мин алйот түгел бит. Күреп тораһығыҙ.

— Минең хәлдән килә торған эш түгел был, дуҫҡай. Ҡатынығыҙҙы саҡыртам. Килер, һөйләшербеҙ. Әгәр ҙә ул, үҙ яуаплығына алам, тип, имза ҡуйһа, рәхим итегеҙ!

Ғафуан башын һәлендергән. Күңеле тулышһа ла, ни ҡылырға белмәй. Йырларға ла ҡушмайҙар, ә алйоттар йырлап та йөрөй. Ул — һау, күберәген уҡый, яҙыша. Китап күп, йәнең ни теләй, шул бар. Уҡы, әҙәм, мең йәшә, мең уҡы! Кеше булырһың, тик иҫәр көйө үлерһең.

Ғафуан байтаҡ китап уҡыны. Нисек тә көндө үткәрергә кәрәк. Хат артынан хат яҙҙы. Бындағы түрәләр аңламаҫ. Аңлаһа ла, юрый иғтибар итмәҫ — Мәскәүгә яҙҙы. Ҡурайсы егеттәренә яҙҙы. Улар һатмаҫ, улар тоғро... Ғибат институтта уҡыта. Уға, «Баштрансгаз» башлығын тап, тине.

Ныҡыша торғас, Яков Силантич ҡатыны Йәмиләнең диспансерға киләһе көнөн әйтте. Ғафуан әллә ни өмөт тә бағламай, әммә шул көндө көтә. Ниндәйҙер сәйер тойғо: өмөт тә, шатлыҡ та түгел, байрамға ла, тантанаға ла тартмаған ул көн, тик көтә. Йәмилә эшһеҙ ирен диспансерҙан ҡотҡармаясаҡ, хатта тешетырнағы менән ҡаршы торасаҡ. Шулай ҙа көтә был көндө, яҙмышын хәл итеренә бер ышанысы булмаһа ла, көтә. Әллә ниндәй тойғо, ҡыҙыҡһыныуға оҡшаған хис биләй йәнен.

Ғафуан ул көндө башын тәҙрәнән алманы. Иртәнге аштан һуң түҙемһеҙләнеп көтә башланы. Нисек тә күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа ине уға. Бисәһе диспансерға килер микән? Килгәс, бүлек мөдиренә ни әйтер икән?

Ул, тар ситлеккә бикләнгән йыртҡыстай, тәҙрә төбөндә тапанды. Мөйөштән мөйөшкә йөрөнө. Ваҡыт һуҙылды ла һуҙылды, Йәмиләһе юҡ та юҡ. Төш яҡынлаша. Килмәй ҡуйһа?.. Яков Силантич оло башын кесе итеп уны көнө буйы көтөп ултыра.

Йәмилә көтмәгәндә пәйҙә булды. Тәүҙә туҡтап ҡалды. Ян-яғына алан-йолан ҡаранып алды. Ғафуан уны төлкөгә оҡшатты. Төлкө һаҡ баҫып яҡынлаша кетәккә. Муйынын борғолап, моронон һоноп еҫкәнеп ала. Таш тупһалар араһынан барғандай, аяғын юғары күтәреп баҫа. Бысратмаҫ өсөн итәген юғарыраҡ күтәрә. «Ҡылансыҡ», — тип уртын сәйнәне тәҙрә төбөндәге тотҡон. Үҙен нәзәкәтле, нескә зауыҡлы ханым тип күрһәтергә маташа. Йәнәһе, бында бысраҡҡа йоғона. Йәмилә сирҡанып ҡына ишек тотҡаһына тотона, «серт» итеп ситкә төкөрә.

Ғафуан, уны күҙҙән юғалтҡас, бүлек мөдире бүлмәһенә ташланды. Әммә ишек эстән бикле. Йөрәген усына алып, һулышын тыйып торҙо.

Йоҙаҡ тишегенән эскә баҡты. Йәмилә итәген йыйып ипләп кенә ултырҙы Яков Силантич тәҡдим иткән урындыҡҡа. Ҡулдарын ҡауыштырҙы, ипле генә итеп эйәген күтәрҙе. Йәнәһе, ул кешене тыңлай белә, тәрбиәле, зыялы ҡатын.

Яков Силантич һөйләй, ул тыңлай. Ирҙең йәне көйҙө. Өҫтөндә ялтыр плащ, оҙон ҡыҙыл күлдәк, аяҡтарында — йоҡа капрон ойоҡ. Ирененә помада яғылған, ҡаш-керпектәренә һөрмә тартылған. «Тәтәй бисә», — тип тешен ҡыҫты ир.

Яков Силантич Ғафуанды өйгә алып ҡайтыу хаҡында туҡый, Йәмилә, дәрәжә һаҡлап, өндәшмәй. Ахыр сиктә мөдир тына.

— Ятһын әле, ятһын, —ти ханым, күҙен дә йоммай.

Ахыр Яков Силантич та шартлай: әрләшергә, иҫбат итергә, ғәйепләргә тотона. Йәмилә — таш һын. Ҡарт мөдир тынғас, яй ғына ҡалҡына.

— Мин һеҙгә, имзағыҙҙы ҡуйығыҙ, тим...
— Ҡуймайым!
— Ирегеҙҙе алып ҡайтығыҙ, ул һап-һау!
— Беләм... — Йөҙө тыныс, хәрәкәттәре ышаныслы. Ваҡ-ваҡ ҡына баҫып ишеккә уҡтала.

Ғафуан ҡабат тәҙрәгә ташлана. Бисәһе күҙҙән юғалғансы артынан ҡарап ҡала. Аҙаҡ Яков Силантич: «Таш бәғер бисә, һине күрергә лә теләмәне», — тиәсәк.

Хәйер, үҙе лә бисәһе менән күрешергә атлыҡманы. Шул бәндәне көсләп ҡаршыһына баҫтырһалар ҙа, йөҙөнә ҡарай алмаҫ ине.

* * *

Был ниндәй көн? Нисә тапҡыр һынау алдына баҫырға тура килә. Нисәнсе ҡабат юл сатында... Тағы, тағы һынай уны тормош. Әллә ниндәй туҡмаҡтарын әҙерләп тора. Әллә ғүмер үҙе шул бөткөһөҙ һынау сылбырымы? Көн дә сират күперен үтергә кәрәк. Яғалаш, бирешмә! Тибендә йәйрәп ятыу килешмәй.

Ҡайһы берҙә яза, һынау бәндәне биҙҙерә, ректорҙың да барыһына ла төкөргөһө килә. Оноторға! Ошо вазифаһынан баш тартһа, еңелерәк йәшәр ине, моғайын. Ә кешеләргә кәрәкме уның ректорлығы?

Тағы тәҙрә эргәһендә. Тышта — йәй. Иң йәмле мәл, каникулдарҙың, йәйге ялдарҙың ғәмәле. Танһыҡ бер саҡ: кеше шуға ялдың, иркенлектең тәмен белеп-татып ҡалырға ашыға, шуға ынтыла. Икенсе яҡтан, ул бөтә булмышы менән бының бик-бик ҡыҫҡа буласағын да һиҙә. Шундай әкәмәт, ҡаршылыҡлы тойғо йәндә.

Оҙаҡ өнһөҙ торҙо, оҙаҡ ҡараны ҡаршылағы йәшел йортҡа. Обком йорто бынан ап-асыҡ булып күренә.

Башында ҡыҙыҡ ҡына уй тыуҙы. Был мәлдә Алламоратов ни эшләй икән? Бәлки, әле ул да мединститутҡа ҡарайҙыр. Тантана итәлер: эшен ҡылды, дөйөм йыйылыш үткәрҙе.

Ректор уйҙарын үҙенән ҡыуа, улар башына кире тула. Уйламаҫҡа, ҡасырға... Бәлки, ошо уйҙарынан ҡотолһа, бәхетле булыр ине. Ул — ерҙә бөртөк кенә, бәләкәй генә зат бит... Әҙәм үҙе тураһында уйлауҙан туҡтаһа, маңҡортҡа әйләнер ине.

Коридорға сыҡты, кире кабинетына инде. Завхозын саҡыртып алды, институттың бөткөһөҙ мәшәҡәттәрен тикшерҙеләр.

* * *

Ғафуан Алсынбаев ғүмерен ҡурайсы балаларға арнаны. Улар тип йән атты. Ҡурайсы егеттәр — халҡының киләсәге. Шулай ул иленә хеҙмәт итә. Күпме аҫыл ир-егет үҫтерҙе!

Уны психиатрия диспансерынан да уҡыусылары ҡотҡарҙы. Фәнис Нәсимов ҡасандыр иң тырыш ҡурайсыһы, түңәрәктең старостаһы булды. Шул егет бөгөн — «Баштрансгаз» тресы управляющийы.

Ғибат, ғалим егет, теге хатты управляющийға тапшырған. Фәнис Нәсимов иһә ҙур түрәләр аша остаздары Ғафуан ағаһын дауахананан йолоп алды. Таған ағасын күбәнән нисек һурып алалар, ул да шулай итте.

Диспансерҙан сыҡҡас, Ғафуан тағы интернатҡа китте. Һәр кем менән ҡул биреп күреште, йылмайҙы, көлдө. Был — дошмандары йәненә үрт һалыуы ине.

Баҡай иһә шул уҡ көндө райфола эшләүсе ҡәйенбикәһенә барҙы.

— Беҙҙең интернатта бер милләтсе йөрөй, урмандан ҡасҡан шатун һымаҡ, хеҙмәт кенәгәһе ялған. Үҙенә бер йыллыҡ эш стажы өҫтәп яҙған.

Ҡәйенбикәһе тикшерергә һүҙ бирҙе.

Ғафуан Алсынбаевтың психиатрик диспансерҙан ҡотолоуына ике ай тулып китте. Заводҡа токарь булып урынлашты. Ҡис ҡайтһа, прокуратуранан саҡырыу бар. Аптыраны, йөҙәне. Бер ниндәй ҙә енәйәт ҡылғаны юҡ.

Тәфтишсе алдына төрлө ҡағыҙҙар теҙҙе.

— Ҡасан гимназияла... юҡ, интернатта эшләй башланығыҙ?

— Ул минең хеҙмәт кенәгәһендә яҙылған... Алтмыш беренсе йылдың 1 июлендә.

Тәфтишсе күҙлеген төҙәтте.

— Бында, мәктәп директорының бойороҡтар кенәгәһендә, 1 ноябрь тип күрһәтелгән. Ҡайһыһына ышанырға?

Ғафуан Алсынбаев аптырап ултырҙы.

— Документығыҙҙы үҙ ҡулығыҙ менән төҙәткәнһегеҙ булып сыға. Подделка.

— Был... мөмкин түгел!

— Бына директор бойороғо күсермәһе, бына һеҙҙең хеҙмәт кенәгәһе... Аңлатма яҙығыҙ, гражданин Алсынбаев.

— Бер ниндәй ҙә аңлатма яҙмайым.

— Яҙырға тура килер!

Икенсе, өсөнсө осрашыуҙарҙа ла шул уҡ һүҙҙәр яңғыраны.

— Минең бында бер ниндәй ҙә ғәйебем юҡ, — тине ахырҙа Ғафуан Алсынбаев. — Хеҙмәт кенәгәһендәге яҙыуҙы үҙгәртергә лә завуч өйрәтте, директорҙың секретары яҙҙы — минең ниндәй ҡыҫылышым бар?

— Шулай тип яҙығыҙ, бөтәһен дә асыҡлап...

— Хеҙмәт кенәгәһендәге числоны артҡараҡ күсерергә завуч үҙе ҡушты, ул — хужа, миндә ниндәй ғәйеп? Секретарша завуч бойорғанса яҙҙы.

— Шулай тип яҙығыҙ. Нисек булған, шулай тип.

Аңлатма әҙер булғас, Ғафуан ҡайтырға сыҡты. Урамда шыҡһыҙ ине, йәненә һис толҡа тапманы. Заводта сменаһын арлы-бирле йөрөп үткәрҙе. Өйөндә лә тамағына аш барманы.

...Башҡортом тип көйөп-яныусы Алсынбаевты ҡулға алып, бикләп ҡуйҙылар. Йәнәһе, документты үҙгәрткән өсөн шулай тейеш! Дәүләттең 2700 һум аҡсаһын законһыҙ үҙләштергән. Июлгә, август, сентябрь, октябргә аҡса алмаған алыуын, әммә стажы өсөн өҫтәмә түләү алған. Өҫтәмәнең дөйөм күләме шул саҡлы. Закон буйынса шул күләм ике мең ярым һумдан артһа, бер йылдан өс йылғаса хөкөм итергә мөмкин. Әлегә барыһы ла асыҡ түгел.

* * *

Һөйәрғоловсылар үҙҙәренең еңелеүен танырға теләмәне, дөрөҫөрәге, улар реванш алыу уйы менән йәшәне. Өлкә комитетҡа яңынан ялыу яҙҙылар. Был юлы ла Ислаховтың эшмәкәрлеге тәнҡитләнде, уны әҙерлекһеҙ абитуриенттарҙы — төпкөл ауыл балаларын нигеҙһеҙ рәүештә институтҡа алыуҙа, ҡабул итеү комиссияһы эшенә туранан-тура баҫым яһауҙа ғәйепләнеләр.

Обком үҙе лә тынысланмай, хаттарҙы тикшереү өсөн яңынан комиссия төҙөнө...

Ислаховсылар ҡабат ялыу яҙылғанын, обкомдың мединститут мәсьәләһен бюроға ҡарауға ҡуйырға йыйыныуын ишетеп ҡалды. Шып-шым хәтәр эштәр ҡылына, бераү ҙә белмәй ҙә, һиҙмәй ҙә, хатта институт коммунистарын унда ҡатыштырмаясаҡтар ҙа... Был сигнал уларҙы тамам шаңҡытты. Обком бюроһына, саҡырһалар, ректор менән партком секретары ғына барыр, ә бүтәндәрҙе яҡын да юлатмаясаҡтар, имеш.

Ислаховсылар, аптырап, үҙҙәре партия Үҙәк Комитетына хат яҙҙы, уға бөтәһе егерме бер кеше имза һалды. Айға яҡын ваҡыт үтеүгә хат авторҙарын берәмһәрәм республика дәүләт именлек комитетына саҡырта башланылар. Хикмәт, нишләп Үҙәк Комитетҡа ебәрелгән хат Именлек комитеты тарафынан тикшерелә? Аптыраш. Әллә институттағы хәлдәр ил именлегенә янаймы?

* * *

Таң һарыһынан беренсе секретарь Алламоратовҡа ашығыс шылтыратты:

— Фетнә әҙерләнә! «Башҡортостан» ҡунаҡханаһында листовкалар табылған! Именлек комитетынан хәбәр иттеләр!

Алламоратовтың ҡобараһы осҡан, беренсенең кабинетына ингәс, һаулыҡ һорашырға ла онотто.

— Эшкә тотонорға кәрәк! Башҡортостанда восстание әҙерләнә! Милләтселәр!..

— Нишләргә?

— Нишләргә, имеш. Дошмандың бәйләнеш селтәрен асырға кәрәк! Тәғәйен кешеләрен!.. Улар шул Ислахов менән бәйле түгелме? Именлек комитетына үҙең шылтырат!

Ысынлап та, ҡунаҡханала табылған листовкаларҙа мединституттағы хәлдәр тураһында ла һүҙ бара икән. Әһә, листовканы Мәғҙән районы военкомы Сәғитов яҙған. Ул — мединститутта уҡытып йөрөүсе Мазһар Ҡотлояровтың яҡташы, имеш!

Листовкала тағы институттағы Ҡыяметдинов тигәндәрен хурлағандар. Башҡорттар баш күтәрергә йыйына! Был ни ғәләмәт: донъя баштүбән килә, ваҡиғалар сәғәтләп ҡуйыра. «Ситуация, ситуация», — тип үҙ алдына һөйләнде идеология секретары. Ҡабинетында ишекле-түрле йөрөнө, а-ана, тәҙрәнән мединститут күренә. Шунда ректор Ислахов кабинеты. Фетнәселәр штабы!

Күҙҙәре аҡ бинаның стеналарын ҡапшаны, хәтәр асышынан аҙарынып торҙо. «Ниңә ул шул саҡлы ректор Ислаховты күрә алмай икән, мединститутты яратмай?»

Башында хәтәр уй өйөрмәһе ҡупты: шул ут нөктәһен — дошман штабын юҡ итергә, көлөн күккә осororға!

— Алло! — Телефонға тотондо. — Алло! Был Ҡолямы? — Обком секретары Именлек комитеты рәйесе менән шулай һин дә мин һөйләшә ине. — Ҡоля, ҡунаҡханала табылған листовкалар буйынса ниндәй яңылыҡтар бар?.. Шулаймы? Майор Сәғитов, эйе... Хәҙер ҡалғандарын табырға! Эйе, эйе.

Идеология секретары трубканы һалды ла: «Осрашыу урындары — Салауат һәйкәле...» — тип ҡуйҙы.

* * *

Ислаховсылар Салауат һәйкәле янында түгел, ә Крупская баҡсаһында осрашты. Бында аулаҡ. Бөтөн донъя хискә-моңға сорналған, күксиндәр сәскә

ата. Уларҙың хуш еҫе башты әйләндерә. Күксин йәнәшендә ҡупшы миләштәр, иркә йүкәләр ирәйә. Яҙғы һауа күкрәккә тула, үләндәрҙең йәшел төҫө күҙҙәрҙе ҡамаштыра. Тар һуҡмаҡ аҫҡа төшә, аҫта — йылға.

Ислаховсылар шымған, яҙ йәмдәре күңелде албырғата шул. Вәлиев яңыраҡ Мәскәүҙән диссертация яҡлап ҡайтҡан, Мазһар Ҡотлояров күптән философия кафедраһында эшләй. Күзбәков менән Мырҙанов та бында.

— Ҡыяметдиновтың башы ике түгел, — тине кемдер.

— Минеңсә, егеттәр, обком партия йыйылышы менән генә туҡтамаҫ, — тине Вәлиев.

— Эйе, баш һандалға һалынған... — тине берәүһе шаяртып.

— Беҙ барыбыҙ ҙа хәҙер Ислахов менән бер епкә бәйләнгәнбеҙ! —Быныһын Латипов әйтте.

— Һөйәрғоловтың паспортында башҡорт тип яҙылған, — тине Мазһар Ҡотлояров. Унынса, йәмәғәтселек өсөн был да мөһим мәғлүмәт.

— Ярай, егеттәр, — тине Вәлиев етдиләнеп, — быныһы аңлашыла, хәҙер беҙгә уяу булырға кәрәк, обком йыйылыш менән генә туҡтамаясаҡ. Институтта тағы ниндәйҙер комиссия эшләй ҙә, буғай.

— Йәнә хат яҙырға тура килер... — тип белдерҙе Мазһар Ҡотлояров.

— Үҙәк Комитетҡа яҙған хат өсөн нимә генә ҡыланып бөтмәнеләр! — тине уға ҡаршы Вәлиев.

Эңер төштө. Ҡояш батҡан тәңгәл яралы январ тәнеләй ҡанһырай. Алһыу нурҙар күк битенәсә һуҙылған. Оҙаҡламай ғаләм йөҙөнән улар ҙа юғалыр, күкте лә, ерҙе лә ҡараңғылыҡ солғар.

* * *

Июнь баштарында обком бюроһы саҡырылды. Был хаҡта вуз уҡытыусылары һиҙмәй ҙә ҡалды тиерлек. Уларҙың белеүе кәрәкмәй ҙә ине. Мединституттан бюроға партком секретары Герасимов менән ректор Ислахов үҙе генә барҙы.

Бюрола мединституттан килгән ялыуҙар тикшерелде. «Был институтта хәлдәрҙең көсөргәнешле ҡалыуы хаҡында һөйләй, партком менән ректорат үҙ эшен яйға һала алмай, уҡытыусылар араһында мораль мөхит тә хөрт», — тип асыҡтан-асыҡ белдерҙе обком секретары Алламоратов. Институтта эшләгән партия комиссияһы ла шул уҡ хәҡиҡәтте раҫланы. Был шарттарҙа, әлбиттә, етәкселекте алмаштырырға кәрәк. Ректор үҙ вазифаһы бурыстарын атҡара алмай, институт эшен етерлек дәрәжәлә ойоштормай. Өлкә комитет бюроһы Рәсәй Федерацияһы фән һәм юғары уҡыу йорттары министрлығынан ректор Ислаховты вазифаһынан бушатыуҙы һорай, уның урынына проректор Һөйәрғоловтың кандидатураһын тәҡдим итә.

Ректор Ислахов шымып ултырҙы, ә партком секретары Герасимов баҫылманы.

— Мин ғәйепле, Зыя Ислахович, мин... — тине Герасимов ярһып. — Бюрола һеҙҙе йүнләп яҡлай алманым.

— Ярай, тынысланығыҙ... Бюрола беҙгә һүҙ ҙә бирмәнеләр бит, Алламоратов нисек тә беҙҙе күрһәтмәҫкә тырышты. Шулай, бюрола уларҙың комиссияһының позицияһы өҫтөнлөк итте.

Ни тиһәң дә, шул бер үк балыҡ башы тигәндәй, институт етәкселәре аптырашып ултырҙы. Бюрола улар еңелде, берәү ҙә яҡламаны, бөтәһе лә комиссияның һүҙен ҡабатлап тик торҙо.

«Әллә был асыҡ партия йыйылышындағы еңеү ғилләһе микән?» — тип уйланы Ислахов. Партйыйылышта еңел генә еңделәр: улар күмәк ине, егерме бер кеше, ә бюрола уларҙың берәүһе лә ҡатнашманы, бары тик ҡаршы яҡ — һөйәрғоловсылар фекере генә үткәрелде. Алламоратов комиссиянан үҙе шуны талап итте.

Аптырағас, Ислахов Мәскәүгә, фән һәм юғары уҡыу йорттары министрлығына шылтыратты. Министр урынбаҫары Щекин менән яҡшы мөнәсәбәттә булһа ла, бындағы ығы-зығыны асылып аңлатып торманы, бары бюро ҡарарын еткерҙе һәм ректорлыҡҡа яңы кандидатура — Һөйәрғоловты Мәскәүгә министр менән әңгәмәгә ебәрәсәген белдерҙе. Щекин проректор хаҡында һорашҡас та, ректор әллә ни асылып, оппонентын яманлап маташманы. Хәйер, кәйефе лә юҡ ине.

Ислахов проректорҙы кабинетына саҡыртты. Мөмкин тиклем йомшаҡ, ипле һөйләшергә тырышты.

— Ярай, — тине, көрһөнөп. — Улай бик ректор булғың килгәс, әйҙә, Мәскәүгә, министрлыҡҡа барып ҡайт, мин һиңә вазифамды тапшырырға әҙермен...

Бөттө-китте, осланды уның дәүере, ул алыш майҙанынан сыға. Әйҙә, бик теләгәс, урынын яулап алһындар, уны пенсияға оҙатһындар. Профессор Ислахов, әлбиттә, вазифаһына йәбешеп ятмаясаҡ, бары эшенең осланмай ҡалыуы хөрт. Күберәк ваҡытын ижадҡа бүлер, йәшлектән килгән хыялын нисек тә бойомға ашырып ҡуйырға тейеш. Шәхси күргәҙмәһен әҙерләп, картиналарын халыҡ хөкөмөнә сығарасаҡ! Ижад емештәре күргәҙмәһе!..

* * *

1937 йыл. Йөрәктәр өшөп китә, күҙгә йәш тула. Интеллигенттар сафы тағы ла алға баҫа. Халыҡтың тәүге рәтендә — артистар Мәкәрим Мәһәҙиев, Мортазин-Иманский, журналист Ҡасим Аҙнабаев, яҙыусылар Дауыт Юлтый, Булат Ишемғол, Имай Насыри, Ғабдулла Амантай, Төхфәт Йәнәби, Афзал Таһиров... Йырсы-композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтов... Мөхәмәтша Буранғол, Ғөбәй Дәүләтшин, Һәҙиә Дәүләтшина, телсе Ғәббәс Дәүләтшин... Хәрбиҙәр Муса Мортазин, Сөләймән Мырҙабулатов, Нуриәғзәм Таһировтар... Халыҡтың үҙаллығы өсөн көрәшселәрҙе Совет власы дошманы тип иғлан итеү, бөтә муллаларҙы, ғәрәпсә алфавит менән яҙылған бар ҡулъяҙманы юҡ итеү, онтау; бар милли интеллигенцияны «хыянатсы» тип атау, дингә ҡаршы ҡырғын башлау... Шулай һирәгәйә сафтар, ҡанлы тәгәрмәс аҫтында ҡалып ватыла, таш онтағына әйләнә ҡабырғалар.

Урам буйлап «ҡара ҡоҙғон» йөрөй. Ғәҙәттә, улар өс ҡоралланы кеше, өлкәне милиционер була. Тиҙ генә тәғәйен йортҡа инәләр, китап кәштәһен аҡтарып ташлайҙар. Шул ҡағыҙҙар араһында нимә эҙләйҙәр?.. Әгәр алдан ошаҡ булһа, тәғәйен кеше өҫтөнән ялыу яҙылһа, бигерәк тә шәп.

Шул ошаҡ, шул шик үрмәкес ауылай бар илде солғай. Күршеңде беләһеңме, уға үсең бармы? Әйҙә, тот та яҙ! Һис шикһеҙ бер дәғүәң барҙыр, асыуың килгән мәл булғандыр — тот та яҙ, ым ғына яһа! Исемлеккә эләккәндәрҙе йәһәт кенә ғәйепләү, анһат ҡына судҡа тарттырыу, унан барыһын да этаплап бөйөк төҙөлөштәргә оҙатыу...

Шулай социализм төҙөлә, шулай илдең бөтөнлөгө тәьмин ителә. Ҡайҙа унда оппортунистарға һүҙ, уңдарға һүҙ бирелмәй, бөтәһе лә социализмдың еңеүе хаҡына! Интеллигенцияға, үҙ аллы фекер йөрөткән бушбоғаҙҙарға Советтарҙа урын юҡ! Беҙ — берҙәм, бер бөтөн!

Бынан һуң оҙаҡ, оҙаҡ йылдар мантый алмаясаҡ интеллигенция, һынын турайта алмаҫ. Халҡым тип янған, илем тип бөтөрөнгән кешеләр: һөнәрмәндәр, булдыҡлылар — лагерь туҙаны.

1937 йыл — Рәсәй тарихында кеше хоҡуҡтары аяҡ аҫтына һалып тапалған заман. Ватандың иң алдынғы шәхестәре, белгестәр, хәрбиҙәр, врачтар, уҡытыусылар, ғалимдар, яҙыусылар юҡ ителә. Халыҡ күңеленә ҡурҡыу һалына, илдә ысын мәғәнәһендә полицайлыҡ, дәүләтселек, үҙәкләштереү башбаштаҡлығы урынлаштырыла. Бөтәһе лә яҡты киләсәк хаҡына, бөтәһе лә илде бер йоҙроҡҡа туплау, шәхси власть диктатураһы урынлаштырыу маҡсатынан сығып эшләнә.

* * *

Ислахов ул йылдарҙы иҫләһә, тәне эҫеле-һыуыҡлы була. Эйе, шул сигенеү... Аяғы итеге менән ҡуша туңған...

Улар дошман ҡамауынан ҡотолабыҙ тип төнө буйы барҙы. Дивизия ғына түгел, тотош фронт артҡа күсә, ахырыһы. Ҡыш та түгел бит, көҙ, ә тән ҡороша, быуындар бер ни тоймай. Машинала яралылар күп. Доктор нисек өнөн сығарһын? Эргәһендә йәш кенә сестра ҡыҙҙар. Улар түҙә... Арттан туптар гөрһөлдәүе, әллә ниндәй машиналар геүләүе оҙата килә. Гүйә, ҡараңғы донъянан ҡасып, яҡтыһына сығалар. Аяҡ аҫты — ҡырпаҡ ҡар.

Шунда барыбер бармаҡтарын туңдырҙы бит. Көнө буйы атланылар. Аҙаҡ аяҡтан яҙҙы, уны күтәреп кузовҡа һалдылар.

Иң ҡыйын мәлдә доктор шул сигенеүҙе хәтерләй. Йәнә: фронттан Өфөгә ҡайтып төшөүен...

Икенсе көндө үк зыяратҡа барҙылар. Бөтөн ерҙе ҡыҙырып сыҡтылар — Ишбулдының ҡәбере юҡ. Күҙ менән ҡаш araһында зым-зыя. Гүйә Ишбулды был донъяла йәшәмәгән.

Зыяратты хәҙер танырлыҡ түгел: йәм-йәшел үлән менән ҡапланған һуҡмаҡтар, тегендә лә, бында ла убалар һерәйә — барыһы ла тамғалы.

Көнө буйы зыярат ҡыҙырҙылар. Фронтовик врач улының ҡәберен булһа ла күргеһе килгәйне. Бары ҡатыны яраһына тоҙ һипмәҫ өсөн генә өндәшмәне, аяҡ аҫтына текәлеп атланы ла атланы.

— Бына ошо тапҡырҙа ине, — тип көрһөнә Маһира. — Яңылышмаһам...

Теге ҡарауылсыны таба алманылар.

Шунан һуң ҡатыны бер ваҡытта ла зыяратҡа аяҡ баҫманы. Ғәмһеҙ, үҙ уйымәшәҡәтенә батҡан килеш йәшәне. Бүтән бала таба алманы. Улар шулай йәшәне. Зыя башкөллө фәнгә сумды, ә ул... Ҡәйнәһе вафатынан һуң үҙен бөтөнләй яңғыҙ хис итте.

...Ҡирбес йорттан Ислаховҡа арыу фатир бирҙеләр. Шатлыҡ өҫтөнә — шатлыҡ: иркен фатир алды, докторлыҡ диссертацияһын яҡланы. Йома көн институтта шуның хөрмәтенә тантана... Зыя шунда йыйынды.

Бәхете тыуған көн: институтта байрам. Тантаналы музыка бүлмә эсенә һыймай. Бихисап йөҙҙәр, бинаһая ҡотлауҙар... Әйтерһең, институт фойеһы сәскәле яланды хәтерләтә: сал сәсле профессорҙар, доценттар, ҡупшы ханымдар — хатта ректорҙың үҙенең дә башы әйләнеп китте.

— Зыя Ислахович, башлайыҡ!

— Мин риза.

Ҡунаҡтар өҫтәл артында урынлашҡас, тағы ҡотлауҙар, рәсми телмәрҙәр... Бөтәһе лә шат. Һөйәрғолов менән Мөхәмәтов та — шунда. Бикбулатов, Ган-

цев, Лазарева, Лоцманов, институттың партком секретары Герасимов, уның урынбаçары Титов та... Һаулыҡ һаҡлау министры Рәжәпов менән мәҙәниәт министры Харрасов та, профессор Таһиров та.

Ислахов тағы залды байҡай. Үҙенең уҡыусылары ултыра: доценттар Вәлиев, Күзбәков, Ҡотлояров, Латипов, Ҡыяметдинов...

Шарап ҡеүәтле, бокалдар сыңлай, барыһы ла шат, ҡунаҡтар парлашып бейергә төшә. Ректор Ислахов та бәхетле, әммә баянан бирле йөрәген бер ҡылсыҡ өйкәй. Иң ҡыҙыу бер мәлдә ҡатыны юҡҡа сыҡты...

* * *

Банкеттан һуң ректорҙың ҡатынын эҙләмәгән ере, шылтыратмаған урыны ҡалманы. Әүәлге иҫке йорто тәңгәленә барһа, ҡоймаға һөйәлгән берәүҙе шәйләне. Яҡыная бирһә, Маһира...

— Маһира!

—...

— Нишләп тораһың? Мин һине төштән бирле эҙләйем.

— Үҙебеҙҙең өйҙө ҡарарға килгәйнем.

— Уның нимәһен ҡарайһың, институтта бөгөн...

—...бөгөн Ишбулдының ун ете йәше тула, Зыя.

— Ә-ә... — Ирҙең тыны өҙөлдө.

— Был — уның йорто, Зыя, — тип аңлатты ҡатын. — Был — Ишбулдының ҡәбере лә.

Зыя өндәшмәне, хәҙер ташландыҡ ағас йортҡа текләберәк ҡараны. Әүәлге фатирҙары бер яҡҡа иңкәйгән, хәҙер унда берәү ҙә йәшәмәй икән. Ҡешеләр уны ташлап киткән.

— Аяғың өшөй бит, Маһира.

— Юҡ.

— Әйҙә, ҡайтайыҡ.

Ҡатын ҡарышманы. Әҙерәк атлағас, тағы ҡайырылып ҡараны. Гүйә, һуңғы ҡат.

Зыя — бәхетле, докторлыҡ диссертацияһы танытмаһы — ҡулында, тик шатланыр кешеһе генә юҡ.

* * *

Уның ауырыуы көтмәгәндә генә беленде. Сир үпкәне тотошлай ялмаған. Төптә зәһәр шеш усағы барлыҡҡа килгән. Белгестәр сирҙе тыйыу мөмкин түгел тип һананы, Зыя иһә үҙе операцияға өмөт бағланы. Был һуңғы сара икәнен аңлай ине, бары ҡатынының ризалығы ғына кәрәк.

Маһира оҙаҡ икеләнде. Хәлен үҙе лә һиҙә. Буçлығып илай, күҙ төптәре елһеп бөттө. Ире институтта саҡта илай, күҙ йәшен йәшерә.

— Операцияға ятырға кәрәк, Маһира! — тине Зыя ҡәтғи итеп.

— Унан берәй файҙа булыр микән?

— Башҡа әмәл юҡ, Маһира. Мин беҙҙәге иң арыу белгес Хөснөяров менән һөйләштем.

— Ул ризамы, Зыя?

— Риза, Маһира, хәҙер һинең теләгең генә кәрәк.

— Аңлайым.

— Маһирам... — Зыя Ислахов ҡатынын күкрәгенә ҡыҫты. Шулай, гүйә, тәне менән алда торған афәтте ҡапларға итте. Моңһоу ҡатын сабый балалай

иркәләнде, яҡлаусыһына, һаҡлаусыһына үҙенең яҙмышын ышанып тапшырҙы. Оҙаҡ торҙолар, әллә ни саҡлы ғүмер уҙҙы. Ауаздар тынды, хәрәкәт туҡталды.

— Мин риза, — тине Маһира. Зыя уны ҡосағынан ысҡындырманы. Маһира иренең дә ҡулбаштары дерелдәүен тойҙо.

Профессор тормоштоң аяуһыҙлығы хаҡында уйлай ҙа, үҙенең доктор булыуын онота. Уға барыбер түгел: хәсрәт, бәлә үҙеңә ҡағылғанда битараф булып ҡалыуы ҡыйын икән. Тормоштоң мәрхәмәтһеҙлеген, көйһөҙ сырайын үҙең кисерге килмәй, тәбиғәттең тәбиғилеген үҙең танығың килмәй. Өйөңә килгән ҡаза ла тәбиғиме, ғәҙелме? Ниңә тәҡдир унын һуңғы өмөтөн, йөрәк ҡанын тартып ала? Уны иң-иң ҡәҙерлеһенән айыра?

...Улар был төндө шулай үткәрҙе. Хәтирәләр күп булды: Мәскәүҙе, алыҫта ҡалған йәшлек йылдарын хәтерләнеләр. Зыя Маһираны тәү ҡат ятаҡта аш менән һыйлауын әйтте. Шунда кәстрүлдән елдәр иҫкәйне бит. Зыя илар сиккә етте, Маһира көлдө. Аҙаҡ белделәр: юғары курс студенттары шаяртып ҡына сәлдергән, имеш. Барыбер күңелле ине ул саҡта. Йәш, көслө инеләр, тормоштары яңы башланғайны.

Уй ебе ары йүгерә. Үкенеслерәк булды Маһираның яҙмышы: балаһы юҡ. Ишбулдынан һуң ауырға ҡалманы, исмаһам, вариҫы ла юҡ. Шул йәнен әрнетә.

Балконға сыҡтылар. Ҡала йоҡлай, тәҙрәләрҙә уттар һүнгән, бары үҙәк урамдарҙа ғына лампочкалар баҙлай. Улар ҙа һүнер, бөтөн ҡала, бөтә донъя ҡараңғылыҡ ҡосағына сумыр. Бары саҡ ҡына көтәһе ҡала...

Операция билдәләнгән көн дә үтте. Сирлене реанимацияға күсерҙеләр, Зыя баш осонан китмәне.

* * *

Бер ҡат, Өфөһөнә ҡул һелтәп, Мәскәүенә сығып киткәйне бит ул, ниңә ҡабат ҡайтты?

Ҡайҙа ғына барма, үҙ-үҙеңдән ҡасып булмай. Асылың шул уҡ, яраларың, хаталарың үҙең менән... Мәскәүҙә лә шул уҡ төштәр эҙәрлекләне.

Был донъяла үҙеңдең көсһөҙлөгөңдө, мөмкинлектәрең сикләнгән булыуын тойоуҙан да хәтәре юҡ. Кеше моратына етә алмай, иң ҡырҡыу мәлдә мәхрүм булып ултыра. Бармаҡтарын шартлата, ҡулын ҡаушыра. Ул — яҙмыш ҡоломо? Үҙе рәссам, хыялында Аллаларҙы тыуҙырыусы зат, үҙе — көсһөҙ... Үҙе табип, үҙе яҡынын да ҡотҡара алмай. Ә Маһираһы?.. Доктор Ислахов ҡашын йыйыра, ирендәрен тешләй.

Эйе, ул үҙенең көсһөҙлөгөн таный. Профессор, имеш. Берәү ҙә уны йыуата, тынысландыра алмай.

Фатирындағы бөтөн нәмә Маһираны хәтерләтә ине, Мәскәүгә китте лә шул донъяһынан айырылды, ә уйҙарынан, кисерештәренән ҡотолдомо? Унһыҙ нисек көндәрен, ҡалған ғүмерен үткәрер? Уны Мәскәү ғилми-тикшеренеү институтында лаборатория мөдире итеп ҡуйҙылар. Бөтәһе лә бар, барыһы ла урынында төҫлө. Кешене донъяла бары хеҙмәт кенә ҡотҡара, уны һинән берәү ҙә тартып ала алмай.

Фәнни эш тә, күрәһең, яңғыҙаҡтарҙың шөғөлөлөр. Шул ваҡытта Зыя ҡылҡәләмгә ныҡлап тотондо. Көндәр буйы картиналар яҙа ине... Улар тотош бер бүлмә тулып китте. Бары ысын ижадсылар ғына фанатик, улар ғына теләгенә ирешә. Улар ғына көндәлек ығы-зығынан, ваҡлыҡтан арынып, ниндәйҙер ҡиммәт тыуҙыра. Ижад — яңғыҙлыҡтың серҙәше. Ижадсылар — хыялды ысынбарлыҡҡа әйләндерергә маташыусылар.

Ислахов Мәскәүҙә профессор булды. Уға кафедра бирҙеләр. Шул ваҡытта ла яҡташтарҙан төрлө тәҡдимдәр килеп торҙо, ғалим барыһынан да баш тартты. Профессор Ислахов эштән башҡа бер ни ҙә белмәй, бөтә көсөн шуға арнай, ғүмерен шуның менән тултыра.

## Бишенсе бүлек

...Уны тәү ҡат сәхнәлә күрҙе. Мәскәүҙә Башҡорт мәҙәниәте көндәре асылғайны. Спектаклдән һуң ни яғы менәндер Маһираһына тартҡан шул һылыу артисткаға сәскәләр сығарып бирҙе.

— Һеҙ Ҡәфиәме? — тип һорап өлгөрҙө.

— Эйе, — тине сибәр актриса. — Ә һеҙ кем?

— Профессор Ислахов.

— Рәхмәт, профессор.

Икенсе кис Ҡәфиә «Отелло»ла Дездемона ролен башҡарҙы. Спектакль бер тында үтте, профессор тетрәнде. Әүәле ул сәнғәт көсөнә, туған халҡының милли театры талантына бик ышанып та бармай ине.

Аҙаҡ улар йәш ҡыҙ менән егет кеүек ҡала урамдарын ҡыҙырҙы. Әкәмәт хистәргә тарып йөрөнөләр. Йәнәһе, йәшлек ҡабат кире ҡайтҡан, улар — ғашиҡтар, донъяларын онотҡандар, баштары әйләнгән. Ҡәмит, оят. Ул — профессор, ә Ҡәфиә дәрәжәле ханым, танылған актриса бит инде... Хәс тә йәшлек мәле, Зыяларҙың студент саҡтары... Улар һөйөклөһө Маһира менән Мәскәү урамдарын тапай, донъя — ҡуласа, әйләнә лә ҡабат шул элекке нөктәһенә баҫтыра. Улар — ғашиҡтар, әйлән-бәйлән өйөрөләләр; Маһира урынында бөгөн — Ҡәфиә, ғәләмәт. Маһира — Ҡәфиә, ә Зыя — шул уҡ Зыя, элекке Мәскәү студенты.

Ғәжәйеп бер йомғаҡ, сер төйөнө кеше яҙмышы!

Улар шулай үҙ илдәренән алыҫта, Мәскәүҙә танышты, табышты. Мәскәү яңынан ике затты ҡауыштырҙы... Бәлки, һуңынан шул да уның Башҡортостанға ҡайтыуына булышлыҡ иткәндер.

* * *

Ректор кабинетында ине. Ошолай ултырып, үткәндәрҙе хәтерләп, күпме ғүмер уҙған, эңер төшкән.

Сәғәтенә күҙ һалды: Мәскәүҙә киске дүрт. Моғайын, министрлыҡтың коллегия ултырышы дауам итәлер, Һөйәрғолов дер ҡалтырап ултыралыр... Башҡорт дәүләт медицина институтына яңы ректор тәғәйенләүҙе министр үҙе генә хәл итмәй, бәхәсле был эште коллегия ҡарамағына тапшырған.

Урамда ла һауа бөркөү, һаман көн ҡыҙыуы ҡайтмаған. Ҡүҙҙәр һыҙлай. Пинжәген сисеп ебәрҙе, галстугын ысҡындырҙы.

Профессор бөгөнгә түҙҙе, иртәгә Щекинға иртүк шылтыратырға булды. Мотлаҡ!

...Шылтыратты. Министрлыҡ коллегияһы профессор Һөйәрғоловты Башҡорт дәүләт медицина институты ректоры итеп раҫламаған. Бына һиңә «мә»! Бифәләш!

...Профессор Һөйәрғоловты инде нисә көн бер ҡайҙан да таба алмайҙар. Өйөндә лә юҡ, һыуға төшкән кеүек ғәйеп.

* * *

Башвоенкоматтың сәйәси идаралығы начальнигы Мәғҙән районына килеп төштө. Военком Сәғитов полковник Калашниковты матур ҡаршыланы. Алдан эш пландарын, документацияны әҙерләп ҡуйғайны — полковник оҙаҡ соҡоноп баш ватып ултырманы. Төшкөлөккә район үҙәгендәге санаторийға киттеләр.

Ҡарағай урманында саф һауа. Майор Сәғитов үҙ хәлен аңлай ине, полковник Калашников та тыныс кеше. Санаторий тирәһендә мөһабәт ҡарағайҙар, саф һыулы урман йылғаһы. Ҡуктәр киңәйеп, тын юлдары асылып китә һымаҡ бында.

— Ыҡ йылғаһы һыуы шишмәнекенә тиң. Эсһәң, теште ҡамаштыра, сумһаң, тәнде ҡороштора.

— Майор, һеҙ шиғри күңелле кеше.

— Мин Мәскәүҙә тарих-филология бүлеген тамамланым бит, полковник иптәш.

— Уҡытыусы булырға хыялландығыҙмы?

— Тарих менән ҡыҙыҡһынам, полковник иптәш.

— Тарихсы, тимәк... — Полковник яр башында туҡтаны. Майор ҙа йәнәшенә баҫты. Икәү ҡаршы яҡ ярға, иңен ҡалын ҡарағай урманы һырыған тәңгәлгә төбәлде. Һәр кем үҙ уйына тарығайны, һәр кем үҙенекен уйлай.

— Тарихсымын тиһең инде. Донъя тарихын өйрәнәһеңме, СССР тарихынмы?

— Донъя тарихы етерлек өйрәнелгән инде. Беҙгә СССР тарихын, Рәсәй батшалары тарихын өйрәтәләр. Ә минең халҡымдың тарихы — Рәсәй батшалары, Ҡазан, Нуғай хандарынан иҙелеү тарихы — өйрәнелмәй.

— Һеҙ «иҙелеү ҙә иҙеү» тип тылҡыйһығыҙ, был тенденциозлыҡ түгелме, майор?

— Юҡ, полковник иптәш, беҙҙең тарих юғалып ҡалмаҫ өсөн көрәш тарихы ул...

— Көрәш әле лә дауам итәме?

— Эйе.

— Кемдәр иҙә һеҙҙе?

— Беҙ һаман ситлектәге ҡош һымаҡ, полковник иптәш. Еребеҙ үҙебеҙҙеке кеүек, ә иркебеҙ юҡ.

— Ҡыҙыҡ, — тине полковник, майорға тишеп ҡарап. — Юҡҡа ғына һеҙҙең эштәр КГБ-ға эләкмәгән икән.

— Эйе...

— Майор Сәғитов, бындай ҡараштарығыҙ өсөн... һеҙгә... һаҡ булырға кәрәк.

— Мин һаҡ...

— Асыҡтан-асыҡ һөйләшәбеҙ бит.

— Һеҙгә генә һөйләйем, полковник иптәш.

— Әгәр мин быны юғарыға еткерһәм?..

— Мин һеҙҙең намыҫҡа ышанам.

— Әгәр минең урында икенсе кеше булһа?..

— Сергей Николаевич, мин һеҙҙе хөрмәт итәм. Һеҙ ҙә идеолог бит, айыҡ ҡарашлы кешеһегеҙ. Тормошто нисек бар, шулай ҡабул итергә кәрәк.

— Һеҙ ҙә тарихсы, мин дә. Әммә үҙ заманыңдан өҫтөн булып булмай. Һин, майор, — бер үҙең. Һин аҡыллы кеше, ғәҙеллек даулаусы, әммә уны икмәк

телеменә һылап ашап булмай. Хаҡлыҡ китап өсөн яҡшы, ә тормош үҙ ыңғайына ағыла. Ул һинең иманыңа ла буйһонмай. Ҡилешәһеңме?

— Ҡилешәм, полковник иптәш.

— Ә һинең үҙеңә килгәндә, отставкаға бойороҡ әҙерләйбеҙ. Пенсияға сығаһың, утыҙ процент менән. Аңлашыламы?

— Аңлайым, полковник иптәш.

— Һиңә Башҡортостанда эшләргә мөмкинлек бирмәҫтәр. Обком, Марселов... Алламоратов Марселовҡа баҫым яһаясаҡ. Шулай булғас... Беҙ һине сәйәси бүлек Советына саҡырабыҙ, шунда ҡараласаҡ һинең «шәхси эш»еӊ... Мин бында танышып ҡына йөрөйөм.

— Рәхмәт, полковник иптәш.

— Шулай, майор, отставкаға әҙерлән.

— Мин әҙер! — Мәғҙән райвоенкомы хәрбиҙәрсә честь бирҙе.

* * *

Иртүк кабинеты төбөндә көтөп торғандар. Тағы ниндәй янғын сыҡҡан?

Ректорҙың ҡашы емерелде, ләкин эсендәгеһен нисек тә тышҡа сығармаҫҡа, кешегә белдермәҫкә!

— Зыя Ислахович...

— Ни булды? Һеҙ кем?

— Мин — Вәлиевтың ҡатыны. Вәлиев партия эше һәм философия...

— Беләм. Ни булды?

— Төндә иремде именлек хеҙмәткәрҙәре алып китте! — Ҡатын күҙ йәшенә ирек ҡуйҙы. — Ул нимә эшләгән, нишләп уны ҡулға алалар? Төнө буйы йоҡламаным, балалар илай... Сығып киткәндә: «Борсолма, тикшерерҙәр ҙә ебәрерҙәр», — тигән булды. Таңғаса көттөм, ҡайтманы, ҡайнағаға шылтыратҡайным, унаһы командировкаға киткән. Аптырап һеҙгә килдем. Ни булған, ниңә уны ҡулға алалар? Хәҙер ҡайҙа барырға ла, кемгә мөрәжәғәт итергә лә белмәйем.

Ректор нишләй ала, ни хәл ҡыла? Ислахов ҡаңғырып ултырҙы, кабинетына инеп өлгөрмәгән, бәлә.

— Тәк. — Ректор нисек тә үҙен ҡулға алырға, нәгеҙ бер ҡарарға килергә тырышты. — Туҡта, беҙ милицияға шылтыратайыҡ... КГБ-ға шылтыратырғамы әллә? — Ислахов тағы шымтайып ҡалды.

Ҡул ҡаушырып ултырҙы, ҡаршыһында — Вәлиевтың борсоулы ҡатыны.

— Туҡта! — тине тағы ректор. — Беҙ, эш сәғәте башланғас, обкомға шылтыратабыҙ. Һеҙ беҙгә өй телефонығыҙҙы бирегеҙ — хәл асыҡланыу менән...

— Юҡ, ректор, мин бында көтәм.

Ислахов, йөҙәп, обком һандарын йыйҙы. Ирене ҡымтылған, ҡаршыһындағы һандарҙы саҡ айыра, тик бармаҡтары ҡалтырамай. Именлек хеҙмәте, милиция, прокуратура, суд органдары эшенә обком секретары Алламоратов яуаплы...

— Алло. — Телефон сымының теге башында Алламоратов үҙе ине.

—召 Мединститут ректоры Ислахов. Сабир Хәйҙәрович, мединституттың философия кафедраһы мөдире Вәлиев юғалды. Ҡисә уны именлек хеҙмәткәрҙәре өйөнән алып киткән... Ә-ә, йомошоғоҙ бар инеме? Тихоновский эше буйынса?.. Суд була. Ярай, киләм! — Ректор йыйына һалды. Вәлиевтың ҡатынына төбәп өндәште: — Обкомға саҡырталар, Алламоратов... Ул мин барып еткәнсе, Вәлиевтың хәлен дә белешәм, тине.

Обком эргәлә генә, мединститут менән уның араһы — ике урам һыҙаты. Алламоратов Ислаховҡа сабыр, шулай ҙа йыйнаҡ, өҫтөңә ташланырға әҙер барыҫ һымаҡ күренде.

— Вәлиевты ҡайтаралар, — тип «алдан алды» обком секретары.

— Уны ни өсөн...

— Белмәйем.

— Ҡатыны кабинетымда илап ултыра. — Ислахов асыулы.

— Белмәйем, именлек хеҙмәте тура Мәскәүгә буйһона. — Алламоратов терһәген ипләне. — Совет район прокуратураһы Шаһиәхмәтов эшен судҡа тапшырған, тәүге ултырыш — йома көн.

— Тихоновскийҙың хәле арыулана...

— Әйе, миңә атаһы шылтыратып тора, опера театрына инһәм, юлыма арҡыры сыға. Судта мединституттан да вәкилдәр ҡатнашһын! Партком секретары Герасимов үҙе барһын!

Тимәк, был суд та мединститут өҫтөнән сираттағы хөкөм була икән.

— Ниңә өндәшмәйһегеҙ? — Обком секретары ректорға һөҙөп ҡарай. Бына хәҙер аҡ барыҫ профессор өҫтөнә ташлана.

Ректор ҡулбашын йыйырҙы.

— Судта Герасимов та, бүтәндәр ҙә мединституттағы хәлде, тәрбиә торошоноң насар ҡуйылыуын таныһын!..

— Сабир Хәйҙәрович, — ректор секретарҙың нисек тә төп һүҙгә күсә алмай хитланыуын һиҙә ине, шуға ары уратып-суратып торманы. — Беләм, Һөйәрғоловтың ректор вазифаһына раҫланмауы өсөн йәнегеҙ көйә.

Алламоратов йөҙөндә бер һыр ҙа һынманы, ул, ысынлап та, тактик, алдан һикереп төшмәй. Көтә. Әйҙә, дошман бар дәлилдәрен дә сығарып һалһын!

Ә ректор Ислахов инде туҡтаманы, бер башлағас, кисекмәне:

— Бынан өс йыл элекке ваҡиғаны хәтерләгеҙ! Әйе, унда ла мине урынымдан алып ташлау өсөн тырыштығыҙ. Ректорлыҡҡа кандидат — һеҙҙең танышығыҙ, республикала бик тә билдәле кешенең улы ине. Такашвили. Өфө нефть заводы директоры, сик буйында бурлыҡ өҫтөндә тотолдо. Ә ҡоһоро улына — һеҙҙең кандидатураға төштө. Иҫләгеҙ!

Алламоратов йөҙөндә бер һыҙат та һелкенмәне, ә еңмеш ректор дауам итте.

— Был юлы ла шул тарих ҡабатлана: һеҙҙең кандидатураны — Һөйәрғоловты РСФСР фән һәм юғары уҡыу йорттары министрлығы раҫламаны. Бында профессор Ислаховтың ни ғәйебе?.. Хәҙер мине күрә алмайһығыҙ, институт уҡытыусылары КГБ диуарына ташлана. Артабан кем, тағы ниндәй әкәмәт эштәр уйлап ултыраһығыҙ?

Шунда Алламоратовтың йөҙө буҙарып китте. Ул кинәт урынынан һикереп тороп:

— Етте! — тип ҡысҡырҙы. Күҙҙәре күсәренән ысҡынған, ирендәре ҡымтылған.

Профессор Ислахов ҡабаланмайынса кабинеттан сыҡты.

* * *

Алламоратов тағы Мәскәүгә саҡыртып алынды. Юҡ, Үҙәк Комитетҡа түгел, ә Мәжлескә... Әлбиттә, үткер, зиһенле обком секретары «эш буйынса» тип сәбәп тапты, башта нәҡ Үҙәк Комитетҡа һуғылды.

Мәжлес. Бында мединститутҡа ҡағылышлы хәбәрҙе, РСФСР министрлығы коллегияһы ҡарарын ишеткәндәр, ныҡ борсолғандар. Мәжлес хужаһының телмәре ҡырҡыу:

— Беҙ РСФСР министрлығының эшмәкәрлеген күҙәтеп барабыҙ, унда аңлашылмаған тенденциялар хөкөм һөрә... Һеҙ, Алламоратов, әлбиттә, ғәйепле түгел. Әммә был тенденцияны белеп торорға, уяулыҡты юғалтмаҫҡа ине! Министрлыҡ коллегияһы... Бында, Мәскәүҙә лә, ниндәйҙер саралар күрелер ул, ләкин обком бюроһы ҡарары — һуңғы инстанция, уны партия уставына ярашлы берәү ҙә үҙгәртә алмай. Алламоратов, киләсәктә обком бюроһының үҙ ҡарарын үҙгәртмәүенә өлгәшегеҙ, юҡ, быға һис тә юл ҡуймағыҙ!

Хәйер, бөтәһе лә аңлашылып тора.

* * *

Өлкә комитет бюроһынан һуң министрлыҡтарҙа ла медицина институтына ҡағылышлы хәлдәрҙе «мединститут эше» тип кенә йөрөтә башланылар. Ә «Башҡортостан» ҡунаҡханаһында табылған хатты листовка тип ебәрҙеләр, обком етәкселәре сығыш яһаған һайын «беҙҙә милләтселек баш ҡалҡыта», «республикабыҙҙа милләтселек күренештәре күҙәтелә» тип һөйләргә әүәҫләнде. Мәғҙән районы военкомының исеме пленум, кәңәшмә ҡарарҙарында теркәлде, именлек хеҙмәте отчеттарына инде. Майор Сәғитовҡа хәҙер ныҡлап йәбештеләр, уға борғаланырға-һырғаланырға һис мөмкинлек ҡалманы. Бөтә ерҙә милләтселәр халыҡты баш күтәрергә өндәй, тип тылҡынылар. Ә теге «мединститут эше»нә нөктә ҡуйырға, уны осларға иртәрәк булған икән әле.

* * *

Шымсылар Салауат һәйкәле янында боласыларҙы осрата алманы. Үтә лә йәшертен эш итә дошман — бер йүнле мәғлүмәт тә юҡ. Күрәһең, эште оҫта ойоштороғандар.

Мединституттың егерме бер уҡытыусыһы күптән именлек хеҙмәттәре күҙәтеүе аҫтында ине. Обком етәкселеге, Алламоратов үҙе был эште башланы, һәр уҡытыусыны ентекләп тикшерергә, эйе, береһенән дә күҙ яҙлыҡтырмаҫҡа ҡушты.

Һуңғы арала доцент Вәлиев менән Мазһар Ҡотлояровты ике ҡат саҡырттылар. Ҡәтғи бер ниндәй ҙә дәғүә белдермәйҙәр, бары әңгәмә үткәрәләр, тегеһен-быныһын белешәләр. Аптыраш: медицина институтындағы хәлдәргә именлек хеҙмәтенең ни ҡыҫылышы бар, вуз уҡытыусылары, үҙ башлыҡтары — ректорҙы яҡлап, хатты Үҙәк Комитетҡа яҙҙы бит! Обкомға ышанмағас, уның ғәҙеллегенә тамам өмөттәре өҙөлгәс, шулай иттеләр.

Башвоенкоматтың сәйәси бүлегендә иһә бөгөн кәңәшмә. Мәсьәлә асыҡ, ултырыш алдан әҙерләнгән сценарий буйынса бара. Бында, әлбиттә, милли мәсьәләләрҙе ҡуйыртмайҙар, Мәғҙән районы военкомының шәхси тәртибе тураһында ғына һөйләйҙәр.

Бүлек башлығы полковник Калашников иҫәп-хисап тота:

— Офицер иптәштәр, һуңғы ваҡытта бер-беребеҙгә талапсанлыҡты йомшарттыҡ, эшкә һалҡын ҡараш һиҙелә. Беҙ — хәрбиҙәр. Хәрбиҙәр ҡайҙа ла хәрби булып ҡалырға тейеш. Военкоматтар ҙа хәрби частың бер өлөшө, шуға ҡаты тәртип, хәрби әҙерлек булырға тейеш. Мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, ҡайһы берәүҙәр был талаптар менән иҫәпләшмәй, һалдаттарса әйткәндә, ҡайышты бушатып ебәрә. Мәҫәлән, Мәғҙән районы военкомы иптәш...

Полковник Ҡалашников ҡағыҙға ҡарамай, тамсы ла тотлоҡмай. Шиғыр уҡыймы ни! Дәлилле һүҙҙәр килтерә, бойороҡ юлдары яңғырай.

— Майор Сәғитов военкомат эшен үҙағышҡа ҡуйҙы, тирәһендәге иптәштәренә талапсанлыҡты кәметте. Ҡомиссариатта хәрби уҡыуҙар онотолған, һуғыш ветерандары менән бәйләнеш йомшаҡ, йәштәрҙе армия хеҙмәтенә әҙерләү ҙә хөрт.

«Сүп өҫтөнә сүмәлә», — тип уйлай майор. Тыштан тыныс күренһә лә, йәне әрней. «Был армияға күпме хеҙмәт итһәң дә, хеҙмәт итмәгән кеүек... Бөтәһен дә бер сыбыҡ менән ҡыуалар», — тип һығымта яһаны. Ғәжәп тә, көлкө лә. Ир була тороп башын эйеп ултыра, баҫып ҡына: «Юҡ, офицер иптәштәр, барыһы ла ялған, бында мине эшем өсөн түгел, ә милли тойғоларым, халҡыма тоғролоғом өсөн хөкөм итәләр», — тип һалмай. Ҡурҡамы, икеләнәме? Тағы, тағы тыйыла, башын аҫҡараҡ эйә.

Эҫе булып китте, әммә кителе төймәләрен ысҡындырырға ҡыйманы. Суд ҡыҙҙы, майорға ян-яҡтан төшә туҡмаҡ. Ул — түҙемле, кисерә, елкәһе ҡалын.

Тикшереү генәме, ысын суд был. Кешеләр үҙҙәре уйлап сығарған уны. Унда ла хаҡ, йә нахаҡ хөкөм итәләр. Имеш, «персональный» тип атала, ә асылында — суд, иптәштәр суды. Ҡабул ителгән ҡанунға буйһонмағандарҙы, дыуамалдарҙы аҡылға ултырталар. Саҡ ҡына бүтәнсәрәк баҫһаң, үҙеңсә ҡыланһаң, һин — енәйәтсе. Ҡеше талаусы, юл баҫыусы, ат ҡарағы, әлбиттә, тикшерелмәй — бындай судтарҙа күберәген идеялылар идея өсөн хөкөм ителә. Ҡараштарҙы үҙгәртергә, дөрөҫ юлға баҫтырырға!.. Ә судьялар кемдәр? Улар — ярты Аллалар, яҙа баҫмаҫ, артығын һөйләмәҫ әүлиәләр. Улар ҙа белә, эштең асылын аңлай, үҙ-үҙҙәренең йәне менән генә ҡалғанда, был идеяларҙың йәшәүгә хоҡуҡлы икәнен дә таный, әммә был хәҡиҡәтте ғүмерҙә лә ҡысҡырып, ярып әйтмәй. Әйтмәйәсәктәр ҙә! Ғәҙеллек бизмәне, йәмғиәттең яҙмышы — улар ҡулында, шуға улар ҡәҙимге тәртиптәрҙән, күнегелгәндән аша ла атлай алмай. Сығырға ҡыймай! Әгәр улар хөкөм ителеүсенең инанғанын асыҡтан-асыҡ таныһа, үҙҙәре лә шул уҡ язаға тарттырыласаҡ, ауыҙҙарынан ризыҡтары тартып алынасаҡ.

Ҡурҡ һин уларҙан, Урал балаһы, айбан, улар тырнағына бүтән ҡапмаҫҡа тырыш. Әле сценарийы алдан билдәле уйын ғына бара, ысынлап тотонһалар, әгәр ысынға китһә, былай һөйләнеп, ваҡыт үткәреп кенә ултырмаҫтар. Әйҙә, шулай ике яҡҡа ла ҡулай бит. Был суд та оҙаҡламай осланыр, шунан уның хаҡында берәү ҙә иҫләмәҫ.

Майор Сәғитов өндәшмәй. Бәлки, бынығы бөтәһе өсөн дә яҡшылыр. Ҡыҫынҡы күҙ ҡабаҡтарын тағы ла ҡыҫа төшә. Йәнәһе, әйтелгән һәр һүҙҙе һеңдерә, күңеленә яҡын ала.

Бында обком, Алламоратов, хатта теге бәлә листовкалар хаҡында ла ләммим, бары эш тураһында ғына... Башҡаһы хаҡында эскерһеҙ һөйләшеү буласаҡ әле. Улар хаҡында эс-бауырға инеп бүтән ерҙә аңлашасаҡтар.

Ҡаңәшмә аҙағында Мәғҙән военкоматы эше ҡәнәғәтләнерлек түгел тип табылды. Военком Сәғитов эшенән бушатылып, отставкаға оҙатылды. Хәрби чинын шул көйө ҡалдырҙылар, пенсияһы хеҙмәт хаҡының утыҙ проценты күләмендә билдәләнде. Хуш, армия! Майор Сәғитов бөгөндән — гражданкала!

* * *

Әммә майор Сәғитовтың «шәхси эше» осланмаған икән, яңы башлана ғына. Башвоенкоматтан һуң Именлек комитетына саҡырттылар. Генерал Марселовтың

үҙенә! Бындай хөрмәткә бик, бик һирәктәр генә лайыҡ. Эре балыҡтар ғына күҙенә салына уның.

Марселовты элек төрлө кәңәшмәләрҙә күргәне бар ине. Унда әллә ни күҙгә лә бәрелеп барманы, гражданский ине, әле өҫтөндә — генерал кителе, сырайы асыҡ. Һис тә йәшерен ойошма етәксеһе тип уйламаҫһың. Ҙур танаулы, ҙур күҙле.

— Майор, нишләп һеҙ бөтә донъяғыҙҙы ташлап йөрөйһөгөҙ, беҙгә эш өҫтәп...

— Мин, ул яҙмалар һеҙҙе шул тиклем ҡыҙыҡһындырыр, тип уйламағайным. — Сәғитов ҡунаҡханала обкомдың башҡорттарға мөнәсәбәте хаҡында яҙған хатын онотоп ҡалдырғанына нык үкенһә лә, хәҙер һиҙҙермәҫкә тырышты. Уны ул оҙаҡ, Үҙәк Комитетҡа төбәп яҙғайны. Ә ебәрергә өлгөрә алманы.

— Һеҙ — хәрби кеше, бының нимәгә килтереүен белгәнһегеҙҙер?..

— Юҡ, генерал иптәш, унда дәүләт именлеге мәсьәләләре күтәрелмәй — мин обком, уның халҡыбыҙға ҡаршы сәйәсәте тураһында ғына һөйләйем.

— Алламоратовты эттән алып, беткә һалып һүгәһегеҙ. Ул һеҙҙе судҡа бирһә... — Генералдың күҙҙәре тағы ла ҙурайып китте.

— Бирһен! Судлашырбыҙ...

— Һе... Ул обком секретары башына һинең менән судлашып йөрөмәҫ инде? — Генерал йәнә ҡайтауланы.

— Генерал иптәш, ғәфү итегеҙ, мине бер һорау борсой. Нишләп обком эшмәкәрлеге тураһындағы яҙмаларым һеҙҙе шул тиклем нык ҡыҙыҡһындыра, нишләп уны обкомда түгел, ә һеҙҙә тикшерәләр?

— Һе... Нисек инде беҙгә ҡағылмаһын! — Генералдың күҙҙәре тағы ҙурайҙы. — Унда һеҙ халыҡты уянырға саҡыраһығыҙ (восстание тип иҫәплә), әллә ниндәй иҙеү, милли ҡыҫым хаҡында һүҙ йөрөтәһегеҙ. Бөтә бәләләр башында обком, уның идеология секретары Алламоратов тора икән. Беҙҙең ойошма был саҡырыуҙарға, йәмәғәт тыныслығын боҙоуға йүнәлтелгән сығыштарға битараф ҡала алмай. Һеҙ бит — бунтовщик! Асылда халыҡты восстаниеға әйҙәйһегеҙ. — Генерал «восстание» һүҙенән ҡотола алманы. — Һеҙ халыҡты, обкомға ҡаршы аяҡландырып, бола күтәрәһегеҙ, республикала ығы-зығы ҡуптараһығыҙ, һуғыш ойошторорға самалайһығыҙ. Һеҙҙең «халыҡ яҡлаусыһы» булып сығыш яһауығыҙ бына ниндәй авантюраға килтереүе ихтимал.

— Ә ниңә халыҡтың хоҡуҡтары иҫәпкә алынмай, уның рухи ихтыяждары ҡәнәғәтләндерелмәй, милли культураһы үҫмәй? СССР Конституцияһы үтәлмәй, Лениндың милли сәйәсәте эҙмә-эҙлекле тормошҡа ашырылмай? — Майор Сәғитов та хәҙер генералдың ҙур күҙҙәренә туп-тура ҡараны.

— Майор, һеҙ хөкүмәт, партия эшмәкәрлегенә яла яғырға тотонаһығыҙ, аҡты ҡара итеп күрһәтәһегеҙ, эшләнгән эште юҡ тип бараһығыҙ, бөтә яҡшы нимәгә күҙ йомаһығыҙ. Һеҙгә бар нәмә ҡара булып күренә, бөтөн нәмә кире... Һеҙ буржуаз пропаганда һаҙлығына тәгәрәйһегеҙ, Совет дошмандары тирмәненә һыу ҡояһығыҙ. — Генерал тынманы. — Был — тотошлай буржуаз идеология. Һеҙ яйлап империализм ҡоралына әүерелә бараһығыҙ. — Генерал майорға бармағы менән төрттө. — Нәҡ һеҙҙең аша империализм халыҡтарыбыҙҙың дуҫлығын боҙорға, илдә бола ҡуптарырға, коммунизмды юҡҡа сығарырға ынтыла. Һеҙ — капитализм ялсыһы...

— Нимә?..

— «Райвоенком!» Әлбиттә, шундай ҙур вазифала ҡала алмайһығыҙ.

— Мин бөгөндән отставкала, генерал иптәш.

— Дөрөҫ, күптән кәрәк ине. — Генерал тағы күҙенең ағын күрһәтте. — Әйтегеҙ, майор, Мәғҙәндә кемдәр һеҙҙең менән бәйләнгән, тағы ниндәй хаттар, листовкалар әҙерләнегеҙ, ҡайҙа осрашаһығыҙ? Ойошмала нисә кеше?

— Был әңгәмәме, әллә һорау алыуымы?

— Нисек аңлаһағыҙ ҙа була...

Майор Сәғитов аптырап ҡалды.

— Мин берәү менән дә бәйләнеш урынлаштырманым, бер ниндәй ҙә йәшерен ойошма юҡ, генерал иптәш. Хатты ла бер үҙем яҙҙым.

— Яҡшы.

— Мин тарих менән шөғөлләнәм, Мәскәү университетының тарих-филология факультетын тамамланым.

— Яҡшы.

— Туған халҡымдың тарихы менән ҡыҙыҡһынам.

— Яҡшы.

— Халҡымдың быуаттар буйы азатлыҡ өсөн көрәше, милли иҙеүгә ҡаршы түҙеп тормауы мине һоҡландыра. Минең быға хоҡуғым барҙыр бит? Һоҡланырға, ғорурланырға? Был кемгә оҡшамай? Алламоратов ишеләргә! Уның эйәрсендәренә!

Сәғитов ҡыҙҙы, быны генерал килештермәне.

— Тарихты өйрәнеүегеҙ яҡшы, — тине ул, бер үк һүҙҙе ҡабатлап. — Шулай ҙа беҙ бөгөнгө менән йәшәйбеҙ. Һин — военком, тарих өйрәнеп кенә ултырмайһың. Бөгөн илең өсөн тарих нимә бирә? Китап уҡы ла ҡыуан, ә эш бармай — быuа нәмә.

— Мин, генерал иптәш, буласаҡ һалдаттарҙы халҡыбыҙҙың хәрби-патриотик йолалары нигеҙендә тәрбиәләйем, армияға әҙерләйем. Был минең, военкомдың, туранан-тура бурысы.

— Сәғитов иптәш! Беҙ һеҙҙең менән бик гуманлы мөғәмәлә итәбеҙ... — Генерал ниңәлер туҡтаны. — Юғиһә, беҙҙең башҡа сараларыбыҙ ҙа етерлек.

— Беләм, — тине Сәғитов көрһөнөп. — Яҡшы мөғәмәләгеҙ өсөн рәхмәт.

— Рәхим итегеҙ! — Генерал һүҙ бөткәнде аңлатып ҡалҡынды, шунан ҡарашы менән отставкалағы майорҙы ишеккә саҡлы оҙатып ҡуйҙы.

## Алтынсы бүлек

Көндәр ҡыҫҡара. Тағы илдән осар ҡоштар китә, ҡояш инде офоҡҡа яҡыныраҡ йөрөй, баш осонда һирәгерәк күренә.

Әүәлгесә йәшәп ята мединститут. Һәр йылдағыса студенттар яңы уҡыу йылына әҙерләнә. Буҙ турғайҙар сутылдаша, күктә — тыуған яҡ менән хушлашыусы торналар тубы. Моңһоу ғына ауаздары ишетелә. Бер ни ҙә үҙгәрмәгән кеүек ерҙә. Ошо йыл эсендә бөтәһе лә һәүетемсә аҡты: лекциялар, семинарҙар. Ректор Ислаховтың йөҙө нығыраҡ һурылды, хәҙер ул ғәмһеҙерәк тә тойола. Ҡыҙһа, оҙаҡ баҫыла алмай. Тауышы өҙләгә, хатта ҡысҡыра, талап итә башлай. Бәйләнсегерәк була бара ректор.

Ошо ярты йыл эсендә ул бихисап аңлатмалар яҙҙы. Тыштан күренмәһә лә, эстән институт ҡайнай. Имеш, доцент Вәлиев милләтсе булған икән, һарыҡ тиреһен ябынған бүре, партком ағзаһы ла булып торған. Обкомдың һуңғы партия конференцияһы ҡарарҙарында Мәғҙән районы военкомы эшмәкәрлеге

кире баһа алды. Именлек комитеты тарафынан тартып алған листовкаларҙа мединституттағы хәлдәр хаҡында ла һүҙ бара. Унда коммунист Вәлиев менән йәш уҡытыусы Ҡотлояров исеме лә аталған.

Обком Ислаховты вазифаһынан бәреп төшөрә алманы, ректор яңы уҡыу йылын әүәлге эш урынында ҡаршыланы.

Тышта ел ҡотора, ямғыр һибәләй. Эре-эре тамсылар асфальт йөҙөнә, тәҙрәләргә тупылдап тама. Ректорҙың да йәне тыныс түгел: шул тамсылар, гүйә, мейеһен тишергә самалай. Әллә ниндәй шыҡһыҙ көн. Ел йәшел үләндәрҙе ергә һылаштыра, тротуарҙағы ҡағыҙ киҫәктәрен әллә ҡайҙарға осора. Йүкә олондарын иңкәйтә, мөһабәт тирәктәрҙең түшенә барып йәнселә.

...Ректор ял көндәрендә үҙенең триптихы менән булды. Тәүгеһе — «Хыялый ҡыҙый» картинаһы. Уның хыял ҡошо. Көлә, йырлай. Бер ҡайғыһы, хәсрәте юҡ, донъяһы түңәрәк. Уйнай, көлә. Эйе, уның образы — ябай кеше түгел, ә ниндәйҙер мифик зат, рух. Иңдәрендә — ҡанаттар. Тормошҡа һөйөнөп баға, үҙ һөйөнөсөнә үҙе кинәнә. Донъя ла матур, йәшәү — бәхет. Шул уҡ ваҡытта тормошҡа, ығы-зығыға битараф, шау-шыуҙан өҫтөн тора. Уға ер ғәмдәре барыбер һымаҡ.

...«Ҡыҙ менән егет». Триптихтың икенсе өлөшө. Улар хәҙер — икәү: ҡыҙ донъяһына егет килеп инә. Хыялый бала, әйтерһең, ер балаһына әүрәй, тегеһе һин дә мин, бер ни менән дә иҫәпләшеп тормай, дорфараҡ та... Бына ул тормоштоң, мөхәббәтең тантанаһы. Тәбиғәт кешеләрҙе ишле итеп яратҡан. Ерҙә лә, күктә лә йән эйәһе ишен эҙләй.

Юҡ, профессорҙың картинаһында үҙәктә Маһира менән Зыя ғына түгел. Ҡыҙ менән егет — символдар. Художник аныҡ шәхестәрҙән айырылып, дөйөм фәлсәфә һөйләй, тормош хаҡында әңгәмә ҡора. Әйҙә, картинаны күргән һәр кем унда үҙен таныһын, үҙенә хас сифаттарҙы тапһын! Картинаның көсө, бөтә мәғәнәһе лә шунда: алда — ҡыҙ менән егет... Улар тормош тантанаһын бәйән итә, мөхәббәткә дан йырлай. Етәкләшеп алғандар ҙа алыҫ сәфәргә йыйынғандар... Әле юл башы ғына, киләсәк көндәре, үтер һуҡмаҡтары ла билдәһеҙ... Улар иҫһеҙ-хушһыҙ, бәхеттәренән иҫергән. Ирәйеп алғандар, хыял ҡосағына тарығандар. Улар бәхетен бер ни тыя, юлын киҫә, хыял һарайҙарын берәү емерә алмай.

Рәссам тормош тураһында легенда һөйләй. Хискә бирелә, символдар аша ерҙә бәхет барлығын, тормоштоң мәңгелек тантанаһын раҫлай. Йәшәүҙе яратырға өндәй, матурлыҡты күрһәтә. Әйҙә, бәғерһеҙлек бөтһөн, хаслыҡ еңелһен! Әйҙә, уның картинаһы рәхимһеҙҙәрҙең күҙен һуҡырайтһын, йөҙөн ҡарайтһын, әйҙә, көнсөлдәр шартлаһын, әйҙә, тағы бер ҡат йәшәүҙе данлайыҡ, тормошто яратырға өндәйек! Барыбер, барыбер ерҙә һөйөү бар бит ул, матурлыҡ бар, яҡтыға өмөт бар!

...Триптихтың өсөнсө өлөшө — «Әсә менән сабый». Үҙәктә — оло һынауҙар кисергән әсә, күҙҙәре һағышлы, йөҙө мәғрур. Өнһөҙ һәм бойоҡ. Иңенә күтәргеһеҙ һағыш йөкмәһә лә, бирешергә, сигенергә иҫәбе юҡ. Ут йотһа ла, тынын сығармай. Моғайын, ише изге яуҙа башын һалғандыр, ә ул һаман көтә, өмөтө һүнмәгән. Бәлки, ишенең төҫө булып сабыйы — ошо берҙән-бер йыуанысы ҡалғандыр. Ҡаршы иҫкән елдәргә йөҙөн ҡуя, ул дауылға ҡаршы барасаҡ, башын эймәй көрәшәсәк. Беләгендә — көс, күңелендә — ғәйрәт. Бары, бары бер генә мәлгә тынған, һағышҡа тарыған. Сабырлығы, өмөтө — сырайында, һаман ишен көтә, балаһының киләсәген уйлай. Зар, ыҙа — күҙҙәрендә, сәм, ғәйрәт — ҡымтылған ирендәрендә.

Ҡарашына оло донъя һыйған: өйҙәр, юлдар, күктәр, йондоҙҙар. Теле әйләнмәй, ә күҙҙәре һөйләй. Бер ниндәй уй, теләк юҡ кеүек, бөтә өмөтө — сабыйында.

Әллә нишләп профессор өмөтһөҙлөктө бөтөрә алманы. Сабый күҙҙәрендәге өмөтһөҙлөк — күңел яраһы. Төрлөсә варианттар яҙҙы, тағы... Уны алып ташлаһа, картинаның йәне юғалыр төҫлө. Ниндәйҙер мөһим әйбере юҡҡа сыға, картина төҫһөҙләнә.

Профессор үҙ-үҙенә ҡаршы бара алмай. Был, бәлки, уның тормошто үҙенсә күреүелер. Ул ижадта үҙ юлы менән бара, эштәрен күргәҙмәгә әҙерләй. Әйҙә, картина шул килеш ҡалһын!

Триптих әҙер тиерлек, бары ҡайһы бер төҙәтмәләр индерәһе генә ҡала, ә былай... оҙаҡ йылдар зиһенендә йөрөгәнен ҡағыҙға төшөрҙө, буғай, тарих сылбырына теркәне.

* * *

Ислахов, күргәҙмә асылмай тороп, уны тамашасыға күрһәтмәү яғында ине. Ғәҙәттә, күргәҙмә әҙерләнә, музей хеҙмәткәрҙәре залға журналистарҙы үткәрә... Шулай яйлап мәҡәләләр баҫыла, уҡыусылар рәссам ижады менән таныша тора.

Әлбиттә, мединститут ректоры күргәҙмәһе тураһында хәбәрҙәр рәссамдар берләшмәһе етәкселәренә лә барып етте, беҙ ҡапсыҡта ятмай. Профессор Ислаховтың ижад менән шөғөлләнеүе күптәргә мәғлүм ине; баш ҡаланың мәҙәни әһелдәре, яҙыусылар, артистар ишетә-күрә йөрөй. Ректорҙың ҡатыны Ҡәфиә ханым — күренекле артистка. Бәлки, уның аша ла күптәр Ислаховтың ижад менән булашыуын беләләр? Ни тиһәң дә, билдәләнгән көндө халыҡ күргәҙмә залына ағылды. Арҙаҡлы рәссамдар, фән әһелдәре — ректорҙың хеҙмәттәштәре, яҙыусылар, артистар — бөтәһе лә ҡуҙғалды, был күргәҙмәгә ҡыҙыҡһыныу уғата ҙур ине.

Йәмәғәтселек ишетеп-белеп тора: мединститут тирәһендә ҡуйырған ғауға тураһында ла хәбәрҙар улар. Мәғлүмәтлеләр ректор менән обком араһындағы бәхәс хаҡында ла белә. Ректор иһә ҡыҙған табаға май өҫтәй төҫлө.

Иң тәүҙә күргәҙмә хужаһы менән артистар — Ҡәфиәнең дуҫ-иштәре килеп күреште, аҙаҡ рәссамдар берекмәһе етәкселәре...

—Ҡотлайбыҙ, Зыя Ислахович!

—Күргәҙмә — ҙур еңеү ул!

Барыһы ла ҡотлай, сәләмләй. Бында бар Өфө йәмәғәтселеге, бар медицина институты хеҙмәткәрҙәре йыйылған! Танылған яҙыусылар, фекерҙәштәр, көрәштәштәр: доцент Вәлиев менән Латиповтар килеп күреште. Ихлас йылмайыштылар, рәссам Ислаховҡа уңыштар теләнеләр.

—Һо, үҙебеҙҙең ректор — рәссам! — Профессор Таһиров күренде, әллә ҡайҙан һөрәнләп килә. — Маладис, Зыя Ислахович!

Таһиров артынан профессорҙар Бикбулатов, Мөхәмәтов, Лазарева, Герасимов күренде.

Ҡапыл залда өлкә комитетының фән һәм юғары уҡыу йорттары бүлеге мөдире менән идеология секретары Алламоратов иптәш пәйҙә. Ул етеҙ, шәп-шәп атлай, тура күргәҙмә авторына яҡынлай.

— Ҡайҙа, тим, үҙем барып күрәйем әле! Ҡотлайым, Зыя Ислахович! Көтмәгәйнем. — Обком секретары йылмайҙы, хәбәрен яуҙырҙы. Бындай мәлдә ауыҙ йомоу килешмәй шул — ниҙер һөйләргә, тирә-яҡтағыларҙы ни менәндер албарғытырға кәрәк. Өндәшмәй ҡалыу — ситуация ебен бушатыу.

— Беләһегеҙме, Зыя Ислахович... — тип серен сисә обком секретары. — Мин дә буяу иҙештерәм бит, картиналар яҙам!

— Шулаймы? — тип аптыраған булды Ислахов, гәрсә үҙе секретарҙың был шөғөлө хаҡында күптән ишетһә лә.

— Шәп, шәп! — тип маҡтаған булды Алламоратов художникты. — Ә бынышы, күккә ашыусы ҡыҙ образы, кемгәлер тарта бит. Ул, рәссам уйынса, йыйылма образ, мифик образ, шулай ҙа бигүк мифик та түгел... Күккә ынтыла, тик бөтә ғәме — ерҙә.

Обком секретары менән бүлек мөдире күргәҙмәлә оҙаҡламаны. Уларҙы оҙатҡас, сәнғәт белгестәре, художниктар картиналарға етди анализ бирҙе; халыҡ бигерәк тә шул триптихҡа диҡҡәт итте.

— Был әҫәр үҙенең масштаблығы менән күңелде биләй, рәссам алдына оло маҡсаттар ҡуйған, ошолай ул кеше яҙмышы, йәшәйеш тураһында уйлана. Автор тамашасыны тынып, бер урында туҡтап ҡалырға мәжбүр итә. Ваҡыт ағышы өҙлөкһөҙ, ә ысынбарлыҡ — ғәжәп бер фәлсәфә: бәндә, ҡабаланма, сабыр ит саҡ ҡына, ығы-зығынан яҙып, булмыш, киләсәк хаҡында фараз ит!

Сәнғәт белгестәре, фән кандидаттары һәр ҡайһыһы үҙ фекерен белдерҙе. Был үтә лә мөһим, фәһемле ине авторға. Сәнғәт донъяһы әһелдәре профессор ижадына ғәҙел баһа бирә, һәр ҡайһыһы тәғәйенен әйтә. Күберәген:

—Ысын рәссам, рәссам-философ, — тигән нарыҡтар яңғырай.

—Был сәнғәтебеҙҙә яңы һүҙ, үҙенсәлекле һүҙ!.. Художниктың тормошҡа, йәшәйешебеҙгә фәлсәфәүи ҡарашы!

— Триптих — художниктың иң ҙур уңышы! — тип дәлилләй рәссамдар берләшмәһе рәйесе. Ниһайәт, уның да теле сиселде, был рәсми ойошма вәкиле тамам туғарылды — картинаны маҡтап туймай. — Рәхмәт, үҙегеҙҙе ысын күңелдән ҡотлайым!

* * *

Профессор Һөйәрғолов тураһында институтта төрлө хәбәрҙәр йөрөнө. Имеш, ул аҡылдан яҙған, ректор Ислахов өйөнә барып ингән. Имеш, янъял ҡуптарған, уны тотоп-аймап психиатрик диспансерға оҙатҡандар. Мәскәүҙә үк башына ут ҡапҡан, купеға транспорт милицияһын саҡыртҡандар...

Икенсе фараз буйынса, профессорҙы әлеге лә баяғы шул «Өфө» ҡунаҡханаһында күргәндәр. Дуҫ-иштәре менән эйәртенешеп эсеп йөрөгән.

Оҙайлы тотҡонлоҡтан һуң әҙәм бәйҙән ысҡына. Ҡайҙалыр барғыһы, ниндәйҙер батырлыҡ ҡылғыһы килә. Һөйәрғолов ни бары бер-ике ай ғына кеше күҙенә күренмәне ләһә.

«Өфө»лә улар йәйелеп гәпләшеп ултыра. Завуч Баҡаев дуҫы, физрук Хәсәнов... Арала элекке дуҫ-иштәрҙән ҡурайсы Ғафуан ғына юҡ.

Дуҫтар ҡунаҡхананы дыу килтерәләр, профессор, ниһайәт, иректә, ә ҡурайсы Ғафуан ҡайҙа?

* * *

Ғафуан Алсынбаевҡа өс йыл бирҙеләр. Судтан һуң ул тура Өфө төрмәһенә оҙатылды. Төрмәлә пахан* башҡорт, имеш. Ғафуан, шуның менән танышып, хат яҙырға рөхсәт алды. Ғаиләһенә, таныш егеттәргә яҙҙы, уларҙан яңы адвокат яллауҙарын үтенде. Ул мотлаҡ урыҫ булһын! Аҡсаны йәлләмәгеҙ, тип ныҡыны.

* Пахан — төрмә жаргоны: лидер, өҫкә сыгыучы.

Ғафуан бер ваҡытта ла өмөтөн өҙмәне, көрәшен туҡтатманы. Хат артынан хат яуҙырҙы иреккә, Верховный судҡа кассацион ялыу бирҙе. Бүтән тотҡондар баш эйеп йөрөй, үҙ яҙмыштарына күптән күнгән һымаҡ. Ул бер ваҡытта ла өмөтөнән яҙмаясаҡ. Туҡта, һөйөнмәй тороғоҙ, баҡайҙар! Төрмәгә тыҡтыҡ та ҡотолдоҡ, үҙебеҙ рәхәт сигәбеҙ, тип уйламағыҙ!

«Баштрансгаз» управляющийы Фәнис Нәсимов ғәҙел адвокаттар тапты, аҡсаһын, ҡурайсы остазы өйрәткәнсә, йәлләмәне.

— Дачағыҙға берәй төрлө ярҙамым тейер, техника — ҡулда, — тип ебәрҙе ҡеүәтле трест етәксеһе.

...Судтан һуң Ғафуан Алсынбаевты Өфө төрмәһенән Мәләүез колонияһына күсерҙеләр. Верховный суд ҡарары, ғәйепләнеүсе уйынса, ғәҙелерәк булды: Алсынбаевты ун һигеҙ айға хөкөм иттеләр. Был инде үҙенә күрә еңеү ине.

— Беҙҙә лә ҡәҙимге тормош ҡайнай. Әгәр ғәйебегеҙҙе ихлас танып, йәмғиәтебеҙ алдында аҡланырға теләһәгеҙ, әүәлге көнөгөҙгә — азат тормошҡа ҡайтырға уйлаһағыҙ, рәхим итегеҙ. Беҙ һеҙгә бындай мөмкинлек бирәбеҙ, ҡулыбыҙҙан килгәнсә ярҙам итергә әҙербеҙ. Йәмғиәт алдында гонаһтарығыҙҙы юйығыҙ, эшләгеҙ, уҡығыҙ.

Төрмә начальнигының сәйәсәт буйынса урынбаҫары «һыуҙы ҡойҙо» ғына.

— Беҙҙә шәп китапхана бар, клубҡа рәхим итегеҙ. Үҙебеҙҙең һәүәҫкәрҙәр түңәрәге эшләй. Һеҙҙең арағыҙҙа таланттар ҙа барҙыр, моғайын. Ҡемдәр баянда уйнай?

Икәү ҡул күтәрҙе.

— Ҡемдәр йырлай?

Тағы өсәү алға сыға.

Уны, кәүҙәһенә ҡараптыр, 54-се бүлеккә ҡуйҙылар. Был бүлек «старик»тарға яҡшы таныш. Ҡөҙгө ырашҡыла, ыжғыр елдә төркөмдө урман ҡырҡырға ебәрәләр. Урман — урман инде, зектар — зек. Ҡеше саҡ ҡына иркенлек тойоу менән йыртҡысҡа әйләнә. Бүрене урман эсенә ебәрәләр, ул урманда — хужа. Был хәл менән төрмә башлыҡтары ла килешеп бөткән.

Ғафуанды 54-се бүлектән шул урынбаҫар ғына ҡотҡарҙы.

— Әйҙә, һин йырсы бит.

Башҡалар урманға китте, ә Алсынбаев төрмә начальнигы урынбаҫары артынан эйәрҙе. Урынбаҫар ҡурайсыны төрмә клубы етәксеһенә беркетте. Ғафуан көндөҙ — шунда. Үҙешмәкәр түңәрәк эшен яйға һалды. Репетициялар, концерттарға әҙерләнәләр. Яңғыҙ ҡалған саҡтарында күңеле моңлана, һағышлана. Йәнен баҫа алмаған сағында ҡурайын ҡулына ала.

Аҡҡынайың яҡшы, үҙең ҡупшы —<br>Һай ир-егеткәй генәһе...

* * *

Герасимовтың хәҙер ваҡыты күп, йәмәғәт эштәренән бушаны, урынына Титовты партком секретары иттеләр. Хәҙер Герасимовҡа диссертацияһын ҡайғыртырға кәрәк. Ул диссертацияһын күптән шефы — Рәжәповҡа илткәйне, дүрт-биш айлап ваҡыт үтеп киткән. Ығы-зығы араһында онотоп та киткән. Хәҙер шуны белешергә булды.

Ҡабул итеү бүлмәһендә министрҙы ике сәғәтләп көттө. Рәжәпов бушамай, кабинетынан кеше өҙөлмәй, Герасимов түҙә. Секретарша турһайып тик ултыра. Тышта — йәмле көн, бында, таш йортта, ҡара һалҡын. Берәү сират көтә, берәү тегендә кешенән ҡотола алмай.

Тағы ярты сәғәт уҙа.

— Ә-ә, һинме? — ти министр, аптырап.

— Мин, диссертация тураһында һөйләшергә ине. Ике сәғәттән ашыу көтәм...

— Совминға саҡырттылар бит әле, бик ашығам, — тине министр, үкенеп.

— Минең диссертация...

— Диссертация... — Министр ҡаңғырҙы. Аҙаҡ үҙ-үҙен ҡулға алды. — Ярар, ҡарармын, әле өлгөрә алманым.

Министр китте, ә йәш уҡытыусы ете юл сатындағылай торҙо. Ни тиергә лә, ни ҡылырға ла белмәне.

...Һаулыҡ һаҡлау министры Рәжәпов һүҙендә торҙо, әлбиттә: шәкертенең диссертацияһын әйләндереп-тулғандырып ҡараны. Унан киҫкен генә ҡалҡынды ла ҡаршыһындағы сейфын асып, ҡалын папканы кире шунда ырғытты.

— Ятһын әле биш-алты йыл — ашарға һорамай! — тине үҙ алдына.

* * *

Ысынында Һөйәрғолов Ислаховтарға баҫышып барҙы. Ҡыҙарынған, күҙҙәре аларған. Хәс тә аҡылын юйған бәндә. Ишек асылыу менән ректорҙың йөҙөнә йәбеште:

—Һин ҡартайғанһың, һинең йырың йырланған — вазифаңдан китергә күптән ваҡыт!

—Һөйәрғолов, был мәсьәләне тупһала тикшермәйҙәр!

—Ә-ә, шулаймы, тупһамы? — Һөйәрғолов зәһәрләнде, әтәсләнеп, пинжәге төймәләрен ысҡындырып ебәрҙе. Өй хужаһы өҫтөнә менеп килә. — Хәҙер тупһамы? Мин — ректор, белдеңме, мин тупһала йөрөмәйем!

—Һөйәрғолов, тынысланығыҙ! — Ректор тәртип талап итте.

— Һеҙ миңә аҡыл өйрәтәһегеҙме? Мин һеҙгә һаман проректормы? Юҡ, мин — ректор, мин законный ректор! Бюро ҡарары менән! Обком да, Алламоратов та мине яҡлай!

Шул саҡ подъезда ректорҙың ҡатыны пәйҙә булды, ул — театрҙан, спектаклдән һуң. Ишек алдындағы ғауғаға аптыраны: ире менән теге проректор Һөйәрғолов көрмәкләшә; Һөйәрғолов тигәндәре ишек яңағына таянып алған да ни алға, ни артҡа үтмәй серәшә.

— Мин — ректор, Ислахов, һин бында әҙергә-гөлбәҙер ҡайттың. Институтты беҙ Тереғолов, Улич-Голубовичтар менән тергеҙҙек, һин — рәхәткә...

— Һеҙ нишләйһегеҙ? — Ҡәфиә ханым ике араға ташланды. — Нишләп кеше өйөнә баҫышаһығыҙ? Ҡитегеҙ! Нишләп ректорға йәбешәһегеҙ?

— Мин...

— Һеҙ кем?

— Мин — ректор Һөйәрғолов! — Янъялсы сәсәне. — Ислахов Мәскәүҙә йөрөнө, беҙ институтты күтәрҙек. Даны — уға, ордены... Һин миңә юл бирмәнең, һин минең турала министерствоға ошаҡ ташының, унда мине яманлап һөйләгәнһең; һин, һин — ғәйепле! Һин бөтә тормошомдо боҙҙоң...

—Милиция саҡыртам! — Ректор ҡатыны асырғанып ҡысҡырҙы.

— Хәҙер китәм, киткәнсе әйтеп китәм. — Һөйәрғоловтың ирендәрендә аҡ күбек күренде. Ислаховҡа төбәлде: — Һин — пенсионер, ректор урынын бушат! — Ул һөрлөгөп китте, ауыҙ ситенән һаман күбек аға. Ҡарғана, бар донъяға үс, әр яуҙыра.

* * *

Алламоратов үҙе лә рәссам, ғүмере баҡый ҡылҡәләм менән булаша. Әлбиттә, был хаҡта дан таратырға, кешегә бигүк һөйләп барырға ашыҡмай. Ҡешеләр бот сабып көләсәк, бигерәк тә түрә-ғара оҡшатмаҫ. Улар халҡы ундай эш менән шөғөлләнгәнде бик өнәп тә бармай. Дөрөҫө, ғәфү итмәйҙәр. Ижад кешеһе — шикле кеше, бер таҡтаға баҫмай, партия, юғарылағы етәкселек күрһәтмәһен дә үтәмәй. Бер һүҙ менән әйткәндә, беҙҙең кеше түгел, номенклатура этикетын һис кенә лә һанға һуҡмай.

Ә Алламоратов барыбер ижад итә, барыбер ҡуймай. Партияның тоғро һалдаты булһа ла, гармунда уйнай, шундай кеше. Һүрәт төшөрөүен дә һирәктәр генә белә. Әле профессор Ислаховтың күргәҙмәһенә барыуы ла шәхси ҡыҙыҡһыныуына бәйле ине. Рәссам рәссамдың хәлен белешә, ижад емештәре менән таныша. Әлбиттә, ул идеология секретары, ижади күргәҙмәләргә йөрөй ала.

Алламоратов Ислахов күргәҙмәһенән ҡара көйөп ҡайтты. Юҡ, һис тә йәне баҫылманы, ниндәйҙер бер эске ҡәнәғәтлек тойманы. Күңелен көнсөллөк ҡорто кимерә, эйе, эйе, күңеленең иң төбөндә ниндәйҙер ҡәнәғәтһеҙлек, ниндәйҙер килешмәүсәнлек ята. Профессор ҙа рәссам икән, олонан ҡубып шәхси күргәҙмә ойоштороған!

Был Ислахов менән әкәмәт хәлдәргә тарынылар бит. Былдайҙың булғаны юҡ ине: обком бер ректорҙы аҡылға ултырта алмай! Эйе, эйе, шундай тарих: обком бюроһы ҡарар сығара, ә Мәскәү ҡаршы төшә... Мәскәү министрлығы обком ебәргән кешене ректор итеп раҫламай, шулай аяҡ сала. Хәтәр.

Бында обком секретарының да йүнһеҙлеге күренә түгелме? Был хаҡта тегендә, Мәжлестә лә борсолалар, эшлекле сара күреүҙе талап итәләр! Алламоратов, Башҡортостандың баш идеологы, һүҙен һүҙ итә алманы.

Алламоратов — сәмсел кеше. Юҡ, был башбаштаҡлыҡҡа обком юл ҡуймаясаҡ, һис ҡасан да Алламоратов бының менән килешмәйәсәк! Ғүмерҙә былай булмаясаҡ! Намыҫланды, ғәрләнде баш идеолог. Быны еңелеүе тип таныны.

* * *

Ысынлап та, Мәжлестә ғүмерҙә булмағанса шау-шыу ҡупты. Тәү ҡарамаҡҡа, етди, сабыр кешеләр... Дәрәжәле ҡыланалар, ҡыҙып-туҙып китмәйҙәр. Алламоратовты урынынан бушатырға уйлап бөттөләр. Алламоратов — йомшаҡ, Алламоратов — либерал: ул обком ҡарарын үтәмәй! Ярай, министрлыҡ профессор Һөйәрғоловҡа ҡаршы икән, ти... Бында ла обком секретары үҙе ғәйепле: мединституттың яңы ректоры вазифаһына «шәп» кеше һайлаған!

— Быны ғәфү итеп булмай! — тинеләр... Әммә Мәжлестең башҡа сараһы юҡ: үҙегеҙ бешергән бутҡаны үҙегеҙ йыпырығыҙ, үҙегеҙ тыуҙырған проблемаларҙы үҙегеҙ хәл итегеҙ! Һеҙгә, хатағыҙҙы төҙәтер өсөн, һуңғы мөмкинлек бирелә, баш идеолог!

* * *

Алламоратов Өфөгә ҡайтыу менән һөйәрғоловсыларҙы үҙенә йыйҙы. Обком секретары һәр ваҡыттағыса йыйнаҡ, етди.

— Ағай-эне, обком бюроһы ҡарарын берәү ҙә юҡҡа сығармаған: Һөйәрғоловтан һуң да бер ни үҙгәрмәй, маҡсат бер — Ислаховты урынынан бәреп төшөрөү!

Мединститут уҡытыусылары партком секретары Герасимов урынына Титовтың тәғәйенләнеүен уңай тип баһаланы. Титов ыңғай кеше, сыуаш егете шикелле киреләнеп тормаҫ, обком һүҙенән сыҡмаҫ. Текмәне осратһа, текмәне емерә, һыу баҫһа, ташҡынға ҡаршы йөҙә. Бер эштән дә ытырғанып тормай. Республика китапханаһы директоры Нөркәев тә шундай кеше.

Алламоратов уның менән аҙаҡҡа ҡалып, оҙаҡлап ултырып кәңәшләште. Директор был эштә иң ҡулай кеше булып сыҡты.

* * *

Доцент Мазһар Ҡотлояров нисек тә башланған эшен ослап ҡуйырға ашыҡты. Уға нисек тә монографияһының аҙағына етергә кәрәк. Баш осонда болоттар ҡуйырғандан-ҡуйыра: әле именлек комитеты, әле обком...

1957 йыл. Был йылға ла туҡталып китмәй булмай. Ил етәкселеге алмашына, сәйәсәт бер ни тиклем үҙгәрә, әммә түрәләрҙең интеллигенцияға һауалы мөнәсәбәте шул уҡ килеш. Ил етәксеһе Хрущев Сталин шәхесе культы хаҡында сафсата һатты, ә үҙе, күргәҙмәгә барып, художниктарҙы пыр туҙҙырҙы. «Был дөрөҫ түгел. Был беҙҙең социалистик тормошобоҙҙо дөрөҫ яҡтыртмай», — тип бәйләнә ил башлығы модернистик, сюрреалистик, экспрессив ижад емештәренә.

Унан да бигерәк, бүтән туғандаш халыҡтар теленә, мәҙәниәтенә ауыр ҡарай икән, урыҫ теленән башҡа телдәрҙе, мәҙәниәттәрҙе тыныс ҡабул итә алмай. «Бер илдә бер тел, бер мәҙәниәт булырға тейеш!» — тип лаф ора. Тора-бара бер илдә бер генә милләт йәшәргә тейеш. Ул — совет милләте!

Егерменсе быуаттың алтмышынсы йылдарында бөтә гәзиттәрҙе лә урыҫ теленә әйләндереүгә ынтылыш күҙәтелде, мәктәптәрҙе лә яйлап урыҫ телендә уҡытыуға күсерә башланылар... Был әллә Рәсәй эсендәге урыҫ булмаған халыҡтарҙың өн-тын алышын һынап ҡарау булдымы икән? Нисә ҡабат — шул уҡ тырма, шул уҡ ынтылыштар...

Интеллигентлыҡ, әлбиттә, туған телгә, туған мәҙәниәткә бәйле, зыялы иң элек үҙенең туған халҡына, уның хыял-ынтылыштарына, теләк-зарҙарына хеҙмәт итә. Башҡорт интеллигенцияһын башҡорт халҡының уй-теләктәренән айырып ҡарап булмай, интеллигенция ҡайҙа — халыҡ та шунда. Шулай булғас, башҡорт зыялыларының яҙмышы иң тәүҙә шул халыҡтың уй-хыялдары менән бәйле.

Доцент ауыр һуланы. Ниһайәт, тамам. Ғалим оло эшенең осона сыҡты. Бирәйбә.

* * *

...Китапхана директоры яҙмаһынан: «БДМИ уҡытыусыһы М.Ҡ.Ҡотлояров 22 июндә республика китапханаһында янъял ҡуптарҙы. Совет музыкаһы кисәһе үткәрелергә тейеш ине. Ҡотлояров кисә урыны — уҡыу залынан сығырға баш тартты. Йәнәһе, уҡыу залында студенттар, аспиранттар уҡып ултыра, бер ниндәй ҙә концерт ҡуйорға ярамай, киреһенсә, тыныслыҡ кәрәк. Сәнғәт урыны — филармонияла!

Беҙ, китапхана етәкселеге, уҡыу залына күберәк кеше һыя, шуға кисәне унда үткәреү урынлы булыр, тигәйнек. Ҡотлояровҡа икенсе бүлмәгә күсергә тәҡдим иттек, ә ул китапхана директоры, кисә өсөн яуаплы кешеләр менән әрепләшеп, кисәнең иғланын йыртып ырғытты.

Институт етәкселәренә, өлкә комитетҡа коммунист уҡытыусының тәртибенә баһа биреүҙәрен үтенәбеҙ».

* * *

Күргәҙмәнән һуң күп тә үтмәй, уны ябырға йыйыныуҙарын ишетте Ислахов. Әкәмәт.

Сәнғәт музейы директоры эштең тығыҙлығына, экспонаттарҙың күплегенә, урын булмауына һылтана, әммә профессор был күрһәтмәнең мәҙәниәт министрлығынан башҡа сығарылмауын аңлай. Музей — министрлыҡ балансында, ә министрлыҡ обкомдың идеология секретары Алламоратовҡа буйһона. Күргәҙмә Алламоратовҡа оҡшамаған булып сыға, дөрөҫө, уның һарыуын ҡайната.

Профессор ҡабат идеология секретарына китте. Ике ҡорҙаш, ике фронтовик, ике рәссам. Ислахов ярһыған.

— Алламоратов, әйтегеҙ әле, ниңә сәнғәт әҫәренә оронаһығыҙ? Мин, ярай, мин һеҙгә оҡшамайым, ти, ә ниңә картинаға тейергә?

—Картина менән уның хужаһы айырыламы, Зыя Ислахович? Ижадсы менән ижад берлеге хаҡында әйтәм...

—Минеңсә, уларҙы барыбер бергә ҡушып булмай. Һеҙ минән үс алаһығыҙ, күңелегеҙ өтөлә. Ҡулығыҙҙа власть та булғас, нимә эшләргә белмәйһегеҙ, һеҙ бәләкәй генә енәйәтсе — кеҫә буры. Күршегә нисек булһа ла аяҡ салырға! Ниндәйҙер этлек эшләргә, көндәштең эшен боҙорға, кәйефен ҡырырға! Бынығын һеҙ булдыраһығыҙ.

—Был — буш хәбәр.

—Улайһа, мин бушҡа һеҙҙең ваҡытығыҙҙы алып ултырам булып сыға?..

—...

—Һеҙ — ваҡ йәнле кеше, һеҙгә нисек кенә булһа ла үс алырға, ниндәй ерҙән булһа ла семетергә!.. Йән көйөүегеҙҙе шулай баҫаһығыҙ, шул этлектәрҙән үҙегеҙгә лә тәм табаһығыҙ, шул — һеҙҙең шөғөлөгөҙ! Ҡамасауларға, үткәрмәҫкә, тыйырға; булғанды юҡ итергә, бысраҡҡа буярға!

— Етте, бында обкомда һүҙ бутҡаһы бешереп ултырырға... — Обком секретары урынынан тороп китте.

* * *

Ғафуан Алсынбаев Верховный судҡа, йәнә КПСС Үҙәк Комитетына хат яҙҙы.

Төрмә начальнигы урынбаҫарының иң ышаныслы кешеһенә әүерелде: клубта бөтөн сараларҙы үҙе ойоштора. Сценарий яҙа, шиғырҙар, йырҙар сығара.

Ер аҫтында, төрмәләрҙә йөрөп,  
Дуҫтар, һеҙҙе йәнәш тоям мин;  
Тыуған илем, халҡым — күңелемдә,  
Уй-хистәрҙә йөҙәм, уяу мин.

Әкәмәт хәл булды: Өфө төрмәһендәге теге паханды бында, Мәләүездә, тағы осратты. Ул Мәләүез район советының элекке управляющийы икән. Айырым түшәк, үҙенә генә тейеш айырым мөнәсәбәт. «Ҡурайсы, мин бында гражданскийҙан кәм йәшәмәйем, бер заман, Хоҙай ҡушһа, иреккә лә сығырбыҙ, ә теге битһеҙҙәр — гүр эйәһе».

Пахан айырым ашай, ул 54-се бүлек тотҡондары кеүек эшкә лә йөрөмәй. Ғафуан менән шулай дуҫлашып киттеләр.

— Аҡса бөтәһен дә эшләтә, — ти ул. — Ә аҡса беҙҙә бер муҡса. Төрмәнән сыҡҡас та етер. «Ҙур ерҙәгеләр» ҙә мине онотмай.

Пахан башҡалар өсөн ултыра икән, шуныһын сер итеп кенә дуҫына тиште.

— Пустырнаков менән Ғәзиевты ҡапланым. Пустырнаков ит комбинаты директоры ине. Документтарҙы гел үҙ исемемә тултырҙым, улар ситтә ҡалды — ит комбинаты ҡағыҙҙарын райсовет аша ла үткәрҙем. Пустырнаков үҙенә ҡул һалды, ә мине, күҙ буяр өсөн, төрмәгә тыҡтылар, министерстволағылар тороп ҡалды. Уларҙы мин ҡаплайым, улар — мине.

Тора-тора ла тағы теге хәбәрен оҙайта пахан:

— Беләм, улар мине ташламаҫ, шулай ҙа ҡурҡыта. Донъяһы аҫты-өҫкә килеп, «беҙ — донъя кендеге» тип йөрөгәндәрҙе лә туҙҙырып ташламаҫмы? Унан миңә лә — каюк. Шулай ҙа өмөт өҙмәйем әле. Ваҡыт үтә, һалдат йоҡлай — хеҙмәт бара. Ә әлегә... Әлегә йәшәйбеҙ әле, брат, йәшәп ҡалабыҙ. Әйҙә, йырыңды һуҙ, башҡорт!

Пахан бында иҙән һепереүсе хеҙмәтендә, шунан башҡа уға ауыр эш йөкмәтмәйҙәр, ә Ғафуан Алсынбаев хәҙер — клуб мөдире кеүегерәк.

Ғафуан пахандан Ғәзиевтар тураһында ла һорашты. Мәләүез райсоветы рәйесе Ғәзиевҡа ҡыҙын мединститутҡа индерергә кәрәк була. Ул таныш-белештәре аша институт проректоры Һөйәрғолов менән һөйләшә. Алдан килешеү буйынса социалистик ярыш алдынғылары өсөн районға ҡайтҡан ике «Волга» еңел машинаһы Өфөгә оса. Эш майланған кеүек бара. Бөтә документтар ҙа пахан ҡулы аша үтә, ҡағыҙҙар ҙа уның исеменә тултырыла. Ғәзиевтың, йәнәһе, бында бер ҡыҫылышы ла юҡ.

Өфөләге профессор Һөйәрғоловтың дачаһына мебелде лә пахан үҙ ҡулдары менән тейәшеп ебәрә. Ит комбинаты директоры Пустырнаков комбинатҡа ҡайтҡан мебелде проректор Һөйәрғолов дачаһына оҙатып барыуҙан баш тарта — пахан иһә йыбанмай үҙе китә. Пахан, ысынлап та, шул эшендә алмаштырғыһыҙ кеше була.

— Пустырнаков үҙ-үҙенә ҡул һалғас, шик Ғәзиевҡа төштө: бөтә был әкәмәттәр район ойошмаларының социалистик ярышы өсөн яуаплы етәксе ҡыҫылышынан башҡа эшләнмәгәндер, тип уйланылар. Эйе, документтарҙа — Пустырнаков менән райисполком управляющийының ҡултамғалары!

Пахан ары дауам итте:

— Тикшереү барышында бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөмә алдым, йәнәһе, Ғәзиев бер ни белмәгән дә, бер нимә лә күрмәгән, бары шеф мин килтергән ҡағыҙҙарға күҙ йомоп имза һалып ултырған!..

Ғафуан яңғыҙы ҡалғас, тағы ҡурайына тотона. Уны енәйәтсе тип һанайҙар — ул көндәштәре этлеге менән бында килеп ҡапты бит, әгәр ҡотолоп сыҡһа...

Ул үҙен иленән нахаҡҡа һөрөлгән йыраусы Буранбай һымаҡ күрә. Буранбай кеүек, ул да илен ташлап, ҡайҙалыр аҙашып йөрөй. Ҡайта алмай иленә, етә алмай азатлыҡ тигән ғәзиз моратына.

* * *

...Ректор татылдыҡ ҡатынға һүҙ ҙә ҡыҫтыра алмай.

— Беләм, обком менән борсағығыҙ бешмәй, шуға минең иремде — Ҡотлояров Мазһарҙы эштән ҡыуалар, уға фатир бирмәйҙәр. Һеҙҙең үсте сотрудниктарығыҙҙан алалар. Ҡара эт бәләһе — аҡ эткә!

Ректорҙың башы әйләнеп китте, күҙ алдары ҡараңғыланды — шуны ла белмәй йөрөһөнсө! Ҡемде ҡыуалар, кем ни эшләгән — уға барыбер, йәнәһе, әле бисәһе кабинетына килеп, тауыш күтәреп йөрөмәһә...

Ҡоридорҙа аяҡ тауыштары тынды. Ҡотлояровтың сибәр бисәһе иҙәндән түгел, гүйә, тыҡ-тыҡ баҫып уның мейеһенән атлап уҙҙы.

— Һеҙ обком менән боҙолошҡанһығыҙ, обком һеҙгә ҡаршы, шуға һеҙҙең уҡытыусыларығыҙға фатир бирелмәй...

Ректор саҡ айныны. Телефонға йәбеште. Башта кадрҙар бүлегенә шылтыратты.

— Эйе, Ҡотлояров, Мазһар Ҡотлояров! Философия кафедраһы доценты!.. Бер ниндәй ҙә документы юҡ? Немедленно кафедраға шылтыратығыҙ. Вәлиевҡа!.. Вәлиев та юҡ! Парткомдан белешегеҙ!

Ярты сәғәттән Ҡотлояровтың документтары эштән бушатыу өсөн ректорға әҙерләнеүен әйттеләр.

— Доцент Ҡотлояровты эштән ебәреү хаҡында һүҙҙең булыуы ла мөмкин түгел! — Ректор ҡул аҫтындағыларға тауыш күтәрҙе. — Доцент Ҡотлояровҡа фатир бүлеү мәсьәләһен хәл итергә!

* * *

Вәлиев — кафедра мөдире. Ул Мәскәүгә киткән, шунда эш тапҡан тип тә һөйләйҙәр. Бөгөн — Мырҙанов. Ул, ғаризаһын тотоп, ректор ҡаршыһында ултыра.

— Ҡайҙа китәһегеҙ?

— Әллә инде, — тип устарын йәйҙе доцент. — Моғайын, Ҡаҙағстанға юл тотормон. Аҡтүбә ҡалаһында медицина институты бар. Шунда балалар хирургияһы кафедраһына!

Ректор Ислахов сәсрәне:

— Нисек Ҡаҙағстанға? Һинең башың бармы ул, юҡмы? Башҡорт хирургы, әҙер белгес! — Ректор ярһыны: — Доцент, һин шуны ҡолағыңа һырға итеп таҡ: һин — беҙҙең кадр, башҡорт мединституты белгесе! Ҡаҙағстанға китһәң дә, минең мәйетем аша ғына китәсәкһең!

— Профессор, Зыя Ислахович... — Мырҙанов аяғүрә баҫты.

— Ултыр, туҡта... — Ректор һулышын тигеҙләй алмай борһаланды. — Кем һеҙҙе Ҡаҙағстанға ебәрәм тине, кем?

Доцент көлөмһөрәне.

— Әй, Именлек комитетына саҡырҡайнылар... Тегеләр ҡыҫа башлағас, ярай, мединституттан китәм дә, Ҡаҙағстанға олағам, тип әйтеп ташлағайным. — Мырҙанов ауыр көрһөндө. — Әләйһә, өҫтән төшмәйҙәр. Ялҡтым мин! — Доцент ҡул иҙәне.

Ректор өҫтәл төйҙө:

— Доцент, һин бер ҡайҙа ла китмәйһең! — ул Мырҙанов ғаризаһын күҙ тәңгәленәсә күтәрҙе лә йыртып бәрҙе. — Һин — башҡорт балаһы, артабан да ошо ерҙә, ошо мединститутта эшләйәсәкһең. Ҡабатлап әйтәм: һин Ҡаҙағстанға бары минең мәйетем аша ғына... Әле мин тере.

Доцент Мырҙанов артынан кабинет ишеге ябылды, ә ректор хәлһеҙләнеп кире креслоһына сүкте. Оҙаҡ ултырҙы. Бүлмәне эңер ҡараңғылығы биләне. Бәлә: уның өсөн башҡалар баш һала, зыян күрә, ә ул, обком мине генә урынымдан төшөрөргә маташа, тип уйлаған... Уның өсөн күптәр күтәрелгән, егерме бер кеше

баш күтәргән... Хәҙер улар, боласы исеме алып, эҙәрлекләнә. Ә ректор шул хаҡта бер ни белмәй, тыныс ҡына ултыра бирә. Уның яҡлылар бәләгә тарый, егерме берҙе берәмләп сүпләйҙәр. Төрлө сәбәп тағалар, бәлә яғалар. Унан ректорҙың үҙенә лә сират етер...

Нимә был? Һәләкәтме? Бөтөн ыҙалы тормошоноң осомо, сағыу йомғағымы? Шуға тип ынтылдымы ул ғүмере буйы, шуның өсөн иленә — Башҡортостанына әйләнеп ҡайттымы? Нимәгә кәрәк ине бөтәһе лә?

Ултырҙы ла ултырҙы, уйҙары Ағиҙел һыуылай аҡты ла аҡты. Уларҙың осона, яфаларының ахырына сыға алманы бисара профессор. Ул иленә — ғәзиз әсәһенә баш эйеп ҡайтҡайны, ә әсәһе, гүйә, унан йөҙ сөйөрҙө.

Ҡеше, һин кем тыуған илеңдә? Солтанмы, олтанмы?.. Бисара, өтөлһөн, әйҙә, йөрәгең көл-күмергә ҡалһын ул! Һин үҙ Мәскәүеңдә быҫҡып ятырға уйлағайның — әйҙә, үҙ илеңдә көйрә, йөрәк осҡондарын сәсрәт ғаләмгә! Һинән, ахырыһы, илең ҡорбан һорай. Тағы, тағы ҡорбан... Улы Ишбулды, Маһира ҡатыны аҙ булдымы ни яҙмышында? Башҡорт дәүләт медицина институты ректоры, имеш. Интеллигент зат... Ян, уртәл һин шул усаҡта, ректор! Был — һинең яҙмышың: өлөшөңә төшкән көмөшөңдөр.

* * *

...Был күренеште урап үтеү мөмкин түгел, ул — аҙым һайын. Төтөн ише күҙҙе әсетә, болот ише күкте ҡаплай. Башҡортостанда ул төп мәсьәләләрҙең береһе — башҡа мәсьәләләр уға бәйле. Уны күрмәҫ өсөн һуҡыр, ишетмәҫ өсөн һаңғырау булырға кәрәк. Башҡортостандағы бөтә хәл ошо ике халыҡ мөнәсәбәтенә бәйле. Ул тормоштоң бөтөн өлкәләренә үтеп инә.

Бүтән берәү ҙә аңламағанса, бүтән берәү ҙә тоймағанса тоя ректор быны. Бөтә кеше уның тәьҫирендә йәшәй, әммә өндәшмәй, әллә күҙ йома, әллә ҡул һелтәй. Профессор, юҡ, быны менән килешмәй. Ул — ғалим, илдә барған хәлдәрҙе тоя, өйрәнә, йәмғиәттәге мөнәсәбәттәргә уның үҙенең дә мөнәсәбәте бар.

Башҡорт иленең ҡамсыһы — обком. Обком бөтә ергә лә, бөтә мөнәсәбәттәргә лә ҡыҫыла, ул бөтә эште үҙ ыңғайына борорға маташа. Ә ул үҙе кем ҡулында һуң?

Ректор, мединституттағы хәлдең юғары уҡыу йорттары ректорҙар советының Башҡорт дәүләт университетында уҙған кәңәшмәһендә тикшерелеүен ишетеп, шаҡ ҡатты. Университет ректоры шунда төкрөк сәсеп вәғәз тота, мединститутты тикшерә, мединститут эшенә ҡыҫыла, быны кем уға рөхсәт иткән? Ниңә ул үҙен донъя кендеге, Алланың ҡашҡа тәкәһе итеп хис итә? Авиация институты ректоры аҡыллыраҡ, өндәшмәй, бүтәндәр ҙә ауыҙҙарына һыу уртлағанмы ни. Ҡөтәләр. Обкомдың һуңғы һүҙе нисегерәк булыр, йәнәһе...

Ректор ауыр уйҙарынан аҙай. Күҙҙәрен йома, шул мәхшәрҙән нисек тә ҡотолорға итә. Дала иңендә һаман аттар кешнәүе ишетелә, ҡамсы һыҙғырыуы яңғырай. Һауаға саң-туҙан бағанаһы күтәрелә. Был әллә ысынмы, әллә кинокадрҙарҙы шулай күрәме? Ул ниндәйҙер тотҡонлоҡҡа эләкте. Һаман шунан ҡотола алмай.

* * *

Алламоратов уйланып йөрөнө-йөрөнө лә, Үҙәк Ҡомитеттағы бер бүлек мөдире — элекке һабаҡташы менән кәңәшләшкәс, тура РСФСР фән һәм юғары уҡыу йорттары министрлығына үҙе шылтыратты.

Башта министрға обком бюроһы ҡарарының зарурлығын аңлатты, партия комитеттарының ҡарарын үтәү түбән торған ойошма, министрлыҡтар өсөн мәжбүри, имеш. Телефон сымының теге осонда ыҡ-мыҡ иттеләр. Ахырҙа шулай килешелде: обком бюроһы ҡарары менән мединститут ректорлығына яңы кешеләрҙе һайлаясаҡтар. Алламоратовҡа шул ғына кәрәк ине. Ул тиҙ-тиләм эшкә тотондо: иң башта институт ректоры Ислаховты үҙенә саҡыртты.

Был әкәмәт осрашыу, хәтәр бәрелеш ине. Институт ректоры менән обком секретарының, теге «күргәҙмә» тарихынан һуң тәү ҡат йөҙгә-йөҙ аңлашыуы.

— Зыя Ислахович, мин әле генә Мәскәү менән, РСФСР фән һәм юғары уҡыу йорттары министры менән һөйләштем... Ул икенсе кандидатураларҙы ҡарарға әҙербеҙ, тине. Шулай булғас, беҙгә Мәскәүгә, министрлыҡҡа яңы кешеләрҙе әҙерләп ебәрергә кәрәк. Ҡемдәрҙе һайлайбыҙ?

Ректор Ислахов шаңҡып ултырҙы. Телһеҙ ҡалған, ҡымшана ла алмай. Алламоратов, ҡаршыһындағы кешенең хәлен аңлап, сәркәтибенән һыу килтерттерҙе. Бөтәһе лә бөттө, оло юлдың осона сыҡтылар, буғай...

* * *

Ғафуан Алсынбаев, төрмәнән ҡайтҡас та, башҡорт интернат-мәктәбенә барҙы. Берәү ҡашына ла инмәне, берәү менән дә осрашманы, ҡарауылсы Ғәлләм ҡартты ғына күрҙе. Әйтте:

— Мин ҡайттым, иҫән-һаумын, Баҡай күҙемә күренмәһен. Күренһә, үҙе белер.

Әйтте лә бөттө, сығып китте. Хәбәр минутында, секундында тегегә еткереләсәген һиҙә ине. Әйҙә, уйланһын бәндә.

Айҙан ашыу ғүмер үттеме-юҡмы, интернат-мәктәп директоры Юлсуриндың эшенән алыныуы ишетелде. Алсынбаев иһә бүтән мәктәпкә урынлашты, уға тағы хеҙмәт дәрестәрен бирҙеләр, шунда ҡурай түңәрәге лә ойошторасаҡ!

Донъяһы юлға һалынды кеүек. Тегеләр күҙенә салынманы. Хәҙер ул дошмандарын стенаға һырыҡтырған кешеләй йөрөнө.

Тағы бер аҙҙан үҙе эшләгән мәктәп директоры уны кабинетына саҡыртты. Уға берәү килгән, киҫәткән. Йә — һин, йә — теге уҡытыусың... Ғафуан Алсынбаев инде директорҙы тынысландырҙы, һеҙгә бер ни ҙә булмаҫ, тип ышандырҙы. Өркөр сағы күптән үткән.

Уны фатиры тәңгәлендә һағалағандар. Артынан икәүҙең лап-лоп йүгереүен һиҙенгәйне, әйләнһә, яңаҡ төбөнә ауыр нәмә килеп ҡунды. Ярай ҡайырылды, валлаһи, лепкәһенә эләгә ине. Тағы әйләнде, тағы бер нәмә маңлайына эләкте. «Ҡастеттыр» тип уйлап өлгөрҙө. Боҙлауыҡ өҫтөнә салҡатан барып төштө. Башы етеп, йөҙтүбән әйләнә һалды. Битлек кейгән икәү типкеләй башланы. Һынын ҡатырып тик ята, тегеләр кинәнә генә. Береһе: «Все!» — тине. Киттеләр. Ғафуан Алсынбаев аңын юғалтты.

Ошо мәлдә мединститут уҡытыусыһы Мазһар Ҡотлояров өйөнә табан атлай ине. Парткомда уның тәртибен тикшерҙеләр. Партком секретарына республика китапханаһынан обком аша ялыу килгән. Йәнәһе, уҡытыусы китапханала янъял ҡуптарып, совет музыкаһы кисәһе үткәрергә ҡамасаулаған.

Ҡайһы бер дәғүәләре дөрөҫ тә кеүек. Парткомда кәрәген бирҙеләр генә, хәтәр «мунса»ла сабындырҙылар!

— Мин бер ниндәй ҙә иғланды йыртманым! — тип ҡарай Мазһар Ҡотлояров, ҡайҙа ти, ишетеүсе лә юҡ.

— Бына китапхана директорының яҙғандары!.. — тип йөҙөн йәмрәйтә Титов.

Хәҙер эш тә, фатир ҙа — хуш!

...Ғафуан, төрмәнән сыҡҡас, бурысҡа булһа ла, өҫтөнә арыу тун алып кейҙе, башында — йөнтәҫ бүрек. Мәләүез төрмәһендә ятҡанда башҡорт ағай өйрәткәйне: «Ғорур бул, энем. Башҡорт шәп кейенеп, үҙ илендә башын юғары тотоп йөрөргә тейеш. Аҡса йәлләмә! Йәштәр һиңә ҡайырылып ҡараһын! Ана, башҡорт ағай килә, тиһендәр».

Һәр ерҙә кешене өҫтөнә ҡарап ҡаршы алалар шул. Хәҙер шул кейеменән дә яҙҙы. Арыу туны анау төндө әҙәм ҡарағыһыҙ булды. Ә дауаханала үпкәһе эсенә аҡҡан ҡанды һурҙырҙылар. Өс банка ҡан. Арҡаһына штык ҡаҙайҙармы ни! Түҙҙе. Алтынсы ҡатында әйтте:

— Етәр, ҡалғаны үҙенән-үҙе һарҡып бөтөр әле.

Ғафуан Алсынбаев, табип кәңәшен тотоп, көн дә әҙ-мәҙ йүгерҙе. Гимнастика ла эшләне. Аяҡтары тыңламай, быуындары яҙылмай, ул иһә һаман ныҡыша. Үҙен ирекһеҙләй.

Егерме бер көн тигәндә ойошҡан ҡан таралды, ә Ғафуан йүгереүенән туҡтаманы. Таҙа тәндә — сәләмәт рух. Ашауы ла арыуланды.

Крупская паркынан сыҡҡас, ҡаршылағы дауахана ихатаһында иҫкәрмәҫтән профессор Ислахов менән осрашты. Профессор дауахана кейемендә ине.

— Ә-ә, ҡурайсы! Таныйым, таныйым!

— Эйе... — тине Ғафуан, ҡыйынһынып. Үҙе халҡы өсөн янып-көйөп йөрөүсе профессор менән күрешеүенә шат ине. Йылы хушлашып айырылыштылар.

* * *

Обком секретары Алламоратов төрлө осрашыуҙарҙа, конференцияларҙа: «Башҡортостанда милләтселек күренештәре күҙәтелә», — тип сафсата сәйнәп йөрөнө. Миҫал итеп Мәғҙән районы военкомын атаны. Имеш, ул башҡорттарҙы баш күтәрергә саҡырған, үҙенең ойошмаһын ойошторған. Улар листовка таратҡан, халыҡты ҡотортҡандар. Өндәмәләре «Башҡортостан» ҡунаҡханаһында табылған, военком Сәғитов етәкселегендә милләтселәр мединституттың ҡайһы бер уҡытыусылары менән Крупская баҡсаһында осрашҡан. Именлек комитеты ваҡытында уяулыҡ күрһәтә, Башҡортостандың баш ҡалаһында бола өҙөлә, етәкселәре ҡулға алына.

«Иң ҡыҙғанысы шул, — тип билдәләй обком секретары Алламоратов, — милләтселек сире ҡайһы бер интеллигенция вәкилдәренә лә йоҡҡан. Сәғитовсылар мединститут уҡытыусылары менән тығыҙ бәйләнештә эш итә».

Шулай республикала милләтсе «военком мифы» тыуҙы. Уның тураһында һәр ерҙә урынлы ла, урынһыҙ ҙа һөйләйҙәр.

Хәбәрҙәр, әлбиттә, Сәғитовтың ҡолағына ла ишетелде, хафаға һалды.

— Беҙгә Башҡортостандан һыҙырға кәрәктер, ә, кәләш? — тип өндәште ул ҡатынына.

Тегеһенең ҡото осто.

— Нисек? Балалар бәләкәй, мин яңы диплом алдым... Мәктәптә эш белешеп бөттөк, һине завуч итәләр...

— Шулайын шулай, тик улар беҙгә тыныс йәшәргә мөрхәт бирмәйәсәк, бына күрерһең.

— Беҙ берәй эш боҙғанбыҙмы?

— Мин — милләтсе, Башҡортостанда бола әҙерләүсе... Ана, райком конференцияһында нимә тип һөйләгәндәр.

Майор Сәғитов Ҡаҙағстан яҡтарына эш эҙләп сығып китте. Төпләнер төйәк, эш табыу менән ғаиләһен дә күсереп аласаҡ. Хуш, Башҡортостан — ғәзиз ил! Тағы бер улың һине ташлап китә.

* * *

Доцент Латиповҡа докторлыҡ диссертацияһын яҡларға мөмкинлек бирмәнеләр. Был һәләтле башҡорт эндокринологы, аптырап, Өфөнән сығып китте, Томск ҡалаһында медицина институтының дөйөм эндокринология кафедраһына мөдир булып эшкә урынлашты.

Күзбәков иһә үҙ бәләһендә үҙе ғәйепле. Улай уҡ һаҡһыҙ, дөрөҫө, мәғәнәһеҙ ҡыланмаҫҡа ине уға.

Нейрондарҙағы физик тирбәлеш тураһында һөйләй алмай ҙа ҡуя студенткаһы, имтиханға яҡшылап әҙерләнмәгән. Шул ҡыҙ әллә нисә тапҡыр имтихан бирҙе, Күзбәков уны әллә нисә ҡат кире борҙо. Һуңғы килгәнендә теге ҡыҫҡа ғына юбка кейгән. Эре һөйәкле, һутҡа тулышҡан... Үҙе уғата ла ҡыйыу икән, яҡын уҡ килеп ултырҙы. Күзбәков та ир кеше бит, йәш, күргәненән ғажиз булды. Был ҡыҙый, моғайын, уға ым бирәлер, эйе, уны саҡыра...

Әллә ниндәй кисерештәр үтте йәш уҡытыусы башынан. Барыһы бер ынтылышта, күҙ асып йомған арала ғына булды. Төкөр имтиханына, мейеләге нейрондарың менән башымды ҡатырма!

— Һылыуҡай! — Ул ҡыҙға һырығып ултырҙы. — Көндәр йәмле, әллә, тим, йылға буйына сығабыҙмы?

— Ҡайҙа?

— Мәҫәлән, Ағиҙел аръяғына...

— Ниңә, була ул... Ә зачетка?..

— Шунда ҡул ҡуйырбыҙ.

Килештеләр. Икенсе көндө Күзбәков теге сибәркәйҙе еңел машинаһына ултыртып йылға буйына елдерҙе, әммә артынан тағы бер еңел машина эйәреүен шәйләмәне.

Ике еңел машина, аллы-артлы теҙелешеп, Дим йылғаһының Ағиҙелгә ҡойған тапҡырына етеп туҡтаны. Күзбәков шаяра-көлә шарапҡа тотондо, ҡыҙ урын йәйә. Уҡытыусы һә тигәнсе йәш егеткә әүерелде, үбешергә үрелде. Ҡыҙ ҙа сос: шул арала зачеткаһын да килтереп сығарған.

Ҡыҙҙың һөйгән егете икенсе машинала ине. Ул үбешергә маташҡан уҡытыусы янына килеп тә етте, һыу эскеһеҙ итеп туҡмап ташланы.

Был йәмһеҙ тарих институтҡа шундуҡ барып етте, унда уҡытыусыны күҙ асҡыһыҙ итеп битәрләнеләр. Улай ғынамы, Күзбәков эшенән ҡыуылды, партия ағзалығынан ҡолаҡ ҡаҡты.

Ректор Ислахов был мәлдә күптән дауаханала ята ине инде. Йөрәк өйәнәге.

## Етенсе бүлек

Башҡортостан ғалимдары Ленинградтағы (элекке Рәсәй империяһы баш ҡалаһы Санкт-Петербургтағы) ҡулъяҙмалар архивында ҡыҙыҡлы документҡа юлыҡты. Уны XIX быуат шағиры Ғәли Соҡорой яҙа: «Без урман башҡортлары буламыз, йәғни төп башҡорттар»... Ә улы мәғрифәтсе Ғарифулла Ҡейеков башҡорт халҡының тәүге фәнни тарихын бәйән итә.

Был яңылыҡ Өфөлә ҙур шау-шыу ҡуптарҙы. Ғалим-ғөләмәләр араһында ғына түгел, ә шағирҙар, яҙыусылар ҡоронда ла шау-гөр килделәр. Сөнки әүәл шул Ғәли Соҡоройҙар төбәгенән сыҡҡан, нәҫел-ҡан тамырҙары шул заттың нәҡ үҙенә барып тоташҡан популяр әҙип: «Мин башҡа ҡәүемдән, нәҫел ебем башҡортҡа ҡатышмаған, үҙем дә гел татарса ғына һөйләшәм», — тип, күкрәк һуғып йөрөнө.

Ғәли Соҡоройҙар төбәгенән булған профессор Һөйәрғолов та уйға ҡалды. Ҡем ул? Ғүмер баҡый күршеләр арбаһында йөрөүсе бәндәме?

Эскенән айнып барған мәлдә башта гөлтләп ут тоҡана. Шул ут бар донъяһын яҡтыртып ебәргәндәй итә. Ҡайҙа ул? Ә, ауылында икән. Тәпәшәк кенә өйҙә нәнәһе ойоҡ бәйләй. Иҫкәрмәҫтән ейәне килеп ингәс, шып туҡтай. Йөҙө йонсоу, ирендәре ҡымтылған. Бары бер аҙҙан ғына терелә, күҙенә нур ҡайта.

— Ай был күҙ тигәнең! Әйҙә, үт, улым, бәләкәс танымай торам.

Ейәне белә: нәнәһе уҫал кеше, бер нимә алдында ла аптырамаҫ. Бары тупһаһында йән атҡан ҡолонсағын күргәс кенә йомшарҙы.

Теге ут гөлтләп тоҡанғанда зиһене тағы яҡтыра.

...Ете йыллыҡ мәктәпте тамамлап ауылдан сығып китергә йөрөгәндә, колхоз рәйесе справка бирмәй йонсотто. Яһил, һис ризалашмай. Атаһы ни егеттең, әсәһе ни — уға барыбер. Берәүҙе лә тыңламай. Нәнәһе үҙе китте.

—Бир һин улыма шул спрәфкәңде, китһен, уҡыйым, ти, бит.

—Юҡ!

Нәнәһе лә еңмеш:

—Балам, уҡығас, ҙур кеше булып китер әле, башлы күренә.

Теге һаман ыҡҡа килмәй, нәнәһе тегенең өҫтөнә ябырыла. Хәс этәс, хәҙер күҙен соҡоп ала:

—Һин башҡортмо, түгелме?

Шунда хакимдың күҙҙәре әйләнеп-тәгәрәп китә. Ултыра төшә был.

Шулай улар — нәнәй менән ейән — өйгә справка тотоп ҡайтҡайнылар. Шунан китте Һөйәрғолов ауылдан.

* * *

Геүләй генә «Өфө» ҡунаҡханаһы. Халыҡ шаҡ ҡата, хайран итә кафе официанттары.

— Баҡай, һин ҡал, башҡаларға ҡайтырға рөхсәт, — тине Һөйәрғолов һуңынан.

Һөйәрғолов ныҡ иҫергәйне.

— Әйҙә, оҙатам, — тине Баҡай. Профессорҙы фатирынаса илтергә лә ҡасырға самаһы!

— Ашыҡма! — тип бойорҙо әшнәһе. — Ултырайыҡ әле. Мин һиңә бер сер асырға йыйынғайным бит әле, әгәр тыңлаһаң...

— Йә...

— Баҡай, яҡташ, беҙ бер-беребеҙҙе студент йылдарынан уҡ беләбеҙ... Шулай булһа ла, дуҫҡай, һин мине бөтөнләй белмәйһеңдер, тип тә уйлап ҡуям. Мин татар түгел, башҡорт бит.

Дуҫы ҡымшанманы.

— Ысын! Беҙ — башҡорттар, мин дә, Тимерхан энем дә. Ышанмаһаң, тыңла.

Һөйәрғолов әшнәһенә справка менән булған теге хәлде һөйләне. Был хәбәрҙе дуҫы нисек ҡабул итеүенә әһәмиәт бирмәй, йәнә коньяк ҡойоп эсте.

— Паспорт алыштырырға йөрөйөм. Ҡайттым ауылға. Өйҙә лә, урамда ла «татарбыҙ», «телебеҙ — татар» тиҙәр. Әүәлге шул әүлиә нәнәйем: «Паспортыңа кем тип яҙылаһың?» — тип һорай. Әллә, тим. «Беҙ — башҡорттар», — ти был тағы.

Паспортты «башҡорт» тип алдырҙым. Бәлки, институтҡа ла еңелерәк үтермен, тип өмөтләнгәнмендер.

Паспортының икенсе битендәге яҙыуға төрттө Һөйәрғолов:

— Башҡортмо? Әммә үҙемде бер ҙә башҡорт итеп тоймайым. Башҡорт арбаһынан төшөп ҡалған татар булам инде, ха-ха-ха.

Баҡай профессорҙы оҙатып ҡуйҙы. Ә Һөйәрғолов тура кухняға үтеп, һыуыттҡысынан коньягын сығарҙы. Шуны түңкәрә эсте лә, ҡоланы.

* * *

Был ваҡытта Һөйәрғоловтың тыуған ауылы Ҡуктауҙан уҡыусы балалар профессор өйөнә килә ята ине. Йөҙҙәрендә — нур, осҡон, улар архивтан Ҡуктауҙың шәжәрәһен тапты бит!

Шәжәрәне күренекле яҡташҡа күрһәтәсәктәр: ниһайәт, шәжәрә — нәҫел йылъяҙмаһы — ҡулда, улар нәҫел тамырҙарын юлланы! Улар — башҡорт, башҡорт иленең аҫабалары!

Бынан бер нисә ай элек кенә профессор Һөйәрғолов яҡташтары саҡырыуы буйынса ауылына ҡайтҡайны, шунда осрашты балалар менән. Мәктәпкә саҡырҙылар. Ҡуктау ауылының тарихын күрһәттеләр, ауылдың иң оло кешеһе ҡулы менән яҙылған ҡулъяҙма. Уҡый алманы профессор. Ғәрәп графикаһы... Ауылдың боронғо тарихы, нәҫел-нәсәптең яҙмаһы, имеш. Әүәл ауылда йәшәгәндәрҙең нәҫел тамырҙары теркәлгән. Хәҙер уҡыусылар мәктәптә шәжәрә байрамы үткәрергә йыйына, профессорҙы шул байрамға саҡыра.

Ҡайт, профессор, ауылыңа, күр иленде! Яҡташтарың, туғандарың һине һағынып көтә! Бер шау-гөр килешеп алырһығыҙ, тыуған яҡта яҡындар менән сәхрәлә йәйрәп ултырырһығыҙ. Эйе, үткәндәрҙе иҫләрһегеҙ, туған-тыумасаны барларһығыҙ!

* * *

— Профессор, профессор... — Профессор уянмай.

— Зыя Ислахович, Зыя Ислахович... — Ул асырғана, ашыға, ә ауырыу моңшаймай ҙа. Уға барыбер.

Обком вәкиле аптырап бөттө, ул — фән һәм юғары уҡыу йорттары бүлеге мөдире, Алламоратов ҡушыуы буйынса йөрөй.

— Зыя Ислахович, ошонда ҡул ғына ҡуйығыҙ!

Обком вәкиле ғаризаға ҡул ҡуйҙырып алһа... Алламоратов өйрәтте, имеш, профессор үҙе имза һалһа, тауыш булмаясаҡ, берәү ҙә ғауға күтәрмәҫ.

— Профессор, профессор... — Бүлек мөдире тартҡыслай, ҡағыҙҙы сирленең танауына уҡ төртә.

— Һеҙ кем?

— Мин обкомдан... Алламоратов ебәрҙе. — Бүлек мөдире ҡабаланды. — Ошонда ҡул ҡуйығыҙ ҙа...

— Ҡуймайым... — Профессор тағы иҫен юя.

* * *

Был арала мединституттың үҙендә лә ғәләмәт хәлдәр ҡупты. Тиктомалдан партком ағзалығынан доцент Мәмбәтов сығарып ташланды. Был, әлбиттә, обкомдың туранан-тура күрһәтмәһе буйынса Титов тарафынан эшләнде. Мазһар Ҡотлояров тәртибен тикшергәндә Мәмбәтов йәш уҡытыусыны яҡлап сыҡҡайны, тегеләргә шул да оҡшамаған.

Обком иһә мединститутта йәһәтләп ойоштороу эштәре атҡарып ташланы. Фән һәм юғары уҡыу йорттары бүлеге мөдире мединститутты ң яңы ректоры итеп профессор Лазареваны тәғәйенләне. Лазарева Мәскәүгә Мөхәмәтов менән икеһе бергә барғайны. Министрлыҡ коллегияһы профессор ханымды һайлаған.

* * *

Мединституттың элекке партком секретары диссертацияһын яҡлай алманы. Улай ғына түгел, уны институттан да китергә мәжбүр иттеләр. Нәҡ шул мәлдә Герасимов БАССР Һаулыҡ һаҡлау министрлығының икенсе һанлы дауаханаһында начмед эҙләүҙәрен ишетте. Икенсе аҙна башында ул шул ҡамытҡа егелгәйне.

Тәүге эш көнөнән һуң тура палатаға, профессор Ислахов янына ашыҡты. Профессор, һинд кешеһеләй, аҡ салмаларға уранған. «Бөтөрөнгән», — тигән уй үтте начмед башынан. Шулай ҙа йылмайырға, һөйләшергә кәрәк. Герасимов телгә бөткән бәндә бит.

— Ултыр, — тине профессор ыңһырлап. — Хәлдәр нисек?..

— Хәлдәрҙе үҙегеҙ ҙә беләһегеҙ инде, Зыя Ислахович.

— Мин уларҙы һинең ауыҙыңдан ишеткем килә.

— Министр Рәжәповҡа өс рәт барҙым. Диссертациямдың етәксеһе бит. Һуҙа. Тағы ни әйтәһең инде уларға... Иң мөһиме...

— Туҡта, Коля! — Профессор карауатынан тороп уҡ китте. — Хәҙер мин Рәжәповҡа барам...

— Ҡайҙа, Зыя Ислахович?! Мин ҡаршы! — Герасимов профессорҙың юлын киҫте.

— Коля, Николай Николаевич, мин... — Профессор үрһәләнде. — Туҡта, Коля, телефонды бир әле.

Герасимов теләкһеҙ генә телефон трубкаһын һона, ә теге бисара трубкаға сат йәбешә.

— Алло! Алло, был — профессор Ислахов. Эйе, эйе, мединститут ректоры... Эйе, больницала ятам. Рәжәпов, Герасимовтың диссертацияһы һинең сейфыңда ята! Шуны ал да бойомға ашыр әле... Был нимә тиһеңме? Был — үтенес, ҡарт профессор Ислаховтың һиңә ҡәбергә инер алдынан еткергән үтенесе, эйе. Юҡ, юҡ, ысынлап шулай. Нимә? Ул — ялҡау, тел биҫтәһе?.. Туҡта, Рәжәпов, мин һиңә һуңғы тапҡыр әйтәм: һин шул диисертацияны ал, икенсе, өсөнсө ҡат ҡара! Юҡ, юҡ! Туҡта, Рәжәпов, һин борғоланма:

Герасимовты ҡабул ит, шунан... Был нимә? Был — талап, был — профессор Ислаховтың министр Рәжәповҡа эш йөкмәүе! Аңлашылдымы? Профессор Ислахов талап итә, эйе, эйе, ҡәбергә инер алдынан һиңә бурыс ҡуя. Дәүләт әһәмиәтендәге талап!

...Герасимов та, профессор ҙа аптырап ултырҙы.

— Зыя Ислахович...

— Әйттем, Рәжәпов иртәгә килергә ҡушты, юҡ, миңә һүҙ бирҙе: ул, министр, һинең диссертацияңды ҡарар. Ҡотлайым, комиссар, диссертацияң менән!

— Рәхмәт, Зыя Ислахович! — Герасимов ҡыуанманы ла, бары үҙенекен тылҡыуын белде: — Иң мөһиме: һеҙ үҙегеҙ бирешмәгеҙ! Әләйһә, яҡынтирәгеҙҙәге тоғро егеттәрҙе сүпләй башланылар. Ишеттегеҙме, һуңғы ултырышта Титов командаһы Мәмбәтовты партком дан сығарған?

— Ишеттем. — Профессор тәҙрә яғына ҡайырылды.

— Ул да егерме бер араһында теге хатҡа ҡул ҡуйғайны бит. Һеҙҙе яҡлаусыларҙы эҙәрлекләйҙәр, берәмләп сүпләйҙәр. Шулай ҙа бирешмәгеҙ, һеҙ — беҙҙең таянысыбыҙ!

— Рәхмәт, Николай. Минең юғалтаһы әйберем ҡалмаған, кресло тип тә ҡалтырамаҡным.

— Беләм, Зыя Ислахович, эш бында креслола ғына түгел, һеҙгә беҙҙең бөтә принциптарыбыҙ бәйләнгән. Тағы бында һеҙҙең халҡығыҙҙың төп ихтыяждары, уның күрше ҡәүемдәр менән хәтәр яғалашыуы ла ята, буғай.

* * *

Еңел түгел Ислаховҡа. Латипов менән Вәлиевтың, Герасимовтың институттан ҡыуылыуы — ҙур юғалтыу. Был — ысын геноцид! Өҫкә ҡара яу ябыла, ысын ахырзаман тыуа. Ниндәй афәт, ниндәй яу булды һуң был? Яр ситенә килтереп һырыҡтырҙылар... Мәскәү йыраҡ, ә обком — ҡаршыла...

Обком — башҡорт иленең ҡамсыһы. Тау текә — атҡа ҡамсы кәрәк. Ҡамсыһыҙ — эш һанһыҙ.

Обком комиссияһы башлығы ла башҡорт түгел. Рәжәпов та, Алламоратов та. Номенклатураға инеү өсөн генә паспорттағы яҙыуҙы алмаштырмаһалар...

Ул һалған һарайҙың терәк бағаналары ауа. Фекерҙәштәргә ысын ау ҡорғандар! Ислахов үҙе — дауаханала, ҡулы ҡыҫҡа.

Ҡәфиә килгәс, үҙен өйгә алып ҡайтыуын үтенде. Өйҙән институтҡа яҡынйраҡ. Бында уны юрый тоталар! Ул эшләй ала, ул — һау...

Ә Ҡәфиә ханымдың ҡолаҡ осонда — врач өнө: «Профессор яңыраҡ икенсе инфарт кисерҙе».

* * *

Олпат һынлы уҙаман палата тәҙрәһенән алыҫ уба һыртына баҡҡан. Батып барған ҡояш түккән монар барса офоҡ ситен ялмай. Монар яйлап уба итәктәренә, урман баштарына йәйелә. Әйтерһең, алһыу-һарғылт шаршау яба иңдәрҙе. Ер шымтайған.

Әллә күпме дәүер үтә. Ҡапыл тау артынан бихисап һыбайлылар килеп сыға, барса буйҙы ҡара кейемлеләр ҡаплай. Меңәрләгән ат тояғы тупылдауы, һыбайлылар һайтлауы...

«Ахырзаман ябырылыуы», — тип уйлай профессор. Ҡулы ҡалтырай, йөрәге ҡыҫа. Дала өҫтөндә ат кешнәүе, ҡамсы һыҙғырыуы... Баш осонда меңәрләгән ҡылыс ялтлай, һөңгөләр... Ҡара кейемле кешеләр.

...Профессор тағы иләүһерәп уяна. Шул ҡара яу, шул бер үк төш.

Ике халыҡ тартышы — ҡара яу. Был йәшертен, ҡысҡырып һөйләмәй торған ғәмәл, әммә профессор унның менән аҙым һайын осраша. Мединститутта ысын мәхшәр: башҡорт милләтле уҡытыусыларҙы ҡыҫыу, эштән ҡыуыу... Был хаҡта берәү ҙә өндәшмәй, тауыш күтәрмәй, башҡорт обкомы комиссия ла төҙөмәй.

Кешеләр бөтәһе лә бер төрлө, ә милләттәр, илдәр... Башҡорттоң үҙенә илен ташлап ҡасаһы ғына ҡала... Ҡырғын ябырылыуы уны ҡабат тау-таш араһына, урманға ҡыҫа, ә урман бөтһә, кемгә барып баш эйергә тейеш унның халҡы? Кемгә морон төртә ала ул? Кем яҡлар, ярлыҡар? Уйламаҫ та ине профессор, тик уйға, хыялға баш булып буламы?

...Триптихын уйлаһа, еңел булып китә. Донъяһы ла ошо яҡты йыһан кеүек киң, иркен. Унда бөтә әҙәми заттарға ла урын етә. Тыныс, һыйышып йәшәргә мөмкин. Яуҙар, низағтар бөткән, этешеү-төртөшөү кәрәкмәй; бар тере йәнгә кинәнеп йәшәргә, үҙенсә көн күрергә йәтеш. Әйҙә, «башҡорт», «татар», «урыҫ» йә «йәһүд» тип аталһындар, үҙ диндәрен, йолаларын тотһондар — ни зыян, донъя төрлөлөгө менән матур. Сәскәләр йәйғоро. Йәйғор ҙа шуға йәйғор, ул бар төҫтө үҙенә йыйған, йыһан нурлы — йондоҙҙар бихисап. Әгәр йәйғорҙың бер генә төҫө юғалһа, йыһанда бер генә йондоҙ һүнһә... Әгәр ерҙә бер генә ҡәүем юҡҡа сыҡһа...

...Әллә ниндәй рәхәтлек кисерә! Ниндәй нурлы йөҙҙәре! Хатта профессор үҙе лә һауығып киткән һымаҡ. Ошо триптихты күҙләгәндәй иткәс, зиһене асылды, йөҙө яҡтырҙы. Тормош матур, ғүмер мәғәнәле. Тағы ла оҙағыраҡ йәшәге килә. Был картина йәшәүгә, бәхеткә саҡыра лаһа! Ул — яҡтылыҡ, йылылыҡ...

Тулҡын былай табан ябырыла. Юлындағыны емерә, вата. Профессор тағы шул ҡырғын ябырылыуына тарыны. Ул бер ташҡынға, бер биниһая ғәскәргә әйләнә. Офоҡ битенәсә һуҙылған ғәскәр, ҡайҙа был ташҡындың осо-ҡырыйы?

— А-а...

Сестралар йүгерәшә. Бер нисә минут эсендә палата кинәт ысын яу яланына әйләнә.

* * *

...Башҡорт дәүләт медицина институтының ҙур залы. Әләмдәр төшөрөлгән, оло тәҙрәләрҙең ҡорғандары ябыулы: күрәнһыу, йәшкелт селтәрҙәр гүйә хәсрәттән аҫҡа һәленгән. Ғалимды һуңғы юлға оҙатырға йыйылған кешеләрҙең дә баштары аҫҡа эйелгән. Бөтәһе лә аңлашыла кеүек: кешегә һуңғы хөрмәт күрһәтәләр, бөтәһе лә ҡәҙимгесә. Әммә был әмәл ҡабат яңы төҫ ала, хәс тә был тәү ҡат ҡына атҡарылған һымаҡ.

Бейек табутта оҙон ғүмерен көрәштә, хеҙмәттә үткәргән зат, үҙ иленең тоғро улы, дөрөҫөргә, ошонда йыйылғандарҙың остазы ята. Был дәрәжәле юғары уҡыу йортонда ул етәксе ине. Хәҙер тирәһен профессорҙары, студенттары һырыған. Кемделер көтәләр, буғай. Беләктәренә повязка таҡҡан кешеләр үтеп-һүтеп тора, бер ниндәй ығы-зығы юҡ. Берәү ҙә ашыҡмай.

Бәләкәй шаулашып алдылар. Өлкә комитетының беренсе секретары килгән икән! Барыһы ла урынында, матәм йыназаһын башларға ярай: ерләү комиссияһы

башлығы һүҙ ала. Ул оҙон-оҙаҡ сурытып тормай, иң кәрәкле генә һүҙҙәрҙе теҙә. Медицина институтының ғәмәлдәге ректоры профессор Лазарева телмәр тота, мәрхүмдең ғүмер юлын байҡай. Институт залы өнһөҙ, хатта сымсырыҡ иткән өн дә ишетелер. Уҡытыусылар, студенттар башын эйгән. Обкомдың беренсе секретары янында фән һәм юғары уҡыу йорттары бүлеге мөдире, һаулыҡ һаҡлау министры Рәжәпов, мәҙәниәт министры Харрасов, ә Алламоратов күренмәй.

Алып барыусы профессор Таһиров исемен атай. Таһиров артынан партком секретары Титов, Ҡыяметдинов һөйләй. Ҡыяметдинов хәҙер институт парткомы ағзаһы. Уларҙан башҡа бүтән берәүгә лә һүҙ бирелмәйәсәк, юҡ, был рәсми сара, бында оҙон-оҙаҡ һуҙыуҙың фәтүәһе юҡ, ярамай ҙа. Мөхәмәтов менән Бикбулатов һүҙ һорағайны — булмай. Профессор Ислаховтың вариҫтары бында — бөтә институт.

Институт залының түшәме бейек, тәҙрәләре оло, бөтәһе лә әүәлгесә ҡала: шаршауҙар төшөрөлгән, көрәнһыу, йәшкелт селтәрҙәр... Ерҙән бер кеше китте тип, тормош туҡтап ҡалмаҫ инде. Хәйер, Ислаховтың вариҫтары бар, улар ҡала...

Ҡәфиә ханымдың башына ирекһеҙҙән ошондай кире уйҙар ҙа тула, тик уларҙы ситкәрәк ҡыуа. Ҡүңеле, юҡ, ти, ошондай ҙа оло кешенең уй-теләктәре, хыялы ерҙә ятып ҡалмаҫ. Үҙенә үҙе шуны туҡый бисара ханым: өмөттө өҙмәйек, килер быуындар профессорҙы үҙенсә баһалар, бөгөн был хаҡта уйлайһы мәл дә түгел бит.

## Эпилог урынына

Хәҙер Баҡай өйөнә бикләнде, эшен күптән ташлағайны. Өйөндә генә, шулай бар донъянан ваз кисеп йәшәй. Туйҙы тормоштан. Хәсәнов дуҫы килһә, донъя хәлдәре менән таныштырып китә. Донъяһы хәҙер өйө тирәһе менән сикләнде. Боронғо зиннәтле шкафы төрлө монаят, ҡағыҙ менән лыҡа тулған. Күп кәрәкме ни яңғыҙ башына: шарапты бер-ике рюмка түңкәрһә, көндөң буйы аңҡы-тиңке йөрөй. Ҡарсығы һуҡрана. Юҡ, ул берәүгә лә теймәй, уға ла теймәһендәр. Ҡурҡҡанға ҡуш күренә. Ҡотмағанда арттан килеп сығырҙар төҫлө. Хәсәнов дуҫынан яңылыҡ көтөп йәшәй.

— Ҡем?

— Хәсәнов. Ас, Баҡай!

— Хәсәнов тиһең инде, тәк.

— Баҡай, ас, ас!

— Тәк, Хәсәнов.

— Эйе, Хәсәнов, Хәсәнов! Ас!

Ишекте астыра алмай йөҙәй Хәсәнов. Ҡем уйлаһын, был әҙәм Баҡай ҡарт тип. Заманында бөтә Өфөнө ҡулында тотҡан Баҡаев.

* * *

Доцент Вәлиев заманында эш юллап Мәскәүгә сығып киткәйне. Медицина институтына урынлашты, шунда эсәк сирҙәре буйынса докторлыҡ диссертацияһы яҡланы, бөгөн ул билдәле профессор. Тыуған яғы — Башҡортостанға ла ҡайтып китә.

Профессор Латипов Томскиҙа йәшәй, илебеҙҙең таныулы эндокринологы. Әйткәндәй, Башҡортостандың үҙендә һәләтле эндокринологтар етешмәй. Институтта эндрокринология кафедраһы бар барлыҡҡа, әммә ғилми-тикшеренеү

институты йә лабораторияһы юҡ, бары баш ҡала дауаханаларында ғына бүлектәр эшләй.

Мәмбәтов та фән докторы булыуға иреште, тик Башҡортостанда түгел, ә алыҫ үзбәк илендә. Тыуған яҡҡа, ара йыраҡ тип, һирәк ҡайта. Ул — кардиолог. Өфөлә, әлбиттә, кардиология фәне үҫешкән, хатта яңыраҡ кардиодиспансер үҙәк тә астылар.

Ә Мырҙанов менән Ҡыяметдинов Башҡортостанда, мединститутта хеҙмәт итә. Ҡыяметдинов хатта ки теге билдәле ваҡиғаларҙан һуң мединституттың ректоры булып китәсәк, тик был вазифала уны бик оҙаҡ тотмаҫтар, йәһәтләп урынынан төшөрәсәктәр. Аҙаҡ депутат булып һайланыр, теле сиселеп, күп хәбәр һөйләр, зиһене асылып китеп, хатта китап та яҙып ташлар... Ә Мырҙанов, сәмсел, терәпес егет, теге хәлдәрҙән һуң Ҡаҙағстанға сығып киткән еренән кинәт кенә кире ҡайтты. Институтта күкрәк хирургияһы кафедраһын етәкләне. Ул — ныҡыш йән, әммә аҙаҡ шәкәр сиренә тарыр, дауаланмай йөрөп, иртә вафат булыр.

Ә Герасимов — һаман 2-се дауаханала начмед; диссертация яҡлауын яҡлар, тик фәнгә әллә ни ылыҡмаҫ.

Шулай, бигүк сүгеп тә ҡалманы, баш осонда дауыл ҡоторһа ла, бөгөлөп тә төшмәне элекке ислаховсылар, ләкин күптәр заманында эшһеҙ ҡалды, ситкә тибелде, ә ғаиләләре ас булды.

Мәрҙәндең элекке военкомы майор Сәғитовтан әле булһа хәбәр юҡ. Уның яҡташы Ҡотлояров Мазһар ҙа дүрт йыл инде гүр эйәһе. Уны аҡылдан яҙған тип тә һөйләнеләр.

Тарих еле шулай ислаховсылар тураһындағы хәтирәләрҙе төрлө тарафҡа һипте, төрлөсә итеп биҙәне яҙмыштарҙы. Хәйер, профессор Ислахов үҙе лә күптән инде был яҡты донъяларҙа юҡ, уның арҡаҙаштары тураһындағы хәтер ҙә тарих биттәренән юйылып бара. Бәлки, киләһе быуындар, бик тә ҡыҙыҡһыныусан вариҫтар уны юллап сығыр...

* * *

Хәҙер Баҡай ҡарт тупһаһын аша атламай. «Ныҡ биреште ҡарт», — тип һынаны Хәсәнов. Ысынлап та, дошманы менән йөҙмә-йөҙ осрашыу хәүефле. Хәҙер ҡурайсы яралы йыртҡыс хәлендә... Ҡон ҡайтарыуы ла ихтимал. Көпәкөндөҙ бысаҡ тығып китһә лә, берәү ҙә арттан юллап йөрөмәҫ. Вәт һиңә донъя! Хәсәнов та бүрһыҡтай өңөнә боҫҡан дуҫына йөрөп ялҡты.

— Эйе, — ти Баҡай ҡарт. — Ҡартлыҡ — шатлыҡ түгел, Ғафуан...

— Ҡем? Мында Ғафуан юҡ та... — Хәсәнов күкрәгән төйә: — Мин, мин — Хәсәнов!

— Ә, Хәсәнов туғаным, миңә ни хәҙер... Иҫһеҙләнәм, кеше танымай башлағанмын... Ҡолаҡ та ҡатты, аяҡтар тыңламай.

— Ә башҡортса шәп фәстерәһең... — тип мыҫҡыллы көлдө дуҫы.

— Хи, үҙ телеңде ни... онотмайһың инде.

Шунан һуң Хәсәнов бүтәнсә Баҡай дуҫына бармаҫ булды.

Ишеткәндәре хаҡында аҙаҡ ҡына обкомға, Алламоратовтың үҙенә барып һөйләйәсәк. Һис шикһеҙ ишеттерәсәк уйын обком түрәһенә. Бәндә хәлен бәндә белеп торһон.

1994—2014 йй.